# **Башҡорт теленең практик курсы**

Күнегеүҙәр йыйынтығы

Өфө
БДУ
2004

## Хәҙерге башҡорт алфавиты

| **Баҫма хәреф** | **Хәрефтең әйтелеше** | **Баҫма хәреф** | **Хәрефтең әйтелеше** |
|---|---|---|---|
| Аа | [а] | Пп | [пэ] |
| Бб | [бэ] | Рр | [эр] |
| Вв | [вэ] | Сс | [эс] |
| Гг | [гэ] | ç | [çэ] |
| Ғғ | [ғы] | Тт | [тэ] |
| Дд | [дэ] | Уу | [у] |
| Ҙҙ | [ҙы] | Үү | [ү] |
| Ее | [йэ] | Фф | [эф] |
| Ёё | [йо] | Хх | [ха] |
| Жж | [жэ] | Һһ | [һы] |
| Зз | [зэ] | Цц | [цэ] |
| Ии | [и] | Чч | [чэ] |
| Йй | [йэ] | Шш | [ша] |
| Кк | [ка] | Щщ | [ща] |
| Ҡҡ | [ҡы] | ь | нәҙеклек һәм нәҙек айырыу билдәһе |
| Лл | [эл] | Ыы | [ы] |
| Мм | [эм] | ъ | ҡалын айырыу билдәһе |
| Нн | [эн] | Ээ | [э] |
| ң | [ңы] | Әә | [ә] |
| Оо | [о] | Юю | [йу] |
| Өө | [ө] | Яя | [йа] |

# “Морфология” буйынса күнегеүҙәр

## Исем

*1. Бирелгән һүҙҙәрҙе төркөмләп яҙырға:*

болан, эт, айыу, кәзә, төлкө, һарыҡ, бесәй, ҡуян, ишәк, бүре, дөйә, алйырҙан, һыйыр, йомран, ат, ялман, бурһыҡ, һыуһар, ҡондоҙ, мышы, аҫ.

*Ҡырағай хайуандар һәм йәнлектәр:*

*Йорт хайуандары*:

*2. Түбәндәге һүҙҙәрҙе килеш менән үҙгәртергә:*

а) япраҡ, һабаҡ, ҡыуаҡ, ауыҙ, ҡағыҙ, һауыт, грипп, ат, портфель, ысыҡ, юрға, тамсы, ҡайын, урғыстар;

б) ерек, еләк, тирәк, күҙ, һүҙ, егет, сәғәт, эт, емеш, еңеү, ишкәк, бүлмә, йәйен, себеш, сәскә, йүкә, үләндәр;

в) ҡорот, ҡорос, толоп, ҡолон, болон, борос, һоло, болот, боролош, борғо, йоғонто, йомош, йондоҙ, ҡол, ҡорт;

г) көмөш, һөлөк, көн, төн, Өфө, өкө, бөркөт, төтөн, һөйөнөс, төлкө, бөртөк, төҙөлөш, көйөнөс, бөрө, йөн, көҙ.

*3. Һүҙҙәргә тейешле ялғау ҡушып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға:*

Себеш... (*нимәне*?) көҙ һанайҙар. Аҡыл йәш... (*нимәлә*?) түгел, баш... (*нимәлә*?). Тел ҡылыс... (*нимәнән*?) көслөрәк. Әсәйем ҡорот... (*нимәне*?) оҫта яһай. Күктә йондоҙ... (*нимәләр*?) емелдәй. Етегән йондоҙ...(*нимәне*?) табыуы ауыр түгел.

*4. Һүҙҙәргә тейешле ялғау ҡушып, әкиәтте уҡырға:*

Борон-борон заманда эт үҙенә хужа эҙләп сығып киткән. Ул юлда бүре... (*нимәне*?) осратҡан. Уның менән бер аҙ йәшәгән. Ләкин бүре... (*нимәнең*?) айыу... (*нимәнән*?) ҡурҡыуын күргән. Бүре... (*нимәне*?) оҡшатмай, ташлап киткән. Айыу... (*нимәне*?) һәм арыҫлан... (*нимәне*?) ла яратмаған. Кеше... (*кемдең*?) бөтә нәмәнән дә көслө булыуын аңлап, кеше... (*кемдә*?) ҡалған.

*5. Һүҙҙәргә күплек ялғауы ҡушырға.*

а) боҙ, бал, еләк, ҡыяр, таҫма, ғүмер, канау, аусы, елкә, көтөү; б) тоҙ, һал, иләк, баяр, баҫма, күмер, танау, яусы, өлкә, кейәү; в) аҡса, алмағас, белем, бесән, бесәй, биҙрә, биҙәк, билдә, бөрө, бөртөк, бөжәк; г) бәйләм, быуа, гәрәбә, гөлләмә, гәүһәр, болон, такси, өлгө, йылмайыу.

*6. Тексты уҡырға, тәржемә итергә, тейешле тыныш билдәләре ҡуйырға.*

Башҡортостан — бай республика. Унда йылғалар күлдәр тауҙар болондар күп. Урманында имән ҡайын ҡарағай йүкә шаулап үҫә. Киң болондарын ал ҡыҙыл һары аҡ зәңгәр сәскәләр биҙәй.

*7. Тексты һәм һөйләмдәрҙе уҡырға, тәржемә итергә, аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙең һанын, килешен билдәләргә.*

Башҡортостан нефткә бай. Нефть Ишембай, Туймазы, Арлан яҡтарында табыла.

Республикабыҙ нефть сығарыу буйынса илдә өсөнсө, ә нефть эшкәртеү буйынса беренсе урында тора.

Нефттең хужалыҡта файҙаһы бик ҙур. Өфө, Салауат, Ишембай заводтарында нефттән бензин, кәрәсин, мазут һәм вазелин алына. Химия заводтарында нефть газдарынан спирт, синтетик каучук һәм башҡа продукттар эшләп сығарыла.

Улар һөйләшә-һөйләшә Әлфиәләргә киттеләр. Көткән яҙҙар килде. Батырға ла ял кәрәк. Иң яҡшы көрәшселәр, йырсылар, ҡурайсылар, бейеүселәр, сәсәндәр йыйылған бында. Дачамда көҙгө сәскәләр күҙҙең яуын алып ултыра. Алһыу ҡыҙҙар менән еләккә китте. Уҡытыусы апай беҙгә китаптар таратты. Аҡыл йәштә түгел, башта. Берлиндан өс яҡка өс юл китә. Беҙгә алтындан ҡиммәтерәк нимә кәрәк. Бөгөн киноға барам. Кескәй Айгөлдөң йоҡоһо килә.

*8. Түбәндәге һүҙҙәрҙе эйәлек заты менән үҙгәртергә:*

атай, әсәй, өй, ағай, йәй, болон, ҡыш, сәғәт, өлөш, ручка, күҙ, көмөш, баш, дин, көҙ, йорт, өҫтәл, йөҙ.

*9. Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙе башҡортсаға тәржемә итергә:*

моя ручка, твой карандаш, наш стол, ваши слова, его книга, их дети, ее вещи, наши знакомые, его брат.

*10. Түбәндәге һүҙҙәрҙе хәбәрлек заты менән үҙгәртергә:*

ағай, атай, бай, батша, белгес, вәкил, илсе, тәрбиәсе, хужа, әҙәм, әфәнде, юлсы, журналист, студент, кеше.

## Сифат

*1. Түбәндәге сифаттарҙы дәрәжәләр менән үҙгәртергә:*

а) һоро, көрән, һары, күк, шат;

б) ал, ҡыҙыл, йәшел, йәш, йомро;

в) оло, саф, ҡоро, ҡара, тура.

*2. Предметтарҙы бер-береһе менән сағыштырып, түбәндәге һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөп яҙырға.*

Таш, ағас, ҡаты. Бүре, арыҫлан, көслө. Айыу, ҡуян, ҙур. Волга, Урал йылғаһы, оҙон. Өфө ҡалаһы, Стәрлетамаҡ, ҙур. Кавказ, Урал тауы, бейек.

*3. Предметтың төрлө билдәләрен белдереүгә ҡарап, сифаттарҙы төркөмләп яҙырға:*

а) предметтың төҫө:

б) предметтың күләме:

в) предметтың характеры:

г) предметтың тәме:

д) предметтың формаһы:

е) предметтың урынына йәки ваҡытына бәйле билдә:

аҡ, ҡыҙыл, ҡара, һоро, бәләкәй, ҙур, йыуаш, сабыр, асы, сөсө, кәкре, тура, түңәрәк, баллы, тәмле, балһыҙ, тәмһеҙ, алғы, өҫкө, яҙғы, йәйге, ҡалалағы, баҡсалағы, һары, йәшел, тоҙло, тоҙһоҙ, йоморо, нәҙек, уҫал, хәйләкәр, зәңгәр, шат.

*4. Түбәндәге сифаттарҙың артыҡлыҡ дәрәжәһе формаһын яһарға:*

а) ҡоро, һоро, ҡара, ҡаты, тура; б) төҙ, йылы, йоморо, аҡ, күк; в) йәшел, зәңгәр, һары, ҡыҙыл, еүеш.

*5. Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙе тәржемә итергә:*

а) елле көн, боҙло һыу, тоҙло аш, баллы сәй, күңелле байрам; б) яҡшы юл, зәңгәр күк, аҡ сәскә, тасуири уҡыу, киң ялан; в) һары себеш, ҡара бесәй, отҡор малай,  тоҙло ҡыяр, ҡомло яр, ҡыҙыл күлдәк, ҡалын китап.

*6. Түбәндәге сифаттар менән һүҙбәйләнештәр төҙөргә:*

а) тура, тылсымлы, тыныс, айлыҡ, ҡышҡы, түңәрәк;

б) саф, һәйбәт, сыуаҡ, талапсан, төшкө, насар;

в) һаран, боҙоҡ, фәнни, ғилми, зарарлы, зауыҡлы;

г) тәмһеҙ, фажиғәле, һыуыҡ, ҡурҡаҡ, илаҡ, әсе;

д) сабыр, өлгөр, оҙон, оялсан, оло, ҡырағай;

е) татлы, тәмһеҙ, шәрбәт, әҙәби, эҫе, сихри;

ж) киске, гүзәл, аҡһаҡ, йыуаш, йомшаҡ, тулы;

з) наҙан, тарихи, синфи, мәҙәни, сәйәси, дини;

и) тере, төҫлө, йәйге, үткер, көләс, һипкелле.

*7. Текстарҙы һәм һөйләмдәрҙе уҡырға, тәржемә итергә, сифаттарҙы табып, дәрәжәләрен  билдәләргә.*

**Төҫлө япраҡтар**

Һуҡмаҡтан терпе килә. Урман тыныс. Уҫаҡ эргәһендә терпе туҡтап ҡалды ла ерҙәге япраҡтарға ҡараны. Ҡып-ҡыҙыл, һап-һары булып яталар япраҡтар. “Ҡыҙыма алып ҡайтайым әле, туйғансы уйнар”, — тине лә терпе бер нисә япраҡты энәләренә сәнсеп алды. Ҡайындың һары япраҡтарын да ҡаҙаны.

Күрһәгеҙ ине терпене!.. Төрлө япраҡтарға күмелеп, терпе килә. Ҡыҙылы ла, һарыһы ла, йәшеле лә, көрәне лә бар. Терпе бәләкәс ҡыҙына йәйғор күтәреп ҡайта.

А.Йәғәфәрова

**Көҙгө урман**

Көҙгө урманда йөрөргә яратам. Уның иң матур сағы сентябрь бөткәндә булалыр. Зәңгәр күккә, йылы аяҙ көнгә, урмандың төрлө биҙәктәренә

һоҡланып туя алмайһың. Тәрән тынлыҡ. Әкрен генә йылы ел иҫә. Ағастарҙан һап-һары япраҡтарҙың ҡойолғаны ишетелеп ҡуя.

Д.Исламов

**Бөрйән**

Бөрйән яҡтары бик матур. Унда төрлө ағастар үҫә. Бейек тауҙар болоттарға тейеп торған кеүек күренә. Тау йылғаларының һыуы бик тәмле. Урмандарында ҙур айыуҙар, уҫал бүреләр, хәйләкәр төлкөләр, йүгерек ҡуяндар, етеҙ тейендәр йәшәй. Тау итәктәрендә тәмле еләктәр үҫә.

“Йәншишмә”

Тоҙһоҙҙо һуҡыр ҙа белә. Ҡарт кеше менән шаярырға ярамай. Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй. Улар ябай, тоғро, аҡыллы. Киң болон, йәп-йәшел үлән, ваҡ талдар. Аҡһыл-һары сәсле, зәңгәр күҙле матур бер йәш егет ине. Матур сәскә сәнскеле була. Аҡыллы ҡатын — хазина. Яҡшы ҡатын — өй күрке.

*8. Шиғырҙарҙы уҡырға, тәржемә итергә, сифаттарҙы табырға.*

**Светофор**

Светофор тора юлда,
Күрһәтә ни бар алда.
Йә киҫәтә: көтөгөҙ,
Йә, рөхсәт, ти, үтегеҙ.
Һары төҫө — иғтибар,
Тимәк, юлда хәүеф бар.
Йәшел янһа — юл тыныс,
Ә ҡыҙылы — ҡурҡыныс.
Юл аша сығыр элек,
Тор, дуҫҡай, шуны белеп,
Тик йәшел янһа ғына,
Сыҡ һин юл аръяғына.

Б.Байым

**Ҡара ер**

Ҡап-ҡара ер... Ләкин, ҡара әле,
Ҡара ерҙә үҫә аҡ гөлдәр...
Ҡара ерҙә үҫкән ап-аҡ гөлдәр
Һис тә һулый торған түгелдәр!
Ҡап-ҡара ер... Ләкин ҡара әле,
Ҡара ерҙә үҫә аҡ икмәк!
Аҡ икмәкте, ап-аҡ гөлдәрҙе
Ҡара ер үҫтерә, ни хикмәт!

А.Игебаев

**Яҡшы һүҙҙәр**

Яҡшы һүҙҙәр ҙә була,
Насар һүҙҙәр ҙә була.
Яҡшы һүҙ менән генә
Минең дәфтәрем тула.

“Йәмһеҙ, ялҡау, тәртипһеҙ,
Алама, ҡурҡаҡ, илаҡ...”
Ундай насар һүҙҙәрҙе
Яратмай минең ҡолаҡ.
“Аҡыллы, матур, тырыш,
Егәрле, тыйнаҡ, түҙем...”
Аҡыллы, матур бала
Булам бит ул мин үҙем!

Ф.Рәхимғолова

**Ҡарбуз**

Тышы йәшел,
Матур ғына.
Туп шикелле
Йомро ғына.
Уның эсе
Алһыу ғына.
Ауыҙға алһаң,
Сыға бал ғына.

С.Әлибаев

**Матур менән көслө**

Бер кем дә юҡтыр
Әсәйем ише:
Ул донъялағы
Иң матур кеше.
Бер кем дә юҡтыр
Атайым төҫлө —
Ул бик тә батыр,
Ул бик тә көслө!

Ф.Рәхимғолова

Йәшел, ҡыҙыл помидор,
Береһе — бәләкәй, береһе — ҙур.
Ултыралар һабаҡта,
Бешкәндәре табаҡта.

З.Ҡотлогилдина

*9. Текстарҙы уҡырға, сифаттарҙы табырға.*

Малайҙар ут тирәһендә ултыра. Уларҙың беренсеһенә, барыһынан да олорағы Федяға, һеҙ ун дүрт йәш бирер инегеҙ. Ул зифа буйлы, матур, нәфис һәм вағыраҡ һипкелле битле, аҡһыл бөҙрә сәсле, яҡты күҙле һәм ярым күңелле, ярым оялсан хәлдә һәр ваҡыт йылмайып торған малай ине. Уның өҫтөндә һары таҫма баҫҡан биҙәкле ситса күлдәк, зәңгәрһыу ҡайышына тараҡ ҡыҫтырып ҡуйылған. Икенсе малайҙың, Павлушаның, сәстәре боларған, ҡара төҫтә, күҙҙәре һоро, яңаҡ һөйәктәре киң, сығынҡы, бите аҡһыл, шаҙра, ауыҙы ҙур,

ләкин килешле, башы бик ҙур, кәүҙәһе тәпәшәк, йыуантыҡ, килешһеҙ, һөйләп тораһы ла юҡ!

И.Тургеневтан

Фәриҙә — матур иркә ҡыҙ. Ул яҡшы уҡый. Уның муйылдай ҡап-ҡара толомо, матур йөҙөнөң уң бите уртаһында күкһел миңе бар. Көлгәндә, был миң янында түп-түңәрәк матур уйым барлыҡҡа килә. Ҡыҙҙың оҙон толомдары — әсәһенә, ҡара күмер ҡашы, ҡара күҙҙәре атаһына оҡшаған.

Й.Солтанов

*10. Йомаҡтарҙы уҡырға, тәржемә итергә, яуаптарын табырға:*

1. Бүре күрмәһен өсөн,
Үҙгәртә ала төҫөн.
Йәйен — һоро, ҡышын — аҡ,
Үҙе ҡурҡаҡ, үҙе һаҡ.
2. Сымырҙап китте арҡам —
Алдымда тере арҡан!
3. Йөнө йомшаҡ,
Үҙе ҡурҡаҡ.
4. Орлоғо ҡара, ере аҡ,
Ҡул менән сәсәләр,
Күҙ менән йыялар.
5. Аҡ ашъяулыҡ таптым,
Ер өҫтөнә яптым.

**Һан**

*1. Түбәндәге һандарҙы уҡырға:*

а) 3, 17, 56, 74, 81, 2437, 5560, 18830; 11, 17;
б) 5, 11, 73, 90, 356, 7410, 43258, 8186; 2,03;
в) 10, 25, 38, 101, 293, 660, 5632, 10794; 1, 01;
г) 4, 19, 52, 65, 87,478, 1428, 7886, 21640; 1,007;
д) 1, 5, 11, 30, 100, 117, 180, 1014, 2589; 1,5.

*2. Түбәндәге һандарҙың бөтә төркөмсәләрен дә барлыҡҡа килтерергә:*

3, 4, 6, 7, 8, 10, 20, 50, 90, 100, 1000.

*3. Мәҡәлдәрҙе уҡырға, тәржемә итергә, һандарҙы табырға:*

Ике уйла, бер һөйлә. Ике ҡуян артынан ҡыуған берҙән дә ҡоро ҡалған. Ҡыш көнө ете елән кейгәнсе, бер тун кей. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ. Һигеҙ төрлө уйлаһаң да, бер һүҙле бул. Еләк берәмләп йыйыла. Ир аҡылы — бер алтын, ил аҡылы — мең алтын. Батыр бер үлә, ҡурҡаҡ ҡырҡ үлә. Бер сәскә яланды матурламай. Биште эшләгәнсе, берҙе еренә еткер. Егәрленең ҡулы етәү. Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ. Алтмыш аҙым алға атла, алты тапҡыр артыңа ҡара. Берәүҙән икәү яҡшы, икәүҙән өсәү яҡшы.

*4. Түбәндәге һандарҙың төркөмсәләрен билдәләргә:*

Етмеш, икенсе, туғыҙлаған, алтмышлы, меңәр, дүртәү, туғыҙ самаһы, биш-алты, өс бөтөн ундан дүрт, мең, етмешенсе, йөҙәр, бишле, алтау, утыҙ-ҡырҡ, унлап.

*5. Текстарҙы уҡырға, һандарҙы табырға, төркөмсәләрен билдәләргә.*

**Өфө ҡалаһы**

Өфө ҡалаһына 425 йыл. Ҡала өс йылға — Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим буйында ултыра. Элек Өфөнө башҡорттар Имән ҡала тип тә йөрөткәндәр. Өфөлә музейҙар күп, алты театр эшләй, унлап вуз бар, техникумдар, училищелар бик күп. Ағиҙел ярының иң бейек урынына Салауат һәйкәле ҡуйылған. Дуҫлыҡ монументы бар. Ҡала һаман матурлана, үҫә.

**Һөт эсегеҙ!**

Һөт кеше өсөн бик тә файҙалы. Уның составында йөҙҙән ашыу һәр төрлө матдә, мәҫәлән, минераль тоҙҙар, витаминдар, ферменттар бар. Шуға ла бер литр һөттөң файҙаһы 500 грамм һыйыр итенә, 3 килограмм кәбеҫтәгә, 3-4 килограмм томат йәки ҡыярға тиңләшә.

Һөт составында булған кальций, кобальт, баҡыр һәм тимер кеше ҡанындағы гемоглобинды арттыра.

Һөттө кеше организмы еңел үҙләштерә.

Башҡортостан календарынан

**Шимпанзе**

Ул Үҙәк Африканың урмандарында һәм урманлы далаларында йәшәй. Улар 30-лап башлы төркөмдәргә бүленә. Шимпанзе маймылдар араһында иң аҡыллыһы һанала. Уның буйы — 1,6 метр, аяҡтары көслө, мускуллы. Көндөҙ емеш, сәтләүек эҙләп үҙ территорияһында йөрөй, ә төнөн япраҡтарҙан һәм ботаҡтарҙан эшләгән ояһында йоҡлай.

“Йәншишмә” газетаһынан

*6. Көләмәсте уҡырға, һандарҙы табырға.*

Класта математика дәресе бара. Уҡытыусы балаларға төрлө мәсьәләләр әйтә:

— Биш ҡыярға өс помидорҙы ҡушһаң, нисә килеп сыға?

Шунда Зиннәт:

— Салат килеп сыға! — тип яуап бирҙе.

*7. Түбәндәге миҫалдарҙы уҡырға:*

327 + 126 = 453

1050 - 270 = 780

100 : 5 = 20

25 х 5 = 125

*8. Һөйләмдәрҙе уҡырға, һандарҙы табырға, төркөмсәләрен билдәләргә:*

Башҡорт халҡының яратҡан ике әйбере бар: уның береһе — ҡымыҙ, икенсеһе — сәй. Бер ҡәбилә ҡояшҡа, айға, йондоҙҙарға табынған; икенсеһе — хайуандарға. Етешәр көн, етешәр төн осоп бара торғас, улар етенсе диңгеҙ янына барып төшкәндәр. Башҡортостанда алты йөҙҙән артыҡ йылға бар. Дошмандың алтмышар, йөҙәр самолеты ағылды. Аҡсаларҙың унлығы берәү генә, өс бишлек бар, өслөктәр күберәк, иң күбе берлек. Донъя дүрт көс менән йәшәй: беренсеһе — ер, икенсеһе — һыу, өсөнсөһө — һауа, дүртенсеһе — ут. Берәүҙәр ағас йыға, икенселәр уҡыта, өсөнсөләр иген үҫтерә. Беҙҙең республикала 1600-ләп үҫемлек бар, шуларҙың 320 төрлөһө шифалы. Тәүге һарай — алтындан, икенсеһе — көмөштән, өсөнсөһө — баҡырҙан, ти. Өйөндә йөҙләгән минерал бар. Күлдәге лә, күрәһең, берәү генә. Өс-дүрт ат һатып алырға булдылар. Бер экзаменды икешәр-өсәр тапҡыр тапшырған саҡтар булды. Йөҙәрләгән күҙ Закирға төбәлгәйне. Сәғәт ундарға машина килеп етте. Ул бишлектәрен, унлыҡтарын һуҙҙы.

## Алмаш

*1. Һөйләмдәрҙе тәржемә итергә, алмаштарҙы табырға, төркөмсәләрен билдәләргә:*

Мин — Башҡорт дәүләт университеты студенты.

Беҙ — йәштәр.

Был йорт беҙҙеке.

Кем был һорауға яуап бирә?

Азат ҡайҙа уҡый?

Был турала һәр кем белә.

Үҙем барам.

Кемдер килде.

Нимәлер булған, ахыры.

Ул әллә ҡасан ҡайтып китте инде.

Бер нимә лә булманы.

Әмир байрамға әҙерләнә, ул лозунгылар яҙа.

Әмир һәйбәт шиғырҙар ятлаған, ундай шиғырҙарҙы тыңлауы күңелле.

Һәр кешенең дуҫы була.

Кем эшләмәй, шул ашамай.

Урамда һис кем юҡ, тыныс булып ҡалған.

Ана ҡояш ниндәй алыҫ, ләкин ул минеке.

Ни сәсһәң, шуны урырһың.

Һәр ялтырауыҡ алтын булмай.

*2. Тексты уҡырға, тәржемә итергә, алмаштарҙы табырға, төркөмсәләрен билдәләргә.*

**Ауыр ҡапҡаның сере**

Эдиссондың таныштары оҙаҡ ваҡыт бер нәмәгә ғәжәпләнеп йөрөгәндәр. Унын баҡса ҡапҡаһы ниңә шул тиклем ауыр асыла? Уларҙың береһе хужанан был хаҡта һорарға булған.

— Һеҙҙең кеүек ғалим бынан яҡшыраҡ ҡапҡа яһай алыр ине, — тигән.

— Былай ҙа һәйбәт яһалған ул, — тип яуап биргән Эдиссон. — Ул өйҙәге һыу үткәргестең насосы менән беркетелгән. Ҡапҡаны асҡан һәр кем цистернаға егерме литр һыу тултыра (“Аманат” журналынан).

*3. Өҙөктәрҙе уҡырға, тәржемә итергә, алмаштарҙы табырға.*

Һәр кемдең
Үҙ теле, үҙ йөҙө, үҙ төҫө...
Бер йыр — аҙ, бер моң — аҙ, бер тел — аҙ,
Йөҙ телдә һөйләшеп үҫ, кеше!

Х.Туфан

Мин һине, илем,
Бирмәм һис кемгә.
Һинһеҙ тормош юҡ,
Йәшәү юҡ беҙгә.

М.Хәй

Ватан ул, ҡыҙым, Тыуған ил,
Бына һин торған урын.
Был ерҙә ғүмер кисергән
Ата-бабайҙар борон.

Р.Ниғмәти

Беҙҙең баҡса ҙур түгел,
Ҙур булмаһа ла — матур.
Унда үҫә еләк-емеш,
Ҡыяр, кишер, помидор.

З.Шәйхетдинова

Ниндәй күңелле
Хәреф белеүе!
Шул хәрефтәрҙән
Һүҙҙәр теҙеүе!

## Ҡылым

*1. Түбәндәге ҡылымдарҙың заманын билдәләргә:*

барҙы, барған, барыр, ҡайтты, ҡайтҡан, ҡайтыр, килде, килгән, килер, уҡыр, йүгерҙе, һөрә, эшләне, килә, оҙата, өйрәтте, уҡый, оҙатты, уҡыны, йүгерә, һөрҙө, йүгерер, өйрәтә, һөрөр, бара, эшләр, килде, оҙатыр, барҙы, эшләй, килер, өйрәтер.

*2. Түбәндәге ҡылымдарҙың заман формаларын яһарға:*

а) тор, төр, бар, кил; б) яҙ, ҡой, көт, ин; в) уҡы, ҡор, төҙө, кит; г) ышан, кей, ярат, матурла.

*3. Һөйләмдәрҙе уҡырға, тәржемә итергә, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табырға, заманын билдәләргә:*

Аҡ торбанан да ҡара төтөн сыға. Ҡара тауыҡ та аҡ йомортҡа һала. Бер һүҙ меңде үлтерә. Оҙаҡламай көтөү ҡайтасаҡ. Ҡалған эшкә ҡар яуыр. Ҡарттың бик шәп бер аты булған. Ул ипләп кенә өйҙән сыҡты. Ауылда дүрт юл ҡушыла. Лилиә кисә еләккә барҙы. Сания апай улына хат яҙған.

*4. Һөйләмдәрҙе уҡырға, бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарын табырға, затын, һанын билдәләргә:*

Ҡайғыр ҙа һин, ҡыуана ла бел. Кәрзинкә үрһендәр, балыҡ тотһондар. Яңы сорт иртә һәм тигеҙ өлгөрһөн. Эшлә, һора, бел, өйрән. Ғүмерегеҙҙең иң күңелле мәлдәре хаҡында уйларға тырышығыҙ. Күп бел, аҙ һөйлә. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.

*5. Һөйләмдәрҙе уҡырға, шарт һөйкәлеше ҡылымдарын табырға, затын, һанын билдәләргә:*

Дуҫың булһа, һаҡла. Саҡырһалар, барырбыҙ. Ҡанаттарым булһа, осор инем. Үҙебеҙҙе яҡлай алмаһаҡ, беҙ ниндәй халыҡ! Кешене белгең килһә, ҡылығына ҡара; баланы белгең килһә, уйынына ҡара. Батыр үҙе үлһә лә, даны үлмәй. Ат ысҡынһа, тотоп була; һүҙ ысҡынһа, тотоп булмай.

Гөл булһам, үҫер инем,
Ел булһам, иҫер инем.
Алма булһам, алдарыңа
Өҙөлөп төшөр инем.

Р.Ханнанов

*6. Һөйләмдәрҙе уҡырға, теләк һөйкәлеше ҡылымдарын табырға, затын, һанын билдәләргә:*

Әсәйемә матур-матур һүҙҙәр әйткем килә. Уның ғәфү үтенгеһе килде. Үҙ күҙҙәрем менән күргем килде. Ситкә китеп яңыса уҡығыһы килде. Арып бөттөләр, ашағылары килде. Әҙәмсә ял иткебеҙ килә. Һинең киноға барғың киләме? Һеҙҙең ҡайтҡығыҙ килә, ахыры.

*7. Һөйләмдәрҙә сифат ҡылымдарҙы табырға, заманын күрһәтергә:*

Йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәккә етә. Аҡыл менән йәшәүсенең минуты ла ҡәҙерле. Алаһы нәмә алтын булып күренә. Үлер ваҡыты етһә, себендең мороно үткерләнер. Йығылған ағасҡа балта менән сабыусы күп була. Ҡайтыусылар ҙа, ҡаршылаусылар ҙа күп. Күргәндәр — күрмәмешкә, ишеткәндәр — ишетмәмешкә, белгәндәр — белмәмешкә һалышты. Йырланмаған йыр, һөйләнмәгән көләмәс ҡалманы. Ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙы яҡлаусы булырға тейеш. Атҡан уҡ кире ҡайтмаҫ. Буласаҡ туй өсөн алдан бейей башлама. Үткән ғүмер — аҡҡан һыу. Ҡалған эшкә ҡар яуа. Йөрөгән таш шымара.

*8. Хәл ҡылымдарҙы табырға:*

Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын. Үҙегеҙ теләгәнсә эшләгеҙ. Ҡатын-ҡыҙ ҡымыҙ яһап, киндер һуғып өйҙә йәшәй. Азат туйғансы йоҡлай, теләгәнсә ашай-эсә. Йыуынғас, кешегә оҡшап ҡалды. Хәлдәренән килгәнсә ҡәҙер-хөрмәт иттеләр. Бутҡаһын бешергәс, майын йәлләмә. Йырлай-йырлай еләк йыйҙылар.

*9. Уртаҡ ҡылымдарҙы табырға:*

Уҡырға, уҡырға һәм уҡырға! Аҡрынлап бесән сабырға, утын ярырға өйрәндем. Һалдаттар землянкалар ҡаҙырға, ҡорал таҙартырға тотондо. Урманға ялан аяҡ барырға ярамай. Һөрөргә, сәсергә, бесән сабырға, ураҡ урырға, ашлыҡ һуғырға көс кәрәк. Бөгөн һуңламаҫҡа!

*10. Исем ҡылымдарҙы табырға:*

Көлөү — кешенең оптимизмын раҫлаусы көс. Ишетеүҙән күреү яҡшы. Урманда һаҡ йөрөү яҡшыраҡ. Лилиә сигеү, тегеү, бәйләү өсөн дә ваҡыт таба. Тәбиғәтте һаҡлау — үҙ-үҙеңде яҡлау ул.

**Рәүеш**

*1. Рәүештәрҙе төркөмсәләргә бүлеп яҙырға:*

һыбай, игенләтә, йәйәү, берәмләп, айыуҙай, төлкөләй, былтыр, тереләй, аяғөҫтө, быйыл, кисә, бөгөн, хәҙер, иртән, яланбаш, уттай, кинәт, әкрен, аҡсалата, яртылаш, боҙҙай, ҡапыл, яй, йәштәрсә.

*2. Һөйләмдәрҙе тәржемә итергә, рәүештәрҙе табырға, төркөмсәләрен билдәләргә:*

Урамда тып-тын.
Иртәнсәк дәрес.
Ул япа-яңғыҙ йәшәй.
Икәүләп тирләп-бешеп сәй эстеләр.
Азат кисен генә ҡайтты.
Уңда — йылға, һулда — баҫыу.
Алыҫта трактор күренә.
Бында бигерәк күңелле.
Бейектә самолет оса.
Аҙ һөйлә, күп тыңла.
Ғәли тиҙ яҙа, шәп уҡый.
Бөгөн экскурсияға барабыҙ.
Майҙан шып-шым булып ҡалды.
Ул әкрен генә эре-эре атланы.
Күп белһәң, тиҙ ҡартайырһың.

*3. Йәйә эсендәге рәүештәрҙе сағыштырыу дәрәжәһенә ҡуйырға:*

(Иғтибарлы) тыңлаһаң, дәресте (тиҙ) үҙләштерерһең. (Яҡшы) уҡыһаң, (юғары) баһа алырһың. (Яҡшы) эшләһәң, (күп) алырһың. (Тиҙ) атлаһаң, (алыҫ) китерһең.

*4. Түбәндәге рәүештәрҙең сағыштырыу һәм артыклыҡ дәрәжәләрен барлыҡҡа килтерегеҙ:*

тиҙ, ҡапыл, юғары, яҡын, түбән, аҙ.

*5. Йомаҡтарҙы уҡырға, тәржемә итергә, рәүештәрҙе табырға.*

а) Йәйен — урманда батша,
Ҡышын — ҡарҙан да аҫта.
б) Яҙын кейенә, көҙөн сисенә.
в) Көндөҙ йоҡлай, төнөн илай.
г) Күҙгә күренмәй,
Бик шәп йүгерә,
Һүндерһәң — һүнә,
Яндырһаң — яна,
Тотонһаң — үлтерә.
д) Кер йыуғанды тора көтөп,
Яңылыш тейһәң — ала өтөп.

## Бәйләүес

*1. Күсереп яҙырға, тәржемә итергә, бәйләүестәрҙең аҫтына һыҙырға:*

Китап өсөн ҙур рәхмәт.
Төштән һуң дәрес булмай.
Университет ҡаршыһында ашхана бар.
Ямғырҙан һуң көн матурланды.
Азат менән театрға барабыҙ.
Көн һайын ҡар яуа.
Юл урман аша үтә.
Күршең менән татыу бул.
Мин йылға арҡыры йөҙөп сыҡтым.
Егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә.
Яҙға табан гөрләүектәр ҡуҙғала.
Яңы тимер юл беҙҙең район аша үтәсәк.
Боҙ кеүек һалҡын, ҡурғаш һымаҡ ауыр.
Йылға өҫтөнә томан төшкән.
Өй янында муйыл үҫә.
Мәктәп алдында майҙан бар.
Ҡурсаҡ өйө һымаҡ йыйнаҡ йорт.
Ҡапҡан һайын ҡалъя эләкмәй.
Башҡорт келәмдәре йәйғор төҫлө!
Ҡарт кеше менән шаярырға ярамай.
Йөҙө ҡағыҙ һымаҡ ағарҙы.

Ул әсә кеүек берҙән-бер һәм ғәзиз.
Йәштәр менән ярышыу мөмкин түгел.
Беҙ өс көн буйы бесән сабырға йөрөнөк.
Аҙна әүҙем эш өсөн файҙалы.
Ҡарҙар беҙгә йомшаҡ мамыҡ шикелле.
Ағас емеше менән матур.

*2. Күп нөктәләр урынына тейешле бәйләүестәрҙе ҡуйырға:*

Хәҙер ерҙе трактор ... һөрәләр. Азатты тырышып уҡығаны ... яратабыҙ. Был пароход Санкт-Петербургҡа ... бара. Йылға урман ... аға. Кискә ... ваҡыт бар.

*3. Шиғырҙарҙы уҡырға, тәржемә итергә, бәйләүестәрҙе табырға:*

Ҡарағай ҙа үҫер йәм өсөн,
Бал ҡорттары осор бал өсөн.
Яман ирҙәр үлер мал өсөн,
Яҡшы ирҙәр үлер дан өсөн!

Вышкалар, вышкалар бында,
Вышкалар урман кеүек.

Әсәй берәү булған һымаҡ,
Ватан да берәү була.

В.Йәнбәков

Үҙе уҡый белмәһә лә,
Ғүмер буйы яҙыша.

Йомаҡ

Ҡулланған һайын
Ҡыҫҡара бара;
Ҡыҫҡарған һайын
Оҫтара бара.

Йомаҡ

## Теркәүес

*1. Һөйләмдәрҙе уҡырға, тәржемә итергә, теркәүестәрҙе табырға:*

Тағы Сөләймәновтың исеме телдән төшмәне, тағы уның тураһында гәзиттәрҙә яҙҙылар.

Бейеүҙә халыҡтың ҡыйыулығы, сослоғо, саялығы, шул уҡ ваҡытта шаянлығы ла сағылырға тейеш.

Тупраҡ яратыусылар конторала ултырмайҙар, ә баҫыуҙа иген, йәшелсә-емеш үҫтерә.

Ҡарап тороуға бына тигән, ут кеүек егетһең, ә шулай ҙа йүнле эш күрһәтә алмайһың.

Азат яуап бирергә ашыҡманы, берсә ҡыҙыҡайға, берсә дуҫына ҡараны.

Балалар йә ҡоймаҡ, йә ҡыҫтыбый, йә май күмәсе алып килә сәй янына.

Туйҙы йәки бер-ике көндән үткәрергә йәки оҙаҡ ваҡытҡа кисектереп торорға кәрәк буласаҡ.

Биш-алты йәшлек был малай рәтләп ни башҡортса, ни русса һөйләшә белмәй.

Башҡортостанда Европала, Себерҙә үҫә торған, хатта Урта Азия сүллектәрен үҙ иткән үҫемлектәрҙең төрҙәрен дә осратырға мөмкин.

*2. Текстарҙы уҡырға, тәржемә итергә, теркәүестәрҙе табырға.*

**Һарымһаҡты нисек һаҡларға?**

Һәр хужабикә белә: һарымһаҡты һаҡлауы ауыр. Ул йә серей, йә кибә. Шулай ҙа ышаныслы бер ысул бар. Бүлгеләп, ҡабығын әрсегеҙ. Ҡоро банкаға һалып, өҫтөнә рафинирлаған үҫемлек майы (көнбағыш, кукуруз һ.б. майҙар) ҡойоп, ҡапҡасын ябығыҙ ҙа һыуытҡысҡа ултыртығыҙ. Ул тәмен юғалтмай, йомшармай бер нисә йыл ултырырға мөмкин. Ә һарымһаҡ тәме һеңгән май салат яһағанда һәйбәт.

**Бәшмәксегә**

Бәшмәкте ямғыр яуып үткәс тә йыймағыҙ, быndай бәшмәк тиҙ боҙола.

Киптерергә теләгән бәшмәкте йыумағыҙ, сөнки ул тәмһеҙләнә һәм оҙағыраҡ кибә. Бәшмәкте киптерер өсөн, епкә теҙеп, елһеҙ урынға эләләр.

Шампиньон бәшмәген таҙарткас, бешерер йәки ҡыҙҙырыр алдынан тоҙло һыуға һалып торһағыҙ, ул ҡараймаҫ. Ҡыҙҙырғанда иһә әҙ генә лимон кислотаһы йәки һеркә һалһаң, ул тәмлерәк була.

Бәшмәкте ҡыҙҙырғанда, күп кенә һыуы сыға. Ләкин уны табанан алырға һәм түгергә ярамай, сөнки һыуы алынған бәшмәк насар бешә, тәмһеҙ була.

Киптерелгән бәшмәкте тиҙ генә ҡайнар һыу менән йыуып бешекләп алырға, һуңынан һалҡын һыуҙа тағы бер ҡат йыуғас, бер аҙ ебетергә һәм шул уҡ һыуында бешерергә ҡуйырға кәрәк.

Тоҙлау өсөн уҫаҡ бәшмәге, аҡ бәшмәк, майлы бәшмәк, гөрөздә алына. Киптереү өсөн аҡ бәшмәк, уҫаҡ бәшмәге, ҡайын бәшмәге яҡшы. Һурпалы аштар өсөн аҡ бәшмәк, уҫаҡ бәшмәге, майлы бәшмәк, шампиньон һәйбәт. Ҡыҙҙырыу өсөн аҡ бәшмәк, шампиньон, уҫаҡ бәшмәге, ҡайын бәшмәге, майлы бәшмәк ҡулай һанала.

Һәр бәшмәктең үҙенә генә хас тәме була. Шуға күрә уларҙың һәр төрөн айырым тоҙларға кәрәк. Бәшмәктәр боҙолмаһын өсөн өҫтөнә бер аҙ үҫемлек майы һалалар.

**Киҫәксә**

*1. Һөйләмдәрҙе уҡырға, тәржемә итергә, киҫәксәләрҙе табырға:*

Матур урын икән дә баһа.

Аҡсаң булмаһа ла, выжданың булһын.

Аштан ҡалһаң да, эштән ҡалма.
Күбәләк яй ғына осоп йөрөй.
Тиҙ генә кире китә.
Иң ауыр ҡылысыңды бир.
Аты ла бик етеҙ.
Был дөрөҫмө?
Әйтсе, ниңә тағы һуңланың?
Әсәйең өйҙәме?
Бөкрөнө ҡәбер генә төҙәтә.

*2. Шиғырҙы уҡырға, тәржемә итергә, киҫәксәләрҙе табырға:*

**Аҡ себеш**

Себешкәйем аҡ ҡына,
Аҙымдары ваҡ ҡына.
Йүгерер ҙә, осор ҙа,
Үҫһен әле саҡ ҡына.

Ҡ.Даян

## Мөнәсәбәт һүҙ

*1. Һөйләмдәрҙә мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе табырға:*

Нурия, әлбиттә, хат көтә.
Моғайын, ял итәләрҙер.
Бәлки, ул алдашалыр.
Тимәк, ул һуңланы.
Имеш, ул ҙур начальник.
Ысынлап та, юл бик яҡшы.
Ул бөгөн ҡайтырға тейеш.
Китап уҡырға кәрәк.
Ул кисә ҡайтты, ахыры.
Дөрөҫ, ул бишле алды.
Эйе, мин бөгөн театрға барам.
Юҡ, мин был китапты уҡыманым.
Яуап дөрөҫ түгел.
Бөгөн һин бар, иртәгә юҡ.
Һис шикһеҙ, һөйлә был турала.
Эйе, уның бәхете бар.
Рәхим ит, ҡунаҡ булырһың.

*2. Мәҡәл һәм йомаҡтарҙы уҡырға, мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе табырға:*

Ямауы бар, йөйө юҡ, ҡалаһы бар, өйө юҡ. Үҙе үҫемлек, унан да моңло нәмә юҡ. Был донъяның кеме юҡ. Сибәр сибәр түгел, һөйгән сибәр. Сыҡмаған йәндә өмөт бар. Ағас түгел — япраҡлы, тун түгел — тегелгән.

*3. Текста мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе табырға.*

**Батырлыҡ ҡына етмәй**

Бөтә йыртҡыстар ҙа һиҙгер булалар. Ҡораллы кешене ҡоралһыҙҙан бик тиҙ айыралар. Ҡоралың юҡ икән, тимәк, ҡурҡҡаныңды һиҙҙермәҫкә кәрәк.

Хәнйәрҙән башҡа ҡоралың булмағанда, айыуға табан бер-ике аҙым атларға кәрәк. Был саҡта ул кешенең батырлығын күрә. Ҡурҡаҡ кешенең артынан бәлә эйәреп кенә йөрөй ул. Ҡурҡаҡ кеше ҡулында мылтыҡ та ҡорал түгел.

Ысынлап та, донъяла батырлыҡҡа ни етә. Ҡыйыу булһаң, һинән бөтә йыртҡыстар  ҙа ҡурҡыр. Урманда, тауҙар араһында һин уларға хужа кеүек йөрөһәң, улар һиңә күренмәҫкә тырышырҙар.

Һунарсыға батырлыҡ ҡына түгел, сыҙамлылыҡ, сабырлыҡ, түҙемлелек кеүек сифаттар ҙа кәрәк, билдәле. Ҡайһы саҡта көнө буйы йөрөргә мөмкин, ә буш ҡул менән ҡайтып китәһең. Шуның өсөн һунарсы бөтәһенә лә күнегергә тейеш. Йәнлектәр бит һине эҙләп йөрөмәйҙәр. Улар артынан күп йөрөргә, оҙаҡ эҙләргә кәрәк.

**Ымлыҡ**

*1. Һөйләмдәрҙә ымлыҡтарҙы табырға, мәғәнәләрен аңлатырға:*

Ай-һай, ҡымыҙың шәп!
Әй, бар ине заманалар!
Әһә, күрһәтермен әле мин һиңә!
Уф, ҡурҡыттың...
Эй, тағы һуңланыҡ.
Их, тағы ямғыр яуа.
Ура! Белдем, белдем!
Бәй, ниңә илап ултыраһың?
Аһ-аһ! Ул ни тигән һүҙ тағы?
Уф! Йөрәгем! Уф! Башым!
Һай, йүләр!
Уй, Иштуған һәләк булды!
Абау, ҡот осҡос!
Эх, көндөң матурлығы!
Сеү! Ҡысҡырма!
Ай, ҡыҙма әле!

*2. Өҙөктө уҡырға, ымлыҡтарҙы табырға.*

Зөлҡәрнәй. Ер шарын әйләнеүенән туҡтатып торайыммы, Шифабикә инәй?

Шифабикә. Ай, рәхмәт яуғыры. Бесәнде тейәп тә килдеңме?

Зөлҡәрнәй. Шифабикә инәй, менеп ултыр, үҙем тартып алып ҡайтам. Ә юлда “үтәһең дә ғүмер, ай, үтәһең...” тип йырларһың.

Шифабикә. Түбән табан бит, әкренләп үҙем ҡайтып етермен әле.

Зөлҡәрнәй. Шифабикә инәй, егет ике һөйләмәҫ.

Шифабикә. Һи-һи-һи... Улайһа... *(Бесән өҫтөнә менеп ултыра).*

Зөлҡәрнәй. Тотоноп ултыр, өсөнсө скорость менән елдерәсәкмен. Осоп барып төшмә. На-а-а! *(Кемделер күрә).* Килә... Бында килә! *(Тәртәне ергә ҡуя, әбей осоп килеп төшә).*

Шифабикә. Ай, харап иттең, билемде һындырҙың...

Зөлҡәрнәй. Һынманы, һынманы, Шифабикә инәй, бөтә ерең дә иҫән-һау.

Шифабикә *(уҡынып, төкөрөнөп).* Тфү, тфү... Зәхмәт ҡағылмаһын тағы.

Зөлҡәрнәй. Түбән табан ауыр булмаҫ, үҙ яйыңа ғына ҡайтып етерһең, Шифабикә инәй.

Шифабикә. Етермен, етермен. *(Арбаны алып).* Ай, билем тәки ҡуҙғалды, ахырыһы.

Зөлҡәрнәй. Ярай, һин былай ғына атлай тор, бесәнде үҙем алып ҡайтырмын.

Шифабикә. Ай, рәхмәт, ике донъяның рәхәтен күргере *(Сыға).*

Зөлҡәрнәй *(сикһеҙ шат).* Һүҙендә торған... Уф... *(Күкрәген тотоп).* Емереп сыға инде...

И.Абдуллиндан

## Оҡшатыу һүҙҙәре

*1. Һөйләмдәрҙе тәржемә итергә, оҡшатыу һүҙҙәрен табырға:*

Тәҙрә ҡапҡасы шап-шоп килә.
Торна "ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ" тип ҡысҡырҙы.
Йөрәгем леп-леп тибә.
Күлдә тәлмәрйендәр баҡ-баҡ тип ҡысҡыра.
Шишмәләр сылтыр-сылтыр ағалар.
Ялт-йолт килеп йәшен йәшнәне, ямғыр яуа башланы.

*2. Шиғырҙарҙы уҡырға, тәржемә итергә, оҡшатыу һүҙҙәрен табырға.*

**Бәпкәләр**

Бәпкәләр сыҡҡан! Бәпкәләр!
Ҡа-ҡа-ҡа! Ура! Ура!
Ата ҡаҙ ҡыуанысынан
Тып итеп бейеп тора.

Ф.Рәхимғолова

**Себештәр**

Себештәр: "Сип-сип, — тиҙәр, —
Асыҡтыҡ бик-бик", — тиҙәр.
Туҡтауһыҙ: "Сип-сип, — тиҙәр, —
Беҙгә ем һип-һип", — тиҙәр.

Г.Юнысова

**Тып-тып**

Иҙән буйлап атлай улар:
Тып-тып, тып-тып, тып та тып.
Асфальттан да йүгерәләр:

Тып-тып, тып-тып, тып та тып.
Ынйыҡайҙың аяғында
Ике яңы сандали.
Сандалиҙар сығара бит,
“Тып-тып” тигән яңы көй.

Г.Юнысова

Уяна иртүк,
Бар белгәне: “Кикрикүк!”

Р.Тимершин

Леп-леп оса күбәләктәр,
Сут-сут һайрай ҡоштары,
Ал, ҡыҙыл, аҡ, һары сәскә менән
Биҙәкләнгән үлән баштары.

М.Ғафури

*3. Тексты укырга, тәржемә итергә, оҡшатыу һүҙҙәрен табырга.*

Их, бигерәк йәмле был тирә! Ҡарайһың — ҡарап туя алмайһың... Тыңлайһың — тыңлап туя алмайһың... Ағас ботаҡтарына ҡунған ҡоштар сутылдаша: “Сут-сут-сут... Пи-пи-пи... Фит-фит-фит... Фю-фю-фю...” Кәкүк саҡыра: “Кә-күүүк, кә-күүүк, кә-күүүк” Ана, тумыртҡа туҡ-туҡ килә...

Ер өҫтө байрамса биҙәлгән. Ысыҡ тамсылары ем-ем килә. Сәскә еҫе аңкый. Иңкеш, бал ҡорто һәм башҡа бөжәктәр геүләшә: “Безззз... Геүүү... Жжж...”

Я.Хамматовтан

## Телмәр үҫтереү

*1. Тексты уҡырға, тәржемә итергә, киләсәкте күҙаллауың тураһында иншa яҙырға.*

### 2020 йылды мин нисек күҙаллайым

XXI быуат — электроника быуаты. Яңынан-яңы компьютерҙар, роботтар барлыҡҡа килә. Завод-фабрикалар тулыһынса электрон техника менән йыһазланған. Бында кешенең ҡатнашыуы кәрәкмәй.

Ҡояш батареяһында эшләүсе машиналар сығарыла. Мәктәптәрҙә роботтар уҡыта. Уҡыусыларҙың һәр берерһендә шәхси компьютер бар. Һәр дөрөҫ яуап өсөн 1 очко яҙыла. "Уҡытыусы мине яратмай, шуға билдәне кәметеп ҡуя", тип үпкәләүсе юҡ.

Көн аҙағында балалар мәктәп магазинына бара һәм, нисек уҡыуына ҡарап, билдәләнгән "хеҙмәт хаҡына" кәрәк әйберҙе һайлап ала. Көндәлек урынына — пластик карточка, уны өйҙә ата-әсәләр компьютерҙан ҡарай.

Балалар аҙнаға дүрт көн уҡый, ике көн спорт менән шөғөлләнә, роботтарҙың яңы төрҙәрен йыя. Барлыҡ мәктәптәрҙә лә компьютер китапханалар.

Ниһәйәт, һуғыштар бөтәсәк һәм бөтә ҡорал юҡҡа сығарыласаҡ. Ер шарындағы барлыҡ халыҡтар дуҫ, татыу һәм матур йәшәйәсәк.

Мин 2020 йылда тормошто шулай күҙаллайым. Күрәҙәлегем дөрөҫкә сыҡһа ине.

“Йәншишмә”нән

*2. Әкиәтте дауам итергә.*

**Себеш мажаралары**

Йәшәгән, ти, бер себеш. Ул бик бәләкәй һәм шаян булған. Бер заман уйнай торғас, ихатанан сығып киткәнен дә һиҙмәй ҡалған һәм аҙашҡан...

*3. Тексты уҡырға, тәржемә итергә. Болан балаһын тасуирлап яҙырға. Ошо планға таянырға: а) бик һөйкөмлө йән эйәһе; б) һыны һәм ирендәре; в) ҡолаҡтары һәм күҙҙәре; г) боттары һәм тояҡтары.*

**Күк тояҡҡай**

Бик һөйкөмлө йән эйәһе баҫҡан ҡаршыға. Йылҡылдап торған нәфис һорғолт һын. Ҡыйылып киткән ҡап-ҡара ирендәр. Ослайыбыраҡ бөткән тороҡ ҡолаҡтар. Тап-тар маңлайы өҫтөндә йоп-йомро ҡара күҙҙәр. Нескә бөгөлөшлө баҙыҡ боттар! Ә тояҡтары! Бәләкәс кенә күкһел тояҡтар йылтлап тора.

— Инәйең һине, моғайын, күк тояҡҡайым, тип яраталыр. Күк тояҡҡай бит һин! — тип һоҡланды урман ҡарауылсыһы. Был — болан балаһы ине.

Т.Килмөхәмәтов буйынса

*4. Һөйләмдәрҙе дауам итергә.*

Көндәр һыуынды һәм ...
Балалар тәнәфескә сыҡтылар ...
Айваз китап уҡый ...
Көҙ етте, ағастар һары япраҡтарын ҡоялар, ләкин ...
Бөгөн  дәрестә булманым, сөнки ...
Иртәгә минең тыуған көнөм ...
Ринат — Илдарҙың иң яҡын дуҫы ...
Роман һуңғы арала ялҡауланды ...
Айгөл башҡортса матур һөйләшә, ә ...
Иртәгә өйгә эш күп ...
Ошо арала көндәр бик йылы һәм ...
Ҡыш яңы яҡынлаша ...
Тирә-яҡта ҡара урман ғына ...
Мин йәшмен, матурмын ...
Шулай инде тормош законы ...
Мин ..................... тип уйлайым.

Терһәк яҡын булһа ла ...
Кеше сыҙамлы булып тыумай ...
Ағастар һәм ҡыуаҡтар ...
Ҡапыл көн боҙолдо ..
............................. ғәжәп матур!
................................ ярҙамлашырға кәрәк.
........................ — үҙе бер һөнәр.
Тормошта ихтыярлы, ныҡышмалы, үҙеңә талапсан булған кеше ...
Донъя ниндәй матур ...
Мин ышанам: ...
Көндәр үткән һайын ...
Йыл артынан йыл үтте ...
Һиңә йәшәүе лә еңел ...
Көҙ нисек кенә ҡарышмаһын ...

*5. Бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөргә:*

**Таң алдынан**

Ине, ауыша, төн, таңға. Бер-бер артлы, һүнә, йондоҙҙар. Китеп, ай, моңһоу, тау артына, юғалды. Ҡуйыра, ҡараңғылыҡ, төштө. Һуңынан, урман төпкөлөнә, һырышты, соҡор төптәренә, ул, тау араһына.

*6. Түбәндәге һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөргә:*

йөҙлөк, ҡыуаныс, шарлауыҡ, БДУ, келәм, һөнәр, гәүһәр, самауыр, йәйғор, дәфтәр, бәхет, шәкәрле, юрамал.

*7. Мәҡәлдәрҙе дауам итергә:*

Кеше булыу ҡыйын түгел...
Аҡса бөткәнгә ҡайғырма...
Ваҡыт аҡса түгел...
Бай бәхетле түгел...
Аҡыл менән алтын табыла...
Аҡыл йәштә түгел...
Матурлыҡ — бер көнлөк...
Бүләге ҡиммәт түгел...
Иҫәндәрҙең ҡәҙерен бел...
Балалы өй — баҙар...
Егет булһа — мут булһын...
Кеше күңеле — быяла...
Кешене аңлауы бер ҡыйын...
Матурлыҡ — күҙ өсөн..
Михнәт күрмәгән рәхәттең ҡәҙерен белмәҫ...
Саҡырған ергә бар...
Тешең барҙа ашап ҡал...
Кешегә соҡор ҡаҙыма...
Йөҙ дуҫ аҙ була...

Ҡайғы, шатлыҡ бергә йөрөй...

*8. Уҡырға, тәржемә итергә, үҙеңдең, ата-әсәңдең, туғандарыңдың исемдәренең мәғәнәһен белергә (ҡара:* Кусимова Т.Х., Бикҡолова С.А. Башҡорт исемдәре. - Өфө: Китап, 2000. – 223 б.)

“Ҡыҙ баланың исемендә йондоҙ балҡыуы йәки сәскәләр нәфислеге, ир-ат исемендә ҡылыстар сыңлауы һәм аҡһаҡалдар аҡылы сағылырға тейеш”

Рәсүл Ғамзатов

Айзилә — ай һымаҡ
Асия — дауалаусы
Банат — иркә
Гөлнар — гранат сәскәһе
Гөлсинә — гөл йыйыусы
Дилә — һөйөклө
Зинира — нурлы
Зөлфиә — бөҙрә сәсле
Зәлиә — аҡ йөҙлө
Нәжиә — иң яҡын дуҫ
Нәзирә — үрнәк, өлгө
Нәйлә — бүләк
Нәҡиә — таҙа, саф
Сәриә — аҫыл, затлы
Тәнзилә — һөйкөмлө
Флүрә — сәскәләр батшаһы
Фирҙәүес — йәннәт
Фәнүзә — маяҡ
Фәүзиә — еңеүсе
Нуриман — ғәйрәтле
Һәҙиә — иҫтәлек
Әлифә — дуҫ, иптәш
Әҙилә — ғәҙел, тура һүҙле
Әлфиә — шиғри әҫәр, тәүге
Азамат — бөйөк, ғорур
Айҙар — дәрәжәле, билдәле
Данил — белемле, аҡыллы
Ильяс — еңелмәҫ
Зәки — саф, зирәк
Мортаза — һайлап алынған
Нияз — бүләк
Рөстәм — көслө, баһадир
Рәмил — тылсымлы
Сибәғәт — ышаныс
Сәғит — бәхетле
Сәлмән — тыныс
Фуат — аҡыл, йөрәк, күңел
Әмир — түрә, башлыҡ
Хәким — түрә, хөкөм итеүсе
Әхәт — яңғыҙ, берәү

*9. Текстарҙы руссанан башҡортсаға тәржемә итергә.*

**Пещера Шульган-таш**

Пещера Шульган-таш, расположенная на правом берегу реки Агидель в Бурзянском районе, на территории Башкирского государственного заповедника, — одна из крупнейших карстовых пещер на Южном Урале, самый живописный и величественный уголок природы и памятник первобытного искусства.

Общая протяженность пещеры свыше 2 км, в ней имеются прекрасные сталактиты, сталагмиты, протекает подземная река, есть озера и огромные залы. Она состоит из следующих частей:

1. Вход в пещеру — грот Портал. 2. Голубое озеро. 3. Главная галерея. 4. Зал знаков. 5. Зал Хаоса. 6. Первая галерея. 7. Зал рисунков. 8. Вторая

галерея. 9. Зал верхний. 10. Зал бриллиантовый. 11. Верхнее озеро. 12. Зал Радужный. 13. Зал Хрустальный. 14. Зал бездны. 15. Лабиринт Летучей мыши.

Через пещеру протекает подземная река Шульган, исток которой находится в 12 км к северу от входа. На расстоянии 2 км до Шульган-таша эта речка с шумом уходит под землю и появляется в виде мощного родника у входа в нее, образуя небольшое озеро диаметром 3 м. С журчанием вытекая из озера, через 150-170 м она впадает в Агидель.

Голубое озеро, так же как и вытекающий из него Шульган, никогда не замерзает.

Пещера напоминает дивный дворец с огромными залами, соединенными между собой широкими коридорами. Это единственная на территории Восточной Европы и Азии пещера, в которой сохранилась живопись эпохи палеолита. Рисунки сделаны красной охрой, растворенной в жженом жире.

Впервые пещеру Шульган-таш описал П.И.Рычков в XVIII веке. В 1954 г. зоологом А.В.Рюминым были обнаружены настенные рисунки палеолитического возраста. В 1960-1971 гг. изображения были изучены археологом О.Н.Бадером. Найдено около 30 рисунков. Длина фигур от 44 до 122 сантиметров.

В 1965 году пещера Шульган-таш была объявлена памятником природы.

**Знаете ли вы, что...**

В русском языке около 500 тысяч слов. Но наиболее употребительных слов всего от 2000 до 2500 слов. Даже у Пушкина, великого знатока и мастера русского языка, в литературной речи было всего 21197 слов. Ученые обнаружили, что 100 наиболее часто встречающихся слов составляют 20 % устной и письменной речи. 1500—2000 слов — уже 85 %.

На сегодняшний день в мире сохранились более 5000 языков. Достаточно знать семь основных — китайский, английский, русский, испанский, французский, португальский и арабский, — чтобы получить возможность изъясняться с подавляющим большинством населения земного шара.

*10. Һорауҙарға тулы итеп яуап бирергә:*

Һинең исемең нисек? Фамилияң?
Һин нисәнсе йылда тыуғанһың? Һиңә нисә йәш?
Һин ҡайҙа тыуғанһың? Хәҙер ҡайҙа йәшәйһең?
Һин ҡайҙа һәм кем булырға уҡыйһың?
Һинең яратҡан яҙыусыларың һәм әҫәрҙәрең? Ни өсөн?
Һинең яратҡан төҫөң, сәскәң, ағасың (әгәр булһа)?
Донъяның ете мөғжизәһенең ҡайһыныһын күрергә теләр инең?
Һин ҡайһы ил буйлап сәйәхәт итергә теләр инең?
Һинең тормош девизың? Ни өсөн?

Һинең тормош маҡсатың?

*11. “Минең ғаиләм” темаһына хикәйә төҙөргә.*

*12. Бирелгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, “Минең бүлмәм” темаһына хикәйә төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| бүлмә — комната | китап шкафы — книж.шкаф |
| фатир — квартира | кейем шкафы — шифоньер |
| ике бүлмәле — двухкомнатная | өҫтәл — стол |
| йоҡо бүлмәһе — спальня | ултырғыс — стул |
| аш бүлмәһе — кухня | япма — покрывало |
| шаршау — шторы | балаҫ — палас |
| карауат — кровать | мендәр — подушка |
| келәм — ковер | юрған — одеяло |

*13.“Минең әсәйем” темаһына хикәйә төҙөргә.*

*14. “Минең дуҫым” темаһына хикәйә төҙөргә.*

*15. “Өләсәйем” темаһына хикәйә төҙөргә.*

*16. Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, “Минең йомшаҡ дуҫым” темаһына хикәйә төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| эт — собака | йөнтәҫ — лохматый |
| көсөк — щенок | шаян — шаловливый |
| бесәй — кошка, кот | уйна-рға — играть |
| бесәй балаһы — котенок | мыяула-рға — мяукать |
| ҡойроҡ — хвост | өр-өргә — лаять |
| тырнаҡ — коготь | аңла-рға — понимать |
| тәпәй — лапа | шаяр-ырға — шалить |
| йомшаҡ — пушистый | морондоҡ — намордник |
| аҡыллы — умный | муйынсаҡ — ошейник |

*17. “Минең яраткан китабым” темаһына хикәйә төҙөргә.*

*18. Бирелгән һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе ҡулланып, “Дауаханала” темаһына диалог төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| баш — голова | йүткереү — кашлять |
| аяҡ — нога | өҙләгәү — осложнение |

| | |
|---|---|
| ауыҙ — рот | һалҡын тейеү — простудиться |
| теш —зубы | мейе — мозг |
| ҡул — рука | ҡан — кровь |
| бармаҡ — палец | дарыу — лекарство |
| тел — язык | күңел болғаныу — тошнить |
| ауырыу — больной | эс — живот |
| баш әйләнә — голова кружится | Ашҡанығыҙҙы тикшерергә кәрәк. — Необходимо проверить ваш желудок. |
| үпкә — легкие | Ошо дарыуҙы эсегеҙ. — Пейте это лекарство. |
| ашҡаҙан — желудок | |
| йөрәк — сердце | Был дарыуҙы нисек эсергә? — Как принимать это лекарство? |
| бөйөр — почки | |
| бауыр — печень | Теш һыҙлай башланы. — Начал болеть зуб. |
| тамаҡ — горло | |
| арҡа — спина | Минең ҡан баҫымым түбән. — У меня низкое давление. |
| бил — поясница | |
| түш — грудь | Тамағығыҙҙы сайҡатырға кәрәк. — Вам следует прополоскать горло. |
| ҡолаҡ — ухо | |
| ауырт-ырға — болеть | Баш ауырта. — Голова болит. |
| һыҙла-рға — болеть | Үпкә шешкән. — Воспалились легкие. |
| шеш — опухоль | |
| шешеү — воспаляться | Грипп тейҙе. — Заболел гриппом. |

*19. Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, "Аҙыҡ-түлек магазинында" темаһына диалог төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| бүлек — отдел | һум — рубль |
| шәкәр — сахар | тоҙ — соль |
| сәй — чай | ҡиммәт — дорогой, дорого |
| һөт — молоко | арзан — дешевый, дешево |
| икмәк — хлеб | күпме тора? — сколько стоит? |
| ҡаймаҡ — сметана | кәрәк — надо |
| май — масло | тәмле, татлы — сладкий |
| ит — мясо | түлә-ргә— платить |
| һыйыр ите — говядина | мөмкин — можно |
| һарыҡ ите — баранина | һатыусы — продавец |
| тин — копейка | аҡса — деньги |

*20. Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, “Баҡсала” темаһына хикәйә төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| баҡса — сад | тырма — грабли |
| сейә — вишня | көрәк — лопата |
| алмағас — яблоня | һәнәк — вилы |
| ҡарағат — смородина | ултырт-ырға — посадить |
| ҡурай еләге — малина | сәс-ергә — сеять |
| еләк — ягода, земляника | ҡаҙ-ырға — копать |
| кишер — морковь | һөр-өргә — пахать |
| кәбеҫтә — капуста | һыу һиб-ергә — поливать |
| картуф — картофель | түтәл — грядка |
| һуған — лук | йәшелсә — овощи |
| ҡыяр — огурец | һырғанаҡ — облепиха |
| һарымһаҡ — чеснок | ҡайнатма — варенье |
| сәскә — цветок | ер — земля |

*21. Бирелгән һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе ҡулланып, “Китап магазинында” темаһына диалог төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| китап магазины — книжный магазин | Китап бүләк итәйек. — Подарим книгу. |
| Яҡшы китаптар бармы? — Есть хорошие книги? | яңы сыҡҡан китап — новинка |
| Һеҙгә ниндәй китап кәрәк? — Вам какая книга нужна? | Миңә был китап кәрәк. — Мне нужна вот эта книга. |
| Был китап күпме тора? — Эта книга сколько стоит? | Был китаптың хаҡы—100 һум. — Эта книга стоит 100 р. |
| Башҡортса-русса һүҙлек бармы? — Есть башкирско-русский словарь? | Русса-башҡортса һүҙлек бар. — Есть русско-башкирский словарь. |
| Миңә Мостай Кәрим китаптары кәрәк ине. — Мне нужны книги Мустая Карима. | Р.Ғариповтың шиғырҙар китабы бармы? — Есть сборник стихотворений Р.Гарипова? |
| шиғырҙар йыйынтығы — сборник стихотворений | тарихи роман — исторический роман |
| китап — книга | әкиәт — сказка |
| мажаралар — приключения | дәреслек — учебник |

| | |
|---|---|
| балалар әҙәбиәте — детская литература | һайланма әҫәрҙәр — избранные произведения |

22. *Бирелгән һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе ҡулланып, “Китапханала” темаһына диалог төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| китапхана — библиотека | китап — книга |
| китапханасы — библиотекарь | критика — тәнҡит |
| Миңә ошо китап кәрәк. — Мне нужна вот эта книга. | Был китап ҡулда. — Эта книга на руках. |
| А.Пушкиндың “Баҡсаһарай фонтаны” поэмаһы бармы? — У вас есть поэма А.Пушкина “Бахчисарайский фонтан”? | М.Лермонтовтың шиғырҙар китабы кәрәк. — Мне нужен сборник стихотворений М. Лермонтова. |
| художественная литература — нәфис әҙәбиәт | журналдың һаны — номер журнала |
| Китаптың шифрын каталогтан ҡарағыҙ. — Шифр книги смотрите в каталоге. | Ошо китапты ҡарағыҙ әле. — Посмотрите, пожалуйста, вот эту книгу. |
| баҫма — издание | нәшриәт — издательство |
| тәржемә — перевод | китап исеме — название книги |
| белешмә — справочник | йыйынтыҡ — сборник |
| һайланма әҫәрҙәр — избранные произведения | һүҙлек — словарь |
| Ҙур рәхмәт — Большое спасибо. | Рәхим итегеҙ! — Пожалуйста! |

23. *Бирелгән һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, “Ашханала” темаһына диалог төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| ашхана — столовая | сәй — чай |
| беренсе блюдо — первое блюдо | лимонлы сәй — чай с лимоном |
| икенсе блюдо — второе блюдо | ҡәһүә —кофе |
| аш — суп | киҫәк — кусок |
| ҡалаҡ — ложка | икмәк — хлеб |
| балғалаҡ — чайная ложка | аша-рға — есть |
| сәнске — вилка | эс-ергә — пить |
| бысаҡ — нож | рәхмәт — спасибо |
| тәрилкә — тарелка | рәхим итегеҙ — |

| | |
|---|---|
| | пожалуйста |
| сынаяҡ — чашка | ашығыҙ тәмле булһын! — |
| бутҡа — каша | приятного аппетита! |

24. *Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, “Зоопаркта” темаһына хикәйә төҙөргә*

| | |
|---|---|
| ситлек — клетка | маймыл — обезьяна |
| туҡлан-ырға — питаться | дөйә — верблюд |
| тырнаҡ — коготь | юлбарыҫ — тигр |
| ҡанат — крыло | йәшә-ргә — обитать |
| тояҡ — копыто | осра-рға — встречаться |
| мөгөҙ — рог | буй — рост |
| ҡойроҡ — хвост | ауырлыҡ — вес |
| тире — шкура | етә — достигает |
| йөн — шерсть | һөтимәр — млекопитающее |

25. *Бирелгән һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдәрҙе ҡулланып, “Театрҙа” темаһына хикәйә төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| бейеү — танец | оҡша-рға — нравиться |
| бейе-ргә — танцевать | төп роль — главная роль |
| йырсы — певец, певица | тамашасы — зритель |
| пьесаһы буйынса — по пьесе | атҡаҙанған — заслуженный |
| башҡар-ырға — исполнять | шаршау — занавес; действие |
| уйна-рға — играть | ҡуйылған — поставлен |
| рәт — ряд | гармун — гармонь |
| урын — место | саҡырыу — приглашение |
| драма театры — драматический театр | ҡурсаҡ театры — кукольный театр |
| йәш тамашасылар театры — театр юного зрителя | опера һәм балет театры — театр оперы и балета |
| зрительный зал — тамашасылар залы | халыҡ артисы — народный артист |
| Был пьесаны кем яҙған? — Кто автор этой пьесы? | Был спектаклдең режиссеры кем? — Кто режиссер этого спектакля? |
| Төп ролде кем уйнай? — Кто в главной роли? | Минең урын өсөнсө рәттә. — Мое место в третьем ряду. |
| Был урын бушмы? — Это | Билет күпме тора? — |

место свободно?
Спектакль сәғәт нисәлә башлана? — Во сколько начинается спектакль?
Спектакль 2 сәғәт бара. — Спектакль идет 2 часа.

Билет сколько стоит?
Спектакль сәғәт етелә башлана. — Спектакль начинается в семь часов.
Спектакль миңә оҡшаны. — Спектакль мне понравился.

26. *Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, “Башҡорт милли костюмы” темаһына хикәйә төҙөргә:*

камзул — камзол
елән — зилән
ситек — сафьяновые сапоги
балитәк — оборка
яулыҡ — платок
толом — коса
сулпы — накосник
тәңкә — монета
беләҙек — браслет
һырға — серьги

йөҙөк — перстень
муйынса — бусы
туҡыма — ткань
йөн — шерсть
күн — кожа
ебәк — шелк
бәрхәт — бархат
тула — домотканное сукно
һаҡал — нагрудник
алъяпҡыс — фартук

**Камзул** — верхняя одежда без рукавов на подкладке.

**Елән** — верхняя легкая одежда на подкладке и без застежки в виде халата без воротника; женская шьется в талию, иногда украшается монетами и вышивками; мужская — без сложных украшений.

*27. Бирелгән һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, “Башҡорт милли аштары” темаһына хикәйә төҙөргә:*

һурпа — бульон
һалма — лапша
талҡан — толокно
бишбармаҡ — бишбармак
ҡуллама — куллама
ҡатыҡ — катык
эремсек — творог
ҡорот — курут
бутҡа — каша
өйрә — похлебка
бал — мед
буҙа — буза
ҡымыҙ — кумыс

самауыр — самовар
ҡаҙан — котел
сеүәтә — миска
таба — сковородка
табаҡ — большая чашка
бешер-ергә — варить
эс-ергә — пить
сәк-сәк — чак-чак
бәлеш — пирог
ҡоймаҡ — блины
ҡабартма — лепешка
ҡаҡ — пастила
тултырма —

| | |
|---|---|
| | домашн.колбаса |
| ҡаҙ ите — гусятина | йылҡы ите — конина |

**Куллама** — жирный мясной бульон с лапшой четырехугольной формы.

**Тултырма** — вареная колбаса с ливером и крупой.

*28. Бирелгән һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, “Башҡортостан тәбиғәте” темаһына хикәйә төҙөргә:*

| | |
|---|---|
| тәбиғәт — природа | аҫ — горностай |
| ағас — дерево | кеш — соболь |
| урман — лес | һеләүһен — рысь |
| имән — дуб | тейен — белка |
| ҡайын — береза | ҡош — птица |
| ерек — ольха | ҡарлуғас — ласточка |
| йүкә — липа | һандуғас — соловей |
| саған — клен | сыйырсыҡ — скворец |
| ҡарағай — сосна | сәпсек — воробей |
| шыршы — ель | һайыҫҡан — сорока |
| ҡарама — вяз | һуйыр — глухарь |
| уҫаҡ — осина | ҡор — тетерев |
| муйыл — черемуха | тумыртҡа — дятел |
| тал — ива | кәкүк — кукушка |
| балан — калина | ҡарға — ворона |
| миләш — рябина | торна — журавль |
| еләк — ягода | бөркөт — орел |
| ҡурай еләге — малина | балыҡ — рыба |
| бөрлөгән — ежевика | суртан — щука |
| ер еләге — клубника | бәрҙе — хариус |
| әлморон — шиповник | бағры — форель |
| үлән — трава | алабуға — окунь |
| кесерткән — крапива | шамбы — налим |
| дегәнәк — лопух | йәйен — сом |
| юл япрағы — подорожник | Өфө — Уфа |
| үгәй инә үләне — мать и мачеха | Шүлгән мәмерйәһе — Пещера Шульган-таш |
| мәтрүшкә — душица | Бөрө — Бирск |
| балтырған — борщевник | Мәләүез — Мелеуз |
| абаға — папоротник | Стәрлетамаҡ — Стерлитамак |
| андыҙ — девясил | Ирәмәл — Иремель |
| томбойоҡ — кувшинка | Ағиҙел — Агидель |
| хайуан — зверь | Ҡариҙел — Уфимка |
| йыртҡыс — хищник | Дим — Дема |
| айыу — медведь | ҡала — город |

бүре — волк
ҡуян — заяц
төлкө — лиса
ҡондоҙ — бобр
ҡама — выдра
мышы — лось

болан — олень
бурһыҡ — барсук
шәшке — норка
һуҫар — куница

баш ҡала — столица
күл — озеро
йылға — река
ер — земля
халыҡ — народ
төп халыҡ — коренной народ
башҡорт — башкир
рус — русский
сыуаш — чуваш
татар — татарин

## Уҡыу, тәржемә итеү өсөн материалдар

**Парсалар**

## Имгәкләү

Бәпестәре шыуыша башлағас, йәш атай менән әсәй бик шатланды. Бер аҙҙан сабый имгәкләп тә китте. Был да сикһеҙ ҡыуаныс булды. Ҡыуаныс-шатлыҡтар алда ла аҙ түгел ине әле. Сөнки бала шуның менән генә туҡтап ҡалманы: һәр осраған әйбергә тотоноп, атларға тырыша башланы. Йығыла, күҙен-башын күгәртә, ә барыбер аяҡҡа баҫыр өсөн көрәшә.

Тормошта имгәкләп йәшәүҙең түбәнселек икәнен ҡайҙан һиҙә һуң был әҙәм ишараты? Әллә инстинкт тигән нәмәләр ысынлап та бармы?

...Уҫлаптай йәш егет тәнтерәкләп, ауа-түнә ҡайтып килә. Тип-тигеҙ ерҙә абынып йығылып китә лә шыуыша, имгәкләргә маташа. Ҡаршы сығып алырға оялып, тәҙрә аша уға әлеге ике пар күҙ баға — әсәй менән атай күҙҙәре. Һәм ул күҙҙәрҙән мөлдөрәп йәш тама. Шыуышыу һәм имгәкләү гел генә ҡыуандырмай икән шул.

Тормошта имгәкләп һәм теҙ сүгеп көн күреүҙең хурлыҡ икәнен ҡасан онотоп өлгөргән был әҙәм аҡтығы?

М.Әбсәләмов

## Үрләү

Йәндәрен усында йомарлап, альпинистар иң бейек тау түбәләрен буйһондора. Ғүмерҙәре ҡыл өҫтөндә көйөнсә космонавтар сикһеҙ йыһанға оса.

Әле генә тәпәй йөрөй башлаған бала тырышып- тырмашып юғарыға үрмәләй. Күнекмәгән аяҡтары тала, сыныҡмаған бармаҡҡайҙары ысҡынып китә. ҙммә ул бирешергә уйламай ҙа, уның һайын сәмләнеп тотона. Юғарыға, бейеккә. Ә бейеклек кенәһе нимә һуң әле бахырҡайҙың? Байтаҡ ыҙалағандан һуң, ул маҡсатына иреште: карауат башына менеп һыбайланды. Шат ауаз менән ҡулдарын юғары сөйҙө һәм ... “һә” тигәнсе аунап килеп төштө. Юғары үрмәләүе ҡалай оҙаҡ ине, түбәнгә тәгәрәүе — бик тиҙ ҙә.

Меҫкен бала. Яуланған рубежды ысҡындырмаҫ өсөн теш-тырнаҡ менән йәбешергә кәрәклеген белмәйҙер шул әле.

Бер аҙҙан, әлеге таныш ауаз ишетелгәнгә әйләнеп ҡараһам, ...бәй, әлеге малайсыҡ йәнә карауат башында ултыра. Был юлы ул, баяғыса ҡыуанып һөрән һалһа ла, “позиция”һына ике ҡуллап сат йәбешкән ине...

Юғарыға һәм бейеклеккә ынтылыу кешегә тыумыштан бирелгән дә баһа.

М.Әбсәләмов

## Иңбашта һәм елкәлә

Беренсе Май. Атаһының иңбашына ултырып алған сабыйҙың түбәһе күккә тейгән. Сәпәкәйләй, шөңгөр тауышҡайы менән (һаҡау икәнен дә онотоп) “улла” тип ҡысҡырған була. Йәш ата ла унан кәм һөйөнмәй, күҙҙәренән нур балҡый: берәүҙең улы эшкингән дә баһа.

... Ошо менеүҙән бала ҡабат ергә төшөргә уйламаны — ғүмергә атай елкәһендә йәшәр булып ҡалды. Был, әлбиттә, ата-әсәне һис кенә лә ҡыуандырманы.

Йыл миҙгелдәре кеүек үк, әҙәми заттың да үҙ миҙгелдәре лә бар шул. Сәңгелдәктә тирбәлеү, имгәкләү, иңбашта йөрөү, етәкләтеү, үҙ аллы йөрөүҙәр, бара-бара бүтәндәргә үҙең таяныс һәм ҡалҡан булыу... Һәм һәр мөсәл дә, тәбиғәт миҙгелдәре һымаҡ уҡ, үҙ ваҡыты өсөн генә аҫыл, ҡәҙерле, шифалы. Хатта иртә килгән яҙҙың яҙы бер кемде лә шатландырмаған шикелле, һуңлаған балалыҡ та кешене һөйөндөрмәй икән шул.

Ҡалай төплө, ғәҙел, зирәк был тәбиғәт ҡанундары...

М.Әбсәләмов

**Күтәреү**

Ауыл Советы янына йәйғор таҫмалар, күҙ ҡамаштырыр сәскәләр, йәшелле-күкле шарҙар менән биҙәлгән еңел автомашиналар кортежы килеп туҡтаны. Күңелле ауаздар, шарап салюты, бокалдарҙың гәлсәр сыңдары. Шатлыҡтың иң юғары түбәһендәге кейәү бәхеттең зәңгәр томанында йөҙгән аҡкошон күтәреп алды. Гармун телдәре тантаналы тушҡа күсте. Шараптан һәм һөйөнөстән елкенгән төркөм никах йортона йүнәлде. Их, йөрәктең кәләш фатаһындай иң аҡ һәм пак сағы.

... Әҙмәүерҙәй йәш ир ауа-түнә тәнтерәкләй, әләгә лә йығыла. Ғәрлегенән ер тишегенә инерҙәй булған ҡатыны етәкләп тә ҡарай, ҡултыҡлап та ҡарай. Ахырҙа, йөкмәргә маташа. Кеше кешене күтәрә лә баһа, ни эшләп тантаналы музыка яңғырамай?..

Бәй, былар теге икәү ҙә баһа! Ҡасан бысранырға өлгөргәндәр һуң? Өҫ-баштарын әйтмәйем, анауы ваҡыттағы туй күлдәгендәй аҡ һәм саф күңелдәрен әйтәм.

М.Әбсәләмов

**Глобус һәм Ер шары**

Коридорҙың теге осонда, мәктәпте күтәрерҙәй булып, шау-шыу ҡупты. Дежур уҡытыусы шунда ашыҡты. Тауыш география бүлмәһенән сыға ине. Ишекте асып ебәрһә... ни күрә: малайҙар, саң-туҙан күтәреп, аҡыра-баҡыра глобусты футбол тубы итеп типкеләйҙәр. Иҫенә килә алмай, бер аҙ аптырап торҙо уҡытыусы. Бер ни тип тә өндәшә алманы, ғәҙәттәгесә шелтә лә яһаманы, ҡотортоусыны ла төпсөнөп торманы. Глобус шарын һаҡлыҡ менән генә ҡулына алды ла, туҙанын ап-аҡ ҡульяулығы менән һөртөп, өҫтәлдә һерәйеп торған күсәренә кейҙереп ҡуйҙы.

Глобус ни ул... Ҡыҙғаныска ҡаршы, был заманда Ер шарын уйынсыҡ туп итеп ҡулдарында сөйөргә, хатта типкеләргә маташыусы дәүләт эшмәкәрҙәре лә бар бит донъяла. Ә Ерҙе орбитаһынан тайпылдырһаҡ, күсәренә ҡабат ҡуйып булырмы? Ул бит глобус шары түгел.

М.Әбсәләмов

**Метаморфоза**

Саҡ-саҡ йөрөй башлаған ҡыҙ бала ауа-түнә урамға сыҡты. Уның өсөн бар нәмә лә өр-яңы, бөтәһе лә мәрәкә. Батҡағы бутҡа, саң — он, быяла

ватыҡтары — ҡашығаяҡ. Уйнай торғас, бит-ҡул бысранды, әсәһе яңы ғына тарап, таҫма бәйләп ебәргән сәс бумалаға әйләнде.

Ошо мәл, аҡ яғалар тағып, “нулевой”ға йөрөгән күрше малай мәктәпкә барырға сыҡты. Әҙәм танымаҫлыҡ ҡиәфәткә кергән күршеһенә бер килке аптырап ҡарап торҙо. Йөҙөн сирып: “Фу, сусҡа”, — тине лә китек теше араһынан сыртлатып төкөрөп үк ҡуйҙы. Унан эре генә ҡиәфәттә мәктәпкә ҡарай атланы.

Төн уртаһы ауған. Йәш һәм ҡуш йөрәктәр генә йоҡламай. Өй алдындағы эскәмйәлә һаман гөрләшәләр. Йәйге тын төн егеттең шыбырлап ҡына сискән серҙәрен бар донъяға фаш итә:

— Ҡамыштай бармаҡтарыңды аҫыл йөҙөктәр менән биҙәрмен. Аh, көн дә төштәремә инеп хыялый итеп бөттө бит ебәктәй сәстәрең, сейә ирендәрең, ынйыы тештәрең ....

Туҡта. Теге “сусҡа ҡыҙ” ҡасан фәрештәгә әүерелеп өлгөргән һуң? Теге фырт күрше малайҙы нисек теҙ сүктергән!

М.Әбсәләмов

**Бәхетле ер**

Беҙҙең яҡта кешенең кешелеген уның ҡатын-ҡыҙҙарға булған мөнәсәбәтенә ҡарап билдәләйҙәр. Мин дә шуға ҡушылам: “Илдең бөйөклөгөн, ундағы прогресты ҡатын-ҡыҙҙың хәленә ҡарап билдәләргә кәрәк. Ҡатын-ҡыҙҙар йәше аҡҡан ерҙә тормош шәп түгел, ә ҡатын-ҡыҙҙар йырлаған ер иһә — бәхетле ер”, — тип әйтер инем.

Әсә йыры — донъяла иң бөйөк йыр. Ҡалған бөтә йырҙар ҙа шунан башлана. Әгәр ҙә сәңгелдәк йыры булмаһа, һис шикһеҙ, бүтән йырҙар ҙа тыумаҫ ине. Беҙ әсә йырын тиҫтәләрсә йылдар үткәс тә, тормошобоҙҙоң иң ауыр һәм иң бәхетле сәғәттәрендә иҫкә төшөрәбеҙ.

Тау халҡы йүнһеҙ кеше тураһында: “Сәңгелдәктә ятҡанда, әсәһе, моғайын, уға йыр йырламағандыр”, — ти.

Р.Ғамзатов

**Шиғырҙар**

***

Һөймә мине, һылыу, әгәр ҙә һин
Матурлыҡҡа ғына ҡараһаң.
Кеше матур һәр саҡ эше менән.
Был ҡулдарым эшкә яраһа,
Мин үҙемә үҙем ҡоям бәхет,
Намыҫым саф, күңелем ҡәнәғәт.
Ә мөхәббәт өсөн йәшәмәйем, —
Йәшәү өсөн кәрәк мөхәббәт.

Р. Ғарипов

* * *

Көтмәгәндә шундай ҡыҙҙар осрай,

Шундай ҡыҙҙар — ят та үл инде!..
Ниҙәр уйлап, ниҙәр кисергәнде
Үҙең күр ҙә үҙең бел инде...
...Бер йылмайып ҡарауы  ла унын
Оло бер туй яһай хисеңдә!
Оло бер туй!..
Ләкин был туйҙың бит
Һин кейәүе түгел — ҡунағы...
Күңелдә тик моңһоу бер йыр тыуа —
Етмәгәнме һиңә шул тағы!..

Р. Ғарипов

* * *

**Гөлдәр баҡсаһында**

Бер көн шулай гөлдәр баҡсаһында
Сәскәләрҙе ҡылдым тамаша,
Хуш еҫтәре менән йән шатлана,
Нурҙарынан күҙҙәр ҡамаша.
Нәфис төҫтәренә, буйҙарына,
Хайран ҡалып, ҡыҙығып ҡараным,
“Әй, сәскәләр, һеҙгә кемдәр дуҫтар?
Кемдәр дошмандар?”, — тип һораным.
Гүйә улар шунда йәнләнделәр,
Нурҙар сәсеп, ем-ем көлдөләр.
Әкрен генә иҫкән ел арҡыры
Миңә былай яуап бирҙеләр:
“Кемдәр эшләй, кемдәр ерҙәр ҡаҙый,
Кемдәр беҙгә һыуҙар һибәләр,
Кемдәр сәскә кеүек саф күңелле —
Шулар беҙгә дуҫтар!”, — тинеләр.
“Кемдәр ҡара эсле, тар күңелле,
Кемдәр ысын эшкә ҡул бирмәйҙәр,
Кемдәр килеп беҙҙе хаҡһыҙ өҙә —
Шулар беҙгә дошман!”, — тинеләр.
Сәскәләрҙең ошо яуаптарын
Алғас: “Дөрөҫ! — тинем уларға, —
Эшһеҙ кешеләрҙең хаҡтары юҡ
Һеҙҙе түштәренә ҡаҙарға...
Күңелле эш, матур тормош менән
Йыл артынан йылдар ағырҙар...
Эшсән егет менән эшсән ҡыҙҙар
Һеҙҙе түштәренә ҡаҙарҙар”.

М.Ғафури

***

Бәхет — һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ,

Килеп инә табын таралғас!
Тик көтәһең, көтөп арығас та,
Бәхет өсөн генә яралғас.
Көтә белгәндәргә һуң түгел дә,
Йәшлек кенә көтөп тормай шул.
Юҡ шул уның туҡтар туҡталҡаһы,
Йә үткәнгә юлын бормай шул.
Ҡала миңә бары йылдар буйы
Йырҙар менән күңел йыуатыу.
Бар ғүмерем минең — һине эҙләү,
Бар ғүмерем — һине юғалтыу...

Р.Ғарипов

***

Мин батыр ҙа түгел, йәнем,
Мин тик ғашиҡ батырлыҡҡа.
Мин матур ҙа түгел, бәғерем,
Мин тик ғашиҡ матурлыҡҡа.
Мин тапҡыр ҙа түгел, иркәм,
Мин тик ғашиҡ тапҡырлыҡҡа...
Ләкин миңә бер йылмайһаң,
Бер өндәшһәң, бер күҙ һалһаң,
Миңә күсә — тапҡырлыҡ та,
матурлыҡ та,
батырлыҡ та...

Р. Назаров

***

**Йәшен**

Мөхәббәт ул — әйтерһең дә, утлы йәшен,
Һанап, һорап тормай һис бер кемдең йәшен,
Һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен,
“Көйҙөрөр”, — тип ҡурҡһаң әгәр, ҡас һин — йәшен,
Тик аҙаҡтан ҡоя күрмә күҙең йәшен!
Мөхәббәт ул — әйтерһең дә, утлы йәшен...

Р.Назаров

***

Мөхәббәт — йәшәү емеше —
Өлгөрә ул бер генә,
Кеше татый уның тәмен
Тик бер генә ғүмергә.
Әгәр һөйөү татымаһа,
Ул — кеше булмаҫ ине,
Донъяның иң гүзәл йәмен
Бер ҡасан тоймаҫ ине...
Ергә тыуған һәр бер кеше

Ҡаса алмай үлемдән...
Ә мөхәббәт татымаусы —
Тере килеш күмелгән.

Б.Бикбай

***

Сәскәләргә тиңләр инем —
Сәскә ғүмерҙәре аҙыраҡ.
— Йондоҙом һин! — тиер инем —
Ул да һүнә таң булғас.
— Ҡояшым һин! — тиер инем —
Төнөн килтермәһәң ҡараңғы.
— Йөрәгем һин! — тиер инем —
Йөрәк тибеүҙәрем һанаулы.

Б.Бикбай

***

Ташлап китте мине йөрәгем,
Йөрәкһеҙ бар кемгә кәрәгем:
Гүйә ҡашы төшкән йөҙөкмөн,
Аты йығып ҡасҡан егетмен.

М.Кәрим

***

Аһ, мөхәббәт! Килгән саҡта
Һиҙелмәй ҡала икән.
Китһәң икең ике яҡҡа,
Уттарға һала икән.

Б.Бикбай

***

Тормош — боролош:
Йә уңға, йә һулға.
Ташлай — йәлләмәй:
Йә утҡа, йә һыуға.

Р.Мифтахов

***

Алйот, ахмаҡ — көсһөҙ:
Хөкөм итә.
Аҡыллылар — көслө:
Ғәфү итә.

Р.Мифтахов

***

Һөткә, иткә, төрлө шараптарға
Ғүмер буйы сират торабыҙ.
Хәйер, ерҙә беҙгә бер нәмә бар:
Ул да булһа әжәл сиратһыҙ...

Р.Мифтахов

***

Эй, был тормош! Ниңә хәкиҡәтте
Гел хаталар аша өйрәтә?!
Һабаҡ бирә мең ғазаптар менән,
Һыуға һала, утта көйрәтә.
    Үҙе теләгәнсә һынай беҙҙе,
    Тормош — даръя, ә мин бер елкән;
    Ҡаршы йөҙәм ярһыу ташҡындарға,
    Яҙмыш тигәндәре шул микән?!

Р.Хәкимйән

***

**Һүҙ**

Һүҙ — табыштыра,
Һүҙ — ҡауыштыра.
Һүҙ-тылсым менән
Берәүҙе түгел,
Хатта меңдәрҙе
Ҡотҡарып була.
    Һүҙ — ялғыштыра,
    Һүҙ — аҙаштыра.
    Уның яманы
    Туған-дуҫтарҙы
    Яғалаштыра.
    Ил менән илде
    Ҡан ҡойоштора.
Һүҙ — йылы ҡосаҡ,
Һүҙ — һалҡын бысаҡ.
Бер ни юҡ ерҙә
Унан  олораҡ,
Унан ҙурыраҡ.
Эй, шағир, туҡта,
Уйла йөҙ, мең ҡат —
Һүҙ менән бул һаҡ!

Р.Мифтахов

***

**Яҡшы һүҙ, яман һүҙ**

Яҡшы һүҙ йәшәртә,
Көс бирә,
Ҡулыңа һәләт һәм
Эш бирә.
    Яҡшы һүҙ ҡуҙғата
    Йырҙарҙы.
    Биҙәй ул, матурлай
    Донъяны.

Яҡшы һүҙ шифалы,
Тылсымлы.
Йыуа ул яраны,
Борсоуҙы.
Яҡшы һүҙ тауҙарҙы
Күтәрә.
Дауылдар арҡыры
Үткәрә.
Яҡшы һүҙ ярҙамға
Ашыға.
Әйтерһең эретә ул
Ташты ла.
Яман һүҙ ағыуҙай
Әшәке.
Хатта ул ҡорота
Сәсәкте.
Ул һине ҡалдыра
Сыраға.
Йөҙөңә йыйырсыҡ
Сығара.
Яман һүҙ йыландай
Һуғыла.
Ул һалҡын боҙҙо ла
Туңдыра.
Яҡшыны күрегеҙ,
Аңлағыҙ.
Яманға битараф
Ҡалмағыҙ.

Ғ. Латыпов

**Дауаханала**

Ауырыным...
Дауаханаға
Әсәйем алып барҙы.
Табип апай дауалай ул
Бөтә ауырыуҙарҙы...
“Мә дарыуҙар, һауығырһың
Шуларҙы эсә-эсә...”
“Белмәй”, — тигәндер: бер А-ны
Әйттерҙе әллә нисә.
Ниңә һораны гел А-ны,
Б, В-лар — яраманы?
Их, уҡый ҙа белә инем,
Уҡытып ҡараманы.

С.Рәхмәтуллин

**Һарыкты кем ашаған**

Бер аусының бер һарығы ҡырҙа ҡалған,
Эҙләп тә тапмағандар, ул юғалған.
Бер-ике көн үтеп киткәс, беҙҙең аусы:
“Бүре ашаған һарыкты”, — тип хәбәр алған.
Быны ишеткәс, аусы сикһеҙ асыуланды,
Йыртҡыстарҙың был эшенә көйҙө, янды.
— Һарыктың үсен алмай ҡалмамын, — тип,
Януарҙарға ошолай тип хәбәр һалды:
“Ҡыҙғанып тора инем үҙем һеҙҙе,
Асыуланһам, ҡалдырмамын берегеҙҙе,
Һарығымды кем ашаһа, шул кешене
Талап ҡылам, миңә тотоп биреүегеҙҙе”.
Аусыны белә урманда һәр бер януар,
Был хәбәрҙе ишеткәс тә таң ҡалдылар.
“Аусыны тиҙерәк риза итәйек”, — тип,
Кәңәш өсөн бер урынға йыйылдылар.
Булды төлкө  секретарь, бүре рәис,
Һүҙ башлап рәис әйтте: “Был ниндәй эш!..
Аусының һарығын кем ашаны?
Танмайса ошо ерҙә әйтеү тейеш.
Шул эш өсөн саҡырҙым мин бында һеҙҙе:
Асыуланһа, аусы ҡырыр барыбыҙҙы.
Кем ашаһа, шуны биреп ҡотолайыҡ,
Тоғролоҡтан айырмағыҙ үҙегеҙҙе”.
Тәүҙә бүре: “Ашаманым”, — тине, танды,
Төлкө лә тоғролоғон һөйләп алды.
Бөтә йыртҡыс үҙҙәрен аҡланылар.
Бер яҡ ситтә йыртҡыс түгел, ҡуян ҡалды.
Тине бүре: “Ситтә тороп яңғыҙ үҙең,
Бур кешенең күҙе төҫлө ике күҙең.
Һарыкты ашаған кеше һин түгелме?
Әйтеп ҡал, бында килеп, әйтер һүҙең!”
Ҡуян меҫкен ҡурҡыуынан ҡалтыранды,
“Ашаусы мин түгел”, —  тип саҡ әйтә алды.
Ул, шикле кеше төҫлө яуап биргәс,
Бөтә йыртҡыс: “Ашаусы шул!”, —  тип ауаз һалды.
(Ашамай ҡуян һис бер ваҡытта ит),
Әйтә алманы, ашаған мин түгел, тип.
“Һарыкты ашаған сусҡа ошо икән”, —
Тине бүре: “Килтерегеҙ бәйләргә еп!”
Шул сәғәт әллә ҡайҙан еп таптылар:
Ҡуяндың муйынына таҡтылар.
“Уҫаллығың язаһын тарт, бына инде!”, — тип

Аусының ауылына оҙаттылар.

Бүре төҫлө йыртҡыстарға киңдер йыһан:
Һәр ҡайҙа хурлыҡ күрер меҫкен ҡуян.
Зарарлы бәндә булып күренерһең,
Башҡаларға ҡылмаһаң да һис бер зыян.

М.Ғафури

***

**Нәсихәттәр**

Түбәнгә төшөү бер нәмә —
Уныһы бары бер яман.
Түбәнлеккә күнегеп китеү —
Уныһы инде мең яман.

Өс нимәнән һаҡлан, балам,
Кәңәшемде ташлама:
Беренсеһе — бер ҡабым да
Харам ризыҡ ашама.

Икенсеһе — күңелеңә
Ояламаһын ялған.
Ялған бар ерҙә хаҡлыҡ юҡ,
Шуны онотма, балам.

Өсөнсөһө — иң мөһиме —
Шәфҡәтһеҙ була күрмә.
Шәфҡәтһеҙ кеше — тиран ул,
Шәфҡәтһеҙ донъя — төрмә.

Ф. Яруллин

**Бала өсөн**

Бар хәстәрем, бар хистәрем — бала өсөн,
Хеҙмәтем дә, хөрмәтем дә — бала өсөн.
Үкенеүҙәр, үтенеүҙәр — бала өсөн,
Йоҡоһоҙ төн, тынғыһыҙ көн — бала өсөн.
Утка-һыуға уҡталыуым — бала өсөн,
Сығыр юлдан туҡталыуым — бала өсөн.
Таңдан әүәл ҡайнар аш та — бала өсөн,
Тәгәрәгән ҡайнар йәш тә — бала өсөн.
Иртә-кисем, йөрәк хисем — бала өсөн,
Барлыҡ эшем, барлыҡ көсөм — бала өсөн.
Янам — түҙәм, көйәм — һүнәм — бала өсөн,
Ғорур башты түбән эйәм — бала өсөн.
Төндәр тыуһа, иртә көтәм — бала өсөн,
Күңелемдә йырҙар йөрөтәм — бала өсөн.

Ф.Чанышева

**Башҡортостан — тыуған илем**

## Башҡортостан тәбиғәте

Башҡортостан тәбиғәте бик бай. Уның иң ҡәҙерле тәбиғәт байлыҡтарының береһе — урман. Уның майҙаны — 6,2 млн га. Иң күп таралған ағастарҙан ҡайын, уҫаҡ, йүкә, ҡарағай, имән, саған һанала. Үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһы ла күп төрлө. Урмандарҙа үҫемлектәрҙең һирәк осрай торғандары ла һаҡланған. Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабына индерелгән ҡоштар ҙа, кейектәр ҙә байтаҡ.

Республикала ике дәүләт заповеднигы бар: Башҡорт һәм "Шүлгәнташ". Данлыҡлы "Бөрйән ҡорто" тип йөрөтөлгән кейек ҡорт тик Шүлгәнташта ғына саф көйө һаҡланған. Ошонда уҡ бөтә донъяға билдәле "Шүлгән мәмерйәһе" бар.

Башҡортостанда ҡаҙылма байлыҡтар ҙа бик күп. Республиканың көнбайыш һәм үҙәк райондарында нефть сығарыла һәм эшкәртелә. Күмертау янында һоро күмер бассейны бар. Көнсығыштағы таулы райондарҙа үткән быуаттарҙан алып тимер, баҡыр, алтын сығарыла. Учалы, Баймаҡ, Хәйбулла райондарында баҡырға, цинкыға, көкөрткә бай булған колчедан ятҡылыҡтары бар.

Республикала 1000 күл, 600 йылға, 50-нән ашыу минераль сығанаҡ иҫәпләнә. Дарыу үләндәре үҫтереү буйынса 11 заказник бар, 16 дәүләт, 90 республика заказниктары эшләй. Павловка, Нөгөш, Карман һыуһаҡлағыстары бар.

## Көньяҡ Урал ҡурсаулығы

Был ҡурсаулыҡ Башҡортостанда ғына түгел, бөтә Уралда иң эреләрҙән һанала. Ул 252,8 мең гектар ерҙе биләй. Шуның иң ҙур өлөшө - 90 проценты республикабыҙҙың Белорет районына ҡарай. Ҡурсаулыҡ Силәбе өлкәһенең бер өлөшөн дә үҙ эсенә ала.

Көньяҡ Урал ҡурсаулығы биләмәләрендә бейеклектәре 1300-1400 метрға еткән Машаҡ, Зигәлгә, Нәре, Күмерҙәк һырттары һәм көньяҡ Урал тауҙарының иң бейек нөктәһен тәшкил иткән Ямантау массивы урынлашҡан. Уның бейеклеге – 1644 метр. Шулай уҡ Оло Инйәр, Кесе Инйәр, Йүрүҙән йылғалары ошо ҡурсаулыҡтан баш ала.

Үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһы бик бай. Һирәк осрай торған үҫемлектәрҙең күплеге менән ҡурсаулыҡ башҡаларҙан айырылып тора. Бында мүктең генә 172 төрө бар, 88 төрлө бәшмәк иҫәпләнә. 12 төр үҫемлек – Рәсәйҙең, 66 төрө Башҡортостандың "Ҡыҙыл китабы"на индерелгән.

Хайуандарға килгәндә, әлегә 275 төр умыртҡалы хайуандың көн итеүе билдәле. 198 төрҙәге ҡош һәм 18 төр балыҡ йәшәй. Улар араһында таҙа һыуҙы ғына үҙ иткән бағры, бәрҙе балыҡтары бар.

Х.Чембарисова

**Һүҙлек**

Ҡурсаулыҡ - заповедник

**Минең илемдә**

Минең илемдә

Болон, урмандар,
Алтын-көмөшлө
Мөһабәт тауҙар.
Минең илемдә
Ҙур йылға, күлдәр,
Матур баҡсалар,
Сәскәле гөлдәр.
Киң ҡырҙарында
Бай, мул игендәр.
Йырлап эшләйҙәр
Шат ҡыҙ, егеттәр.

Х.Кәрим

**Илемдә**

Тынғы белмәй
Күпме таңдар
Яҙҙы маҡтай
Һандуғастар.
Йырлай үлән,
Һәр бер һабаҡ,
Һәммә япраҡ,
Хатта ҡыяҡ.
Шишмә моңло,
Йылға йырлай,
Сөнки йырһыҙ
Йәшәп булмай.
Көйләй-көйләй
Ерем йырлай,
Күгем йырлай,
Күңел йырлай.
Ғәжәп түгел:
Илемдә бит
Йәшәү шулай,
Мәңге тынмаҫ
Матур йырҙай!

М.Дилмөхәмәтов

**Барыһы бар**

Сәскәләрҙең алдары,
Алмалары, сейәһе,
Еләктәре, баландары,
Ҡуҙғалаҡлы яланы,
Күп балыҡлы йылғаһы,
Бейек-бейек тауҙары,
Бөҙрә сәсле талдары —
Барыһы Тыуған еремдә,

Башҡортостан илемдә.

К.Кинйәбулатова

**Юҡ ерҙә тиңең**

Матур һин, Урал,
Юҡ ерҙә тиңең,
Йондоҙҙарың да
Асыл таш һинең.
Тауҙарың бейек,
Урманың йәмле,
Шишмәләреңдең
Һыуҙары тәмле.

**Гүзәл баҡса**

Өфөләге ботаника баҡсаһын күптәр белә.

Әгәр ҙә һин, бында үҫкән үҫемлектәрҙе күрергә теләп, сәйәхәткә сығып китһәң, бөтә донъяны гиҙергә тура килер ине. Австралияға һәм Яңы Зеландияға, Төньяҡ Америкаға һәм Африкаға, Урта диңгеҙ буйҙарына һәм Мексика сүлдәренә лә барып сығырға мөмкин булыр ине.

Бына пальмалар. Улар Испанияла кеше үтә алмаҫлыҡ ҡуйы урман булып үҫә. Сәскәһе матур түгел, ә япрағы, әйтерһең дә, яһап ҡуйған веер инде!

Эвкалипт — иң бейек ағастарҙың береһе. Австралияла бейеклеге 150 метрҙан да ашыуҙары осрай. Был бик үҙенсәлекле ағас. Ул бик шәп үҫә, шуға күрә үҙенә һыуҙы ла күп ала. Эвкалиптты һаҙлыҡтарҙы киптереү өсөн, һаҙлыҡлы урындарға ултырталар.

Оранжереяла ҡыҙыл ағас — секвойя ла үҫә. Уның да бейеклеге — 150, ә йыуанлығы 16 метрға етә.

**Башҡорт кейеме**

Традицион кейем-һалым — кешенең милли йөҙөн билдәләүсе күрһәткес. Кейем-һалымдың составы, уның төрҙәре, биҙәү һыҙаттары күп быуаттар буйы формалашҡан. Ул халыҡтың хужалыҡ-көнкүреш торошона, уның мәҙәни-тарихи үҫешенә бәйле.

Башҡорт костюмының стиле күсмә малсылыҡ йәмғиәте өсөн булған үҙенсәлектәр менән билдәләнгән. Кейем-һалым тула, төрлө үлән сүстәренән һуғылған туҡыма, йөн, күн, һарыҡ тиреһенән тегелгән, шулай уҡ ебәк, бәрхәт һәм башҡа туҡымалар ҡулланылған.

Өҫкә еләндәр, камзулдар йыл әйләнәһенә кейелгән. Уларҙы биҙәүгә ҙур иғтибар бирелгән.

Башҡорттарҙың йәш һәм урта быуын вәкилдәре сағыу төҫлө кейем кейгән. Ҡыҙыл төҫ янына йәшелде һәм һарыны, һирәгерәк күк төҫтө ҡулланғандар. Аҡ төҫтәге кейем ҡайыу, сигеү ярҙамында ҡыҙыл төҫ менән биҙәлгән. Өлкән кешеләр ҡара төҫтән кейенгән.

Кейем-һалымды, баш кейемдәрен йыш ҡына мәрйен, ҡортбаш, мәрүәт, сәйлән, көмөш көмбәҙҙәр һәм көмөш тәңкәләр менән биҙәгәндәр. Селтәр-

һаҡалдар, иңһәлектәр, хәситәләр, муйынсалар, сәс сулпылары — ысын-ысындан сәнғәт әҫәрҙәре.

Ювелир әйберҙәр: балдаҡтар, йөҙөктәр, беләҙектәр, алҡа-һырғалар — сүкеү, ҡалыпҡа һуғыу, гравирлау, селтәрләп үреү ысулы менән эшләнгән. Көмөштө аҡыҡ һәм фәйрүзә ҡуйып матурлағандар.

Аяҡҡа күн итектәр, кәүеш, тула ҡуңыслы ситек кейгәндәр. Ат тиреһе лә ҡулланылған. Башҡорт костюмы ғәжәп күп төрлө һәм бай.

### Һүҙлек

**Ҡайыу** — окаймлять; вышивать тамбуром, нашивать аппликации.

**Мәрйен** — коралл, бусина.

**Ҡортбаш** — раковина, которая употреблялась для украшения одежды.

**Мәрүәт** — жемчуг.

**Сәйлән** — мелкий бисер.

**Көмбәҙ** — *этн.* выпуклое монетообразное металлическое украшение для женской одежды.

**Селтәр, һаҡал** — *этн.* нагрудник (женское украшение, сделанное из серебряных монет и красных кораллов).

**Иңһәлек** — *этн.* женское украшение в виде широкой ленты с монетами, прикрепляемое на затылке и свисающее ниже пояса поверх кос.

**Хәситә** — *этн.* перевязь (женское нагрудное украшение в виде полосы ткани, плотно украшенное монетами и серебряными подвесками).

**Муйынса** — *этн.* женское нагрудное украшение (с монетами, бусами, подвесками, надеваемое на шею).

**Сулпы** — *этн.* накосник (женское украшение в виде узорчатой серебряной подвески из монет и вставками из цветных камней).

**Сүкеү** — чеканить.

**Ҡалыпҡа һуғыу** — штамповать.

**Селтәрләп үреү** — плетение.

**Аҡыҡ** — сердолик.

**Фәйрүзә** — бирюза.

**Кәүеш** — кожаная обувь типа калош.

**Ситек** — сафьяновые сапоги.

### Салауат Юлаев

Салауат Юлаев 1754 йылда Өфө провинцияһының Шайтан-Көҙәй волосының (хәҙерге Салауат районының) Тәкәй ауылында старшина ғаиләһендә тыуған.

1773 йылдың октябрендә Салауат үҙенең отряды менән Пугачевҡа ҡушыла. Ул ваҡытта уға ни бары 19 йәш була. 1774 йылдың 24 ноябрендә Салауат Юлаев ҡулға алына һәм Балтик портына ғүмерлек һөргөнгә оҙатыла. 1800 йылдың 26 сентябрендә Эстонияның Палдиски ҡалаһында үлә.

Башҡорт халҡының милли геройына Ағиҙел йылғаһының текә ярында ҡуйылған һәйкәл 1967 йылдың 17 ноябрендә асыла. Был скульптураның бейеклеге 9 метр ҙа 80 сантиметр, ауырлығы — 40 тонна. Ул бронза

ҡатнаштырылған суйындан Ленинград ҡалаһында ҡойолған. Тимер-бетон постаменты гранит менән йөҙләнгән. Унының бейеклеге 10 метр.

Һәйкәлдең авторы С.Д.Тавасиевҡа 1970 йылда был эше өсөн СССР Дәүләт премияһы бирелә. Был әҫәр монументаль скульптура өлкәһендә иң ҙур ҡаҙаныш тип иҫәпләнә.

1994 йылда һәйкәл урынлашҡан майҙанға Салауат Юлаев исеме бирелде.

**Ғәләмәт донъя**

**Ҡорғаҙаҡ шишмәһе**

Янғантау шифаханаһынан өс саҡрым алыҫлыҡта, Йүрүҙән йылғаһының һул яҡ ярында, Ҡорғаҙаҡ шишмәһе ағып ята. Унның һыуы йылы, еңелсә генә минераллашҡан. Секундына 125 литр һыу урғылып сыға. Ҡышын да туңмай, сөнки шишмәнең температураһы йыл әйләнәһенә 16-18 градус тәшкил итә.

Элегерәк был шишмә тирмәнде эшләткән. Быуаһы ла туңмағас, ҡышын ҡамыштар йәшелләнеп ултырған, һыу үҫентеләренә лә бай булған.

Ҡорғаҙаҡҡа Йүрүҙәндән һәм күлдәрҙән тотоп балыҡтар ебәреп ҡарағандар, ләкин улар тәүлек үтеүгә үлгәндәр. Был хәл һыуҙың еңелсә генә радиоактивлы булыуы менән аңлатыла.

**Ҡайнар шишмәләр**

Ер аҫтынан сыҡҡан ҡайнар һыулы йылғалар һәм һыуятҡылыҡтары ла һирәк күренеш түгел. Улар ер аҫты йылыһын кәрәгенән артыҡ ала. Ҡайһы берҙәре ныҡ тәрәнгә төшә һәм, ҡайнар сиккә етеп, һыуы парға әйләнә. Бындай сығанаҡтар күберәк вулкандар булған урындарҙа осрай. Чукоткала күп улар. Ҡайнар йылға тип аталғаны янында түҙеп торғоһоҙ эҫе пар менән тулған мунсалағы кеүек. Һыуының температураһы 80 градустан юғары. Ҡыш көндәре эргәһендәге ҡар иреп бөтә. Ҡайнар сығанаҡтар тип аталған ерҙә иһә яҙ бер айға иртәрәк килә. Йәй көнө бындағы йәшеллек, емеш-еләктең күплеге, сәскәләр һәр кемде хайран ҡалдыра.

Камчаткалағы Ҡайнар шишмәләр үҙәне иһә бигерәк һоҡланғыс. Тәбиғи фонтандар батшалығында ниндәйҙәре генә юҡ: ҙурҙары, бәләкәйҙәре. Һәр береһенең үҙ ҡылығы, үҙенсәлеге... Ҡайһылары 20 минут һайын һауаға күтәрелә, икенселәрен сәғәттәр буйы көтөргә тура килә. Ғәжәп матур күренеш ул — ер аҫтынан ҡайнар фонтандар урғылыуы. Үтә күренмәле йомшаҡ ҡына быу япма менән ҡапланған бәләкәй генә күлде күҙ алдына килтерегеҙ әле. Тыныс ҡына ятҡан күл өҫтө ҡапыл күбекләнә, ер аҫтынан ниндәйҙер тоноҡ ҡына геүләү ишетелә һәм өҫкә һыу бағанаһы атыла. Унның артынан икенсеһе, өсөнсөһө... Бер аҙҙан барыһы ла тыныслана, әйтерһең, гейзер ял итә, көс туплай. Әммә был тынлыҡ оҙаҡҡа һуҙылмай, тағы күккә ҡайнар һыу ағымы күтәрелә.

Камчаткалағы иң ҙур гейзерға Великан тип исем биргәндәр. Гейзер ҡапыл ғына хәрәкәткә килә һәм 30 метр бейеклегендәге һыу бағанаһы өҫкә атыла. Ә пары хатта йөҙәр метр бейеклеккә етә.

Камчатка ярымутрауында шулай уҡ тәбиғәттә бик һирәк осраған 12 метр бейеклектән төшөүсе ҡайнар шарлауыҡты күрергә мөмкин.

1941 йылда Камчаткала йырын буйлап аҡҡан ғәжәп тау йылғаһын асалар. Һыуы йәшкелт. Ярҙарынан быу борҡой һәм көслө фонтандар урғый. Ваҡыты-ваҡыты ҡот осҡос олоуҙар ишетелгәндәй. Ер бер туҡтауһыҙ һелкенә. Бында барлығы 200-ҙән ашыу гейзер һәм күп кенә ҡайнар минераль һыулы сығанаҡтар иҫәпләнә.

Исландия ла үҙенең ҡайнар шишмәләре менән киң танылған. Уның баш ҡалаһы Рейкьявиктан 55 саҡрым алыҫлыҡта Хаука йылғаһында урынлашҡан ҙур гейзер бөтә донъяға билдәле. Уның урғылыуын ҡарау өсөн туристар күп килә. Алыҫ түгел генә тағы ике гейзер бар. Берәүһе туҡтауһыҙ ҡайнап торғанлыҡтан, урындағы халыҡ уға Иблис ҡаҙаны тип исем биргән.

Гейзерҙар ер ҡуйынынан бик күп йылылыҡ алып сыҡҡанлыҡтан, Исландия халҡы уны файҙаланырға була. Ҡайнар сығанаҡтарҙан баш ҡалаға торбалар үткәреп, уларҙың эҫе пары һәм һыуы менән өйҙәрҙе йылыта башлағандар. Шулай итеп, 1944 йылда беҙҙең планетала ер ҡуйынындағы йылы менән йылытылыусы тәүге ҡала барлыҡҡа килә.

Боронғо халыҡ ҡайнар шишмәләр янына барырға ҡурҡһа, хәҙер иһә уларҙы төрлө яҡлап файҙаланыу яғын ҡарайҙар: минераль һыуҙары, тирә-яғындағы батҡағы сәләмәтлекте нығытыу өсөн ҡулланыла.

## Ер аҫты йылғалары

1 : 3600 — йылғаларҙағы һыу менән ер аҫтынан сәйәхәт итеүсе һыуҙарҙың нисбәте шундай. Бер саҡрымға тиклем тәрәнлектә ер аҫты ҡатламдарында һаҡланған һыу бөтөн Ер шарындағы йылғаларҙыҡына ҡарағанда 3600 тапҡырға күберәк.

Һыуҙың ер өҫтөндәге юлы билдәле: атмосфера — йылғалар, күлдәр, диңгеҙҙәр — атмосфера. Шулай туҡтауһыҙ әйләнеш яһай ул. Әммә ер аҫтына ла бик күп һыу китә. Иҫәпләүҙәр буйынса, тупраҡтың биштән бер өлөшөн һыу тәшкил итә. Тупраҡ ни тиклем йомшағыраҡ булған һайын, ямғыр һәм ҡар һыуы ла төпкәрәк үтеп инә. Айырым тамсылар бергә йыйыла һәм ер аҫты шишмәләрен барлыҡҡа килтерә. Ләкин ерҙең һыу үткәрмәй торған ҡатламдары ла бар: балсыҡ, гранит һ.б.

Ҡайһы саҡ ер аҫты йылғалары 100-әр саҡрымға һуҙыла. Ундайҙар, мәҫәлән, Сахарала табылған. Уларҙың ер аҫтынан йылдар буйы ла сәйәхәт итеүе бар. Әммә, ғәҙәттә, улар ер өҫтөнә ҡалҡып сыға. Уйламаған ерҙән сыға улар: йырындарҙа, һаҙлыҡтарҙа, күл, йылға һәм диңгеҙ төптәрендә. Берәүҙәре һалҡын шишмә булып ер ҡуйынынан сыҡһа, икенселәре ҡайнар фонтан булып өҫкә урғыла. Куба халҡы утрауҙың көньяҡ яры буйында диңгеҙҙең туҡтауһыҙ тулҡынланыуына иғтибар иткән. Һуңынан асыҡланыуынса, был урында диңгеҙ төбөнән бик көслө ер аҫты шишмәләре урғыла икән.

Греция һәм Марокко моряктары диңгеҙҙәге сөсө һыулы сығанаҡтарҙы ла күптән белгән. Уларҙың һыуы диңгеҙҙәгенән еңел булғанлыҡтан, өҫкә үк ҡалҡып сыға.

## Ғаләмдәге аралар

Күк йөҙөндәге есемдәр араһындағы алыҫлыҡтар шул тиклем ҙур, уларҙы беҙ күнеккән саҡрымдар менән үлсәүе ҡыйынлыҡтар тыуҙыра, сөнки бик оло һандар барлыҡҡа килә. Хатта беҙҙең ҡояш системаһындағы планеталар ҙа бер-береһенән унар, йөҙәр миллион саҡрым алыҫлыҡталар. Бүтәндәргә ҡарағанда Ер менән Ай араһындағы ара артыҡ алыҫ түгел — ни бары 384 мең генә саҡрым. Ҡояш иһә Ерҙән 149,5 миллион саҡрым алыҫлыҡта тора. Сәғәтенә 1000 саҡрым тиҙлек менән осҡан самолет был араны 17 йылда үтер ине. Йондоҙҙар араһындағы алыҫлыҡты үлсәү өсөн саҡрым төшөнсәһе яраҡһыҙ. Шуға күрә астрономияла бүтән берәмектәр ҡулланыла. Шуларҙың береһе — яҡтылыҡ йылы, йәки бер йылда яҡтылыҡ нуры үтә торған ара (билдәле булыуынса, яҡтылыҡ нуры бер секундҡа 300 мең саҡрым тиҙлек менән оса). Беҙгә иң яҡын йондоҙ — Ерҙән 4 яҡтылыҡ йылы алыҫлығында. Уға барып етеү өсөн самолетҡа 4 миллион йыл осорға кәрәк булыр ине. Бөтә беҙҙең йондоҙ системаһын — Галактиканы яҡтылыҡ нуры 80 мең йыл эсендә үтә.

## Йыһан рекордтары

Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү кәрәк: беренсеһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни, ырыуыңды белеү; икенсеһе — йондоҙҙарҙы исемләп атап сығыу; өсөнсөһө — хандар тураһында риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү.

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев

Иң һыуыҡ планета — Плутон. Ул ҡояш тирәләй оҙонса орбита буйлап әйләнә һәм, 1930 йылда асылғандан бирле, иң алыҫ нөктәһенә барып етмәгән әле. 2114 йылдың февралендә генә, уның температураһын үлсәп, күпме булырын әйтеп буласаҡ. Әле унда минус 233 градус менән һыуыныу дауам итә.

Иң бейек тау — Марстағы Олимп тауы — 24 км.

Иң ҙур юлдаш — Юпитерҙың Ганимеды. Әгәр ул ҡояш тирәләй әйләнһә, уны ғәҙәти планета тиергә булыр ине, сөнки Ганимед Меркурий менән Плутондан ҙурыраҡ.

Ҡояш системаһында иң ҙур планета — Юпитер, Ерҙән 317,8 тапҡырға ауырыраҡ һәм 11 тапҡырға ҙурыраҡ.

Иң ҙур метеорит — 1920 йылда Намибияла табылған Гоба метеориты. Өс метрлыҡ тимер киҫәге 60 тонна тарта. Табылғанға тиклем күпме ятҡандыр, әммә ул һаман ҡуҙғатылмаған.

Ергә иң ныҡ яҡынайыусы комета 1770 йылда Ергә Айҙан алты алыҫлыҡ аралығында үтә. Ул күктә Айҙан биш тапҡырға эрерәк булып күренеп тора.

Иң эре йондоҙ Арҡысаҡ (Орион) йондоҙлоғондағы Бетельгейзе йондоҙо. Уның диаметры Ҡояштыҡынан 800 тапҡырға ҙурыраҡ.

Ергә иң яҡын йондоҙ — Альфа-Центавра йондоҙлоғондағы Проксима йондоҙо. Ул беҙҙән 4,2 яҡтылыҡ йылы алыҫлығында ята, йәғни уның яҡтыһы ергә тиклем 4,2 йыл эсендә килеп етә.

Иң көслө метеорит ямғыры 1833 йылдың 13 ноябрендә күҙәтелә: сәғәтенә 200 мең "йондоҙ" яуа. Күреп белеүселәр иҫләүенсә, ул саҡта күктән, ҡар яуған һымаҡ, осҡондар ҡойолған.

Иң алыҫ осҡан карап — "Вояджер". Ул 1977 йылда осоролған һәм, Юпитер һәм Сатурнды үтеп китеп, беҙҙең галактиканан ситкә оса. Әле ул Ерҙән 11 млрд км алыҫлыҡта, ә уның сигналы беҙгә 2020 йылға тиклем килеп торасаҡ.

Халыҡ-ара телескоптар селтәре Гавай утрауындағы һүнгән вулкан башында, 4200 метр бейеклектә урынлашҡан. Ошо урын күк есемдәрен күҙәтеү өсөн иң уңайлы һанала. Һәр телескоптың бейеклеге 8 этажлы йортҡа тиң, ауырлығы 270 тонна. Улар икәү, көҙгөләренең диаметры 10 метр.

**Донъяның ете мөғжизәһе**

Донъяла мөғжизәләр етерлек. Әммә борон-борондан улар араһында етәүһен айырып йөрөтәләр.

Беренсе, иң боронғо мөғжизә — Хеопс, Хефрен, Микерин исемле Египет фараондарының пирамидалары.

Икенсе мөғжизә — беҙҙең эраға тиклемге V быуатта йәшәгән бөйөк скульптор Фидий тыуҙырған ҡомартҡы. Ул — тәхеттә ултырған баш грек аллаһы Зевстың һыны. Бейеклеге 20 метрлыҡ был һындың йөҙө һәм тәне фил һөйәгенән, ә һул иңбашы аша һалынған плащ саф алтындан эшләнгән! Әммә 900 йыл торғандан һуң, Грецияны талаған германдарҙың гот ҡәбиләһе тарафынан юҡҡа сығарылған.

Өсөнсө мөғжизә — Эгей диңгеҙенең Родос утрауындағы Аполлон һыны. Ул еҙҙән ҡойолған һәм Зевс һынынан 12 метрға бейегерәк булған. Үкенескә ҡаршы, ер тетрәү ваҡытында тотош емерелгән.

Дүртенсе мөғжизә — Аполлондың туғаны, ай һәм һунар алиһәһе Артемида (Диана) храмы. III быуатта готтар тарафынан ҡыйратылған.

Бишенсе мөғжизә — Галикарнас ҡалаһында Мавзол исемле фарсы батшаһы ерләнгән храм-мавзолей.

Алтынсы мөғжизә — Семирамиданың аҫылмалы баҡсалары. Ассирия батшабикәһе Семирамидаға Вавилон батшаһы Шамшиадат V ғашиҡ була һәм уның хөрмәтенә бик ҙур ҡоролма төҙөтә. Аркалар рәтенән торған һәр бер ҡатта тупраҡ һалынып, ерҙең төрлө мөйөштәренән килтерелгән ағастар, үҫемлектәр ултыртылған, шишмәләр, фонтандар урғылып торған, матур ҡоштар һайраған.

Донъяның етенсе мөғжизәһе — Форос утрауында, Александрия ҡалаһы янындағы маяҡ. Ул беҙҙең эраға тиклемге III быуатта төҙөлгән. Маяҡ диңгеҙ юлдары киҫешкән ерҙә урынлашып, сәйәхәтселәргә аҙашмаҫҡа билдә булып торған. Бейеклеге 150 метр булған.

**Минуттарҙы һанай сәғәт**

Ер шарының ҡайһы ғына өлөшөн алма, ваҡыт ҡәҙерле һәм ҡиммәтле төшөнсә һанала. Был хаҡта башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә лә әйтелә. "Бөгөн эшләйһеңде иртәгәгә ҡалдырма", "Башлаған эшеңде тамамла", "Юғалған алтын табыла, ваҡыт табылмай", "Бер көн артта ҡалһаң, биш көндә лә ҡыуып

етә алмаçһың”, “Ваҡыты етмәй, гөл дә сәскә атмай”, “Ҡалған эшкә ҡар яуа” һәм башҡалар.

Ер шары бер туҡтауһыҙ әйләнеп тора. Шунлыҡтан Токиола кис икән, Нью-Йоркта был ваҡытта иртә, ә Мәскәүҙә көн була. Өфөлә киске сәғәт һигеҙ, ә Мәскәүҙә әле алты ғына, Прагала иһә - көндөҙгө дүрт. Ошо уҡ сәғәттә Нью-Йоркта – иртәнге ун, ә Токиола – төнгө бер.

Ваҡытты белдереү өсөн боронғолар сәғәт уйлап сығарған. Мәçәлән, ҡояш һәм ҡом сәғәттәре, шәмдәр һәм майлы лампалар... Һыу сәғәттәре (Һиндостан, Греция, Египет, Ҡытай) тәүлек буйына эшләгән. Һыу резервуарға тамсылап төшкән һәм ваҡытты белдергән. Ҡом сәғәттәре лә ваҡытты дөрөç күрһәткән, әммә сәғәт һайын был һауытты әйләндереп торорға кеше кәрәк булған.

Беренсе механик сәғәттәр Миланда 1335 йылда барлыҡҡа килгән. Рәсәйҙә беренсе механик сәғәттәр 1404 йылда Кремлдә ҡуйыла. 1675 йылда Х.Гюйгенс маятниклы сәғәт уйлап таба. Бөгөнгө көндә ул ваҡытты дөрөç күрһәтеүсе берҙән-бер сәғәт һанала. 1950 йылда беренсе электр менән эшләүсе һәм электромеханик сәғәттәр барлыҡҡа килә. 1967 йылда – кварц, ә 1972 йылда электрон сәғәттәр донъя күрә. Беренсе ҡул сәғәте 19 быуатта Наполеондың үгәй улы Евгений Богарне өсөн уйлап сығарыла.

Шулай итеп, сәғәт кешелек тормошоноң айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әйләнә. Хәҙер иһә тормошто унһыҙ бөтөнләй күҙ алдына ла килтереп булмай.

М.Ҡолмөхәмәтова

**Микроскопты кем уйлап тапҡан?**

“Микроскоп” һүҙе беҙгә гректарҙан ингән. Һүҙҙең беренсе өлөшө “бәләкәй генә” тигәнде аңлата, ә икенсеһе – “күҙәтеүсе” мәғәнәһендә. Ул – кеше күҙе күрмәгән әйберҙәрҙе лә “күрә” торған нәмә.

Боронғо заманда микроскоп булып ҙурайта торған быяла хеҙмәт иткән. Әлеге көндә инде был әйберҙең бик ҡатмарлы төҙөлгәндәре лә бар.

Ҡатмарлы микроскопта ҙурайтылыу ике этапта бара. “Объектив” тип аталған линзалар иң тәүләп ҙурайтылған һүрәтте күрһәтә. “Окуляр” тигән икенсе линза аша объект тағы ла ҙурыраҡ үлсәмгә күсә. Объективта ла, окулярҙа ла бер нисәшәр линза ҡуйыла.

Ҡатмарлы микроскоп 1590-1610 йылдарҙа төҙөлә. Уйлап табыусыһын тәғәйен белмәһәләр ҙә, был асыш Галилейҙыҡы тип иçәпләнә.

“Үçмерҙәр өсөн энциклопедия”нан

**Тропиктарҙағы һөйрәлеүселәр**

Комодо — кескәй генә утрау. Ул Яванан көнсығыштараҡ, Индонезия архипелагында урынлашҡан. Утрауҙың майҙаны — 350 квадрат километр самаһы. Был утрауға Европа кешеләренән беренсе булып 1912 йылда бер летчик һуғылып үтә. Ул Европаға утрауҙа йәшәүсе гигант варандар тураһында хәбәр алып ҡайта.

Нимә һуң ул варандар?

Улар хәҙерге замандың иң ҙур һәм иң уçал кеçәрткеләре. Варандарҙың ҡиәфәте имәнес һәм шөкәтһеҙ. Уларҙың баштары питондыҡына оҡшаш. Был

гигант кеҫәрткеләрҙең оҙонлоғо 3-4 метрға, ә ауырлыҡтары 130-150 килограмға етә.

Варандар һунарға төндә сығалар. Уларҙың төп аҙығы — ҡыр сусҡалары һәм боландар, буйволдарға һәм аттарға ла һөжүм итәләр.

Д.Бураҡаевтан

## Картуф сәсеү мәле етте

Картуфтың тыуған иле — Көньяҡ Америка. Бында уны 14 мең йыл элек үҫтергәндәр. Башҡа ҡитғаларҙа ул Көньяҡ Америкаға походта ҡатнашыусы испан һалдаты Педро Чиезо де Леон арҡаһында билдәле була. 1538 йылда Леон көндәлегенә Европала билдәһеҙ “папа” йәки “папас” исемле үҫемлек тураһында яҙып ҡуя.

Европаға картуфты испандар 1565 йылда ғына алып ҡайталар. Испанияла уға ҡыҙыҡһыныу тыумай, XVI быуатта Италияға килеп эләккәс кенә картуф ныҡлап тарала башлай. Итальяндар ер аҫты бәшмәктәренә оҡшатып, “тарфуффоли”, йәғни “трюфель” тигән атама бирә.

Нәҡ шул исем менән ул Европала тарала ла. Тик һәр халыҡ үҙ теленә яраҡлаштыра: Рәсәйҙә тәүҙә “тартуфоль”, аҙаҡ “картофель”. Рәсәйгә картуф Петр I арҡаһында килеп эләгә (йәнәһе, ул Роттердамдан бер тоҡ итеп ебәргән) тигән һүҙ тарихи дәлилдәр менән раҫланмай. Кем тәү башлап үҫтереүен әйтеүе ҡыйын.

## Витаминдар донъяһында

Витаминдарҙың файҙаһы хаҡында һәр кем белә.

А витамины — туҡымаларҙа һәм күҙәнәктәрҙә аяҡҡа баҫтырыу реакцияларында ҡатнаша. Һөт аҙыҡтарында, йоморҡала, бауырҙа, треска тоҡомло балыҡтарҙа, томатта, кишерҙә, шпинатта, емеш-еләктә, петрушкала бар.

$B_1$ витамины — туҡымаларҙың тын алыуын һәм күҙәнәктәргә кислород килеүен көсәйтә. Уға бауыр, һөт, йомортҡа, борсаҡ, фасоль, сүпрә бай.

$B_{12}$ витамины — матдәләр алмашыныуына йоғонто яһай. Ул бауырҙа, бөйөрҙә, йомортҡа һарыһында күп.

$B_2$ витамины — матдәләр алмашыныуында мөһим роль уйнай. Уның етешмәүе сәстәр, күҙ, ауыҙ ҡыуышлығы һәм ирендәр торошонда сағыла. Бөтә ит һәм һөт продукттарында, бигерәк тә сүпрәлә бар.

$B_5$ витамины — күҙәнәктәрҙә матдәләр алмашыныуын оптималь кимәлдә тота. Витамин етешмәүе тире, тырнаҡтар, сәс торошонда һиҙелә. Уның сығанаҡтары — һөт, йомортҡа, бауыр. Матдәләр алмашыныуы, боҙолоуын дауалау өсөн кальций тоҙо формаһында ҡулланыла.

$B_3$ витамины — тиренең сәләмәтлеге өсөн кәрәк, тамырҙарҙы киңәйтеүгә йоғонто яһай, матдәләр алмашыныуында ҡатнаша. Һөттә, йоморҡала, борсаҡта, фасолдә бар.

$B_6$ витамины — аминокислоталар алмашыныуын ғәмәлгә ашырыусы ферменттар төҙөүҙә мөһим роль уйнай. Уның етешмәүе дерматитҡа килтерә. Сүпрәлә, үҫемлектәрҙең йәшел өлөшөндә була.

Д витамины — күҙәнәктәрҙә һәм һөйәк туҡымаһында кальций һәм фосфаттар күсеүен көйләй. Диңгеҙ балыҡтары ыуылдырығы һәм бауыры, балыҡ майы уларға бай.

Е витамины — бик көслө антиоксидант, уны “йәшлек витамины” тип тә атайҙар. Ул бойҙай бәбәгендә, йәшел үҫентеләрҙә, һырғанаҡ, көнбағыш, арахис майында күп.

F витамины — кислород һәм май алмашыныуында ҡатнаша, шешеү процесын бөтөрә, күҙәнәктәрҙең яңырыуына булышлыҡ итә, уларҙың дымды юғалтыуын иҫкәртә. Был витамин етешмәгәндә тире ҡорой, сәс ҡойола, кәүәкләнә. Үҫемлек майҙары, көнбағыш, миндаль, һырғанаҡ орлоғо, гөлйемеш составына инә.

С витамины — туҡымаларҙың яңырыуына булышлыҡ итә. Уларға цитрус емештәре, шалкан, йәшелсә һәм емештәр бай, бигерәк тә ҡара ҡарағатта, гөлйемештә, ҡыҙыл бороста, татлы һуғанда күп.

## Йәшел аптека

Дарыу үләндәре әҙерләү өсөн йәй – иң ҡулай ваҡыт. Тик уларҙы оло юлдан, заводтар тирәһенән ситтә, урман-яландарҙа йыйыу һәйбәтерәк.

Үләндәрҙе ҡыҙыу ҡояш аҫтында киптерергә ярамай. Улай иткәндә, шифаһы теймәйәсәк. Еләҫ ерҙә яҡшылап киптерелгән үләнде ныҡлап ябылған быяла һауыттарҙа, ҡоро, һалҡынса, ҡараңғы урында һаҡларға кәрәк.

Һары мәтрүшкәне сәскә атҡан осорҙа һабағы менән 15-20 сантиметр оҙонлоғонда йыялар. Сәй кеүек ҡайнатып эсәләр. Һалҡын тейгәндә, тамаҡ шешкәндә файҙалы.

Юл япрағын йәй буйына йыйып әҙерләргә мөмкин. Тик япраҡтарында таптары булмаһын. Был үҫемлек тә тамаҡ ауыртҡан, йүткергән мәлдә шифалы һанала.

Ромашканы сәскәләре ныҡ асылған саҡта өҙөргә кәрәк. Төнәтмәһен тирләү, тынысланыу өсөн, эсәктәр, ашҡаҙан ауыртҡанда эсәләр. Шулай уҡ яраны сайҡатыу өсөн дә ҡулланалар.

Ҡара ҡарағат, ҡурай еләгенең емештәре лә, япраҡтары ла файҙалы. Тик емештәрен боҙолмаҫ элек киптереү сараһын күреү мотлаҡ. Ҡурай еләге һәм ҡарағат сәйен эсеү һалҡын тейгәндә бик шифалы, тирләү өсөн дә һәйбәт.

“Йәншишмә”нән

## Һүҙлек

Һары мәтрүшкә - зверобой
Юл япрағы – подорожник
Төнәтмә - настойка

## Витаминдар хазинаһы

Миләште, бик әсе булғанға, ҡайһы берәүҙәр яратып еткермәй. Уның витаминдар хазинаһы икәнлеген онотоп ебәрәләр, күрәһең. Миләш каротиндарға һәм антициан ҡушылмаларға, А һәм С витаминдарына, пектинға һ.б. бай. Миләш еләгендәге витаминдар, органик кислоталар, микроэлементтар тиҫтә ярымдан артып китә.

Миләш ҡан системаһы боҙолғанда, таштар булғанда, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары менән яфаланғанда бик файҙалы. Ул бигерәк тә балаларға һәм өлкән йәштәгеләргә шифалы.

Миләшкә халыҡ ғүмер буйы хөрмәт менән ҡараған. Уны киҫмәгәндәр, һындырмағандар. Миләш ағасын рәнйеткән кеше сәләмәтлеккә туймай һәм хәйерсе була, тип ышанғандар.

“Башҡортостан уҡытыусыһы”нан

**Хәтерең насармы?**

Өлкәндәр генә түгел, балалар ҙа йыш ҡына хәтере юҡлығына зарлана. Кемдер сәбәбен мәғлүмәт ағымының көслө булыуынан, кемдер йод етешмәүҙән, кемдер аҡыллы китаптар уҡымай, телевизор-компьютерға текләп ултырыуҙан күрә. Ни булһа ла, хәтерҙе күнектерергә, яҡшыртырға мөмкин. Беренсенән, башватҡыстар, шахмат мәсьәләләре, кроссворд-сканвордтар сисеп, шиғыр ятлап. Икенсенән, “аҡыллы ризыҡтар” ашап.

Мәҫәлән, мүк еләге. Унда антиоксиданттар күп. Улар – атеросклероз ауырыуына ҡаршы һәйбәт сара. Тимәк, баш мейеһен ҡан менән тәьмин итеүсе тамырҙар һығылмалы булып ҡаласаҡ.

Көртмәле лә шундай уҡ сифаттарға эйә. Бынан тыш, күҙҙәр үткерлеген, ҡолаҡтар һаҡлығын да ҡайғырта.

Сөгөлдөр менән кәбеҫтә Альмцгеймер (ҡартлыҡ аҡылһыҙлығы) сирен барлыҡҡа килтереүсе ферменттарҙы юҡҡа сығарыусы матдәләргә бай.

Һимеҙ диңгеҙ балыҡтарындағы майлы кислоталар баш мейеһендәге матдәләр алмашыныуын яҡшырта. Ә фосфор туҡымаларға кислород үтеп инеүенә булышлыҡ итә.

“Йәшлек”тән

**Һүҙлек**

Мәғлүмәт – информация
Башватҡыс – головоломка
Мүк еләге – клюква
Көртмәле - черника

**Аттарҙың иң-индәре**

Александр Македонскийҙың Буцефал ҡушаматлы аты **иң ҡыйыу** ат иҫәпләнә. Ул донъяла бер нәмәнән дә ҡурҡмаған тиер инең, үҙ күләгәһенән өркөр булған.

**Иң бәләкәй** ат — Горбунок. Был ат өс ҡарыш ҡына бейеклектә, ишәк кеүек оҙон ҡолаҡлы, йөнтәҫ итеп һүрәтләнә. Горбунок ҡушаматын иҫбатлап, арҡаһында дөйәнеке һымаҡ ике үркәсе лә була уның. Күҙ алдына килтерәһегеҙме шундай өрәкте?

**Иң ҡырағай** ат — Пржевальский аты. Хатта уны, беҙ ҡабул итеп өйрәнгән ат тип түгел, ә болан йә мышы кеүек ҡырағай януарҙар рәтенә индерергә кәрәктер.

**Иң зыянлы** ат — Олег кенәздең аты. Легенда буйынса, ул әжәлен атынан таба, йәғни үлгән атының баш һөйәге эсендә ятҡан йылан кенәзде сағып үлтерә.

**Иң мәкерле** ат — Троя аты. Әлбиттә, был осраҡта изге мәхлүктең ғәйебе лә шул сама ғына булғандыр, ни тиһәң дә, ағастан яһалған уйынсыҡ ат эсенә шымсылар ултыртыу һәр кешенең дә башына килмәç ине әле. Әммә тарихта ул мәкерле кешеләрҙең түгел, ә аттың яманаты ҡалған.

**Иң ябыҡ** ат — Росинант. Сервантестың яҙыуынса, Дон Кихот, атын ҡарап сыҡҡас, ошондай фекергә килә: “Ул дүрт аяғына ла аҡһай һәм тире тарттырылған һөйәктәрҙән генә ғибәрәт”.

**Иң сәйер** ат — мушкетер д’ Артаньяндың аты. Ул Парижға тәүләп килеп ингәндә, атының был хайуандарға һис тә хас булмағанса сағыу һары төçтә булыуына иғтибар итәләр. Хәс тә көҙгө ҡайын япрағы төçөндә инде бына.

**Иң вазифалы** ат — Рим императоры Гай Калигуланың аты. Ул яратҡан малҡайына әҙ ҙә түгел, күп тә түгел — сенатор дәрәжәһен биргән.

**Иң ғәжәп** ат — Айболит докторҙың дуçы Тянитолкай. Уның ике башы булыуы мәғлүм. Ҡойроғо юҡ шикелле. Тик бына тояҡтары нисегерәк икән — дүртәүһе лә алғы аяҡтармы?

## Хәрбиҙәр

Хәрбиҙәрҙең есеме исеменән күренә.

**Һалдат**. Итальян һүҙенән алынған. Һаҡсы, ҡарауылсы, хәрби хеҙмәтсе булып ялланған кеше тигән һүҙ.

**Рядовой**. Урыç телендәге “ряд” һүҙенән — рәт, сафта тороусы хәрби хеҙмәтсе тигән һүҙ.

**Ефрейтор**. Немецса “гефрайтер” — азат ителгән мәғәнәһендә. Ул ябай һалдат башҡара торған ауыр хеҙмәттән азат ителгән, еңелерәк эшкә күсерелеп, һалдаттан бер баçҡыс юғарыраҡ тора.

**Сержант**. Латинса “сервиенс” һүҙен үҙгәртеп яһалған. Йәғни хеҙмәт итеүсе була.

**Старшина**. Урыç теленән “старейшина” һүҙенән килеп сыға. Тимәк, абруйлы, дәрәжәле. Армияла иһә кесе чиндарҙың иң олоһо мәғәнәһендә.

**Прапорщик**. Славян халыҡтары телдәрендә “прапор”, йәғни байраҡ, флаг. Ә прапорщик — байраҡсы, саф алдында хәрби частың байрағын күтәреп барыусы.

**Офицер** званиеһы Петр I батшалығы осоронда барлыҡҡа килә. Латинса “официариус” — хеҙмәт башҡарыусы, хеҙмәт менән йәшәүсе һүҙенән алынған. Бөгөн киң ҡулланылған “офис” һүҙе лә шунан килә.

**Лейтенант**. Шулай уҡ француз теленән — урынбаçар, ярҙамсы, вариç мәғәнәһен белдерә.

**Капитан**. Латинсанан “кап” — баш тигән һүҙ. Тимәк, капитан — баш кеше, алда тороусы.

**Майор**. Шулай уҡ латинсанан “маир” һүҙенән — оло, өлкән, өçтөн мәғәнәһендә ҡулланыла. Уны немецтар “майор” тип ҡабул иткәндәр һәм беҙҙең

телгә лә шул килеш кергән. Француздарса иһә атанан ҡалған малды иң өлкән йәштәге вариҫка ҡалдырыу законы “майорат” тип атала.

**Полковник**. Славян телендәге “пак” — халыҡ төркөмө, ғәскәр мәғәнәһендәге һүҙҙән, ғәскәр етәксеһе тигәнде аңлата.

**Генерал**. Уның мәғәнәһе — ҙур кеше, алда тороусы, баш кеше.

**Маршал**. Был исем башта король, императорҙарҙың һарайҙарында махсус хеҙмәттә тороусыларға ғына бирелә торған дворян дәрәжәһендәге звание булған.

**Генералиссимус** — иң юғары хәрби дәрәжә. Был атаманың беренсе өлөшө “баш кеше” мәғәнәһендә, “симус” иһә латинса “иң алда” тигән һүҙ. Тимәк, генералиссимус генералдарҙың да генералы була.

### Ни өсөн Үле диңгеҙ “үле” тип атала?

Ни өсөн диңгеҙ диңгеҙ тип, ә күл күл тип атала икән? Улар араһында айырма нимәлә?

Диңгеҙ — Донъя океаны менән тоташҡан һыу ятҡылығы. Шуның өсөн уның һыуы һәр саҡ тоҙло була. Ә күлдәр материктың эсендә ята, улар океан менән тоташмай һәм, ҡағиҙә буларак, һыуҙары сөсө. Мәгәр тоҙло күлдәр ҙә бар.

Ҙурлығын күрһәтеү өсөн ҡайһы бер күлдәрҙе диңгеҙ тип йөрөтәләр.

Үле диңгеҙ ҙә — күл. Уның һыуы тоҙло ғына түгел, ә океан һыуынан 10 тапҡыр тиерлек тоҙлораҡ! Шуға күрә Үле диңгеҙҙә бер йән эйәһе лә йәшәй алмай. Хатта микроорганизмдар ҙа. Диңгеҙҙең исеме лә ошонан килеп сыҡҡан.

Үле диңгеҙ Яҡын Көнсығышта ята. Уның климаты һаулыҡ өсөн бик файҙалы. Бында бик күп санаторийҙар төҙөлгән.

Ныҡ тоҙло булғанға, был диңгеҙ һыуында батыу мөмкин түгел, һыу үҙе үк һине өҫкә этеп сығара. Шулай ҙа һыу ингәндә үтә һаҡ булырға кәрәк, сөнки күҙгә эләккән бер тамсы һыу уға тоҙ һибеү менән бер.

### Хоҡуғыңды беләһеңме, студент?

*Студент бер юлы ике уҡыу йортонда белем алыу хоҡуғына эйәме?*

Закон буйынса, студенттарға бер юлы бер нисә уҡыу йортонда белем алыу хоҡуғы бирелгән, ләкин ул көндөҙгө бүлек студенттарына ҡағылмай.

*Батырға ла ял кәрәк.*

Студент тигәс тә көнө буйы  лекция тыңлап ҡына ултырырға тимәгән, уның да сиге булырға — дәрестәр, лекциялар һаны аҙнаһына 54 сәғәттән артмаҫҡа тейеш.

*Вузды ташлаған студент яңынан тергеҙелә аламы?*

Үҙ теләге йәиһә ниндәйҙер сәбәп менән уҡыуын ҡалдырған студент шул уҡ уҡыу йортонда яңынан уҡый ала. Өҫтәүенә, әгәр ҙә ул әлегә тиклем түләүһеҙ бүлектә белем алһа, артабан да шул уҡ нигеҙҙә уҡыуын дауам итәсәк.

*Бер уҡыу йортонан икенсе уҡыу йортона күсергә мөмкинме?*

Бер уҡыу йортонан икенсеһенә күсеү өсөн ниндәйҙер мөһим сәбәп булырға тейеш.

*Академик отпуск кемдәргә тейеш?*

Академик отпуск студенттарға медицина ҡушыуы буйынса йәиһә айырым осраҡтарҙа (ғаилә хәлдәре, ҡаза күреү) бирелә. Әммә ул бер йылдан да оҙон булырға тейеш түгел.

*Хәрби хеҙмәттән кемдәр азат ителә?*

Дәүләт ҡарамағындағы, муниципаль һәм дәүләт аккредитацияһы үткән һәм дәүләт ҡарамағында булмаған урта һәм юғары профессиональ белем биреү учреждениеларының көндөҙгө бүлек студенттары уҡыған осорҙа армияға саҡырылмай. Ә инде уҡыу йортоноң аккредитацияһы юҡ икән, тимәк, армияға барырға тура киләсәк.

**Олимпия уйындары ҡасан барлыҡҡа килгән?**

Олимпия уйындары тураһындағы тәүге мәғлүмәттәр беҙҙең эраға тиклемге 776 йылға ҡарай. Ул — ярыштарҙа еңеүселәр исемлеге.

Был уйындар дүрт йылға бер тапҡыр боронғо гректар изге тип һанаған Олимп тауында үткәрелгән. Улар биш көн барған. Тантаналы йөрөштәрҙән һуң Зевс исемле алла хөрмәтенә ҡорбан килтергәндәр. Һуңынан йүгереү, көрәш, йоҙроҡ һуғышы, һөңгө сөйөү, ике тәгәрмәсле арбалар менән уҙышыу кеүек ярыштар үткәрелгән.

Һуңыраҡ, беҙҙең эраға тиклемге IV быуатта, Олимпия уйындарында, спортсыларҙан тыш, шағирҙар, музыканттар, актерҙар сығыш яһай башлаған. Еңеүселәргә ҙур хөрмәт күрһәтелгән. Улар һалымдарҙан азат ителгән һәм үлгәнсе дәүләт иҫәбенән туҡланыу хоҡуғы алған.

Олимпия уйындары тотош донъя байрамы һаналған. Был ваҡытта бөтә һуғыштар туҡталып торған. Ләкин 304 йылда Рим императоры был уйындарҙы үткәреүҙе тыя.

1884 йылда Парижда Халыҡ-ара спорт конгресы үткәрелә. Конгресс Олимпия уйындарын ҡайтанан тергеҙергә ҡарар итә һәм 1896 йылдың 5 апрелендә Афина ҡалаһында асылған уйындар хәҙерге Олимпия хәрәкәтенең яңы тарихын башлап ебәрә.

**“Каникул” һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан?**

Бөтәбеҙгә лә билдәле булыуынса, каникул — ял осоро. Был һүҙ һәр уҡыусыла шатлыҡ тойғоһо уята. Ул этимологияһы буйынса латин һүҙе “канис”тан алынған.

Борон римляндар “Сириус” йондоҙон “Каникула” тип йөрөткәндәр. Ул — күк йөҙөндә балҡып яныусы иң сағыу йондоҙ. Айырыуса ул июль айында яҡты нурҙар сәсә, ошо ваҡыт Римда йәйге эҫе көндәр башлана һәм уҡыуҙар туҡталып торған. “Каникул” һүҙе ошо йондоҙ атамаһынан килеп сыҡҡан.

**Газетаға нисә йәш?**

Уның тарихы ике мең йылға яҡын. Беҙҙең эраға тиклем үк Римда таҡтаға гипс һылап листовкалар сығарғандар. Улар хәҙерге газетаның башланғысы булып иҫәпләнә.

Европала газета баҫыу 17-18 быуаттарҙа буржуаз революциялар башланған осорҙа башлана. Тәүге ваҡытлы баҫма сифатында ул 1609 йылда

Страсбургта (Франция) барлыҡҡа килә. Шул уҡ осорҙа (1621 йылда) Рәсәйҙә газета сыға башлай. Дөрөҫ, ул ҡулдан яҙылған була.

Газета тигән һүҙ итальян теленән алынған. Элек Италияла (Венецияла) ваҡ аҡсаны газета тип йөрөткәндәр. Ул ваҡытта Венецияла ҡулдан яҙылған листовкалар һатылмаған, шулай ҙа кешеләр уны уҡып сығыу өсөн ваҡ аҡса — газета түләгән. Һуңынан, баҫма бюллетендәр сығарыла башлағас, уның исеме шул аҡса исеме менән газета булып тороп ҡалған.

**Кроссворд тарихынан**

“Кроссворд” инглиз теленән “арҡыры-буйлы киҫешеүсе” тигәнде аңлата. Тәүге кроссворд 1913 йылда АҠШ-та “Нью-Йорк геральд” газетаһында баҫыла. Беҙҙең илдә “Огонек” журналында 1929 йылда сыға. Республикала тәүге кроссвордты “Башҡортостан уҡытыусыһы” журналы 1966 йылда тәҡдим итә.

**Үлсәү берәмектәре**

Аршын — төрөк теленән алынған. Яҡынса 71,12 см-ға тиң. Аршын Төркиәлә, Афғанстанда, Иранда, ә үлсәүҙең метрик системаһы индерелгәнгә тиклем Рәсәйҙә, Болгарияла, Югославияла оҙонлоҡ үлсәү берәмеге итеп ҡулланылған.

Дюйм — голланд һүҙе, “биш бармаҡ” тигәнде аңлата. Яҡынса бер дюйм 2,5 см һәм ул үлсәүҙәрҙең Англия системаһы таралған илдәрҙә генә түгел, башҡа илдәрҙә лә киң ҡулланыла.

Миль — латин һүҙе. Төрлө илдәрҙә милдең дәүмәле төрлөсә: Египетта 1 миль 0,58 км-ға, Римда — 1,598 км-ға, боронғо чехтарҙа — 11,2 км-ға, Рәсәйҙә — яҡынса 1,7 км-ға тигеҙ.

**Теле барҙың ғына иле бар**

**Башҡорт теле**

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле.

Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй, йор, зирәк һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле.

Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем — тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем — гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем — бөйөкһөң һин,
Эй, хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле.

Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың яугир юлын,

Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Эй, бәхетле, эй, ҡәҙерле башҡорт теле.

Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин йәшәү, бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле — минең телем.

З.Бейешева

Мин халҡымдың сәскә күңеленән,
Бал ҡортондай ынйыы йыямын,
Йыямын да — йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын...

Халҡым теле миңә — хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле миңә — сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

Р.Ғарипов

**Мираҫ**

Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр.
Башҡорт халыҡ мәҡәле

Тыуғанымдан киткәнемә тиклем —
Ғүмер буйы йыйған милкемде,
Улым, ҡыҙым, һеҙгә ҡалдырамын
Иң ҙур мираҫ — туған телемде.
Ул да миңә ата-әсәйемдең
Иң берҙән-бер ғәзиз мираҫы.
Ул да һеҙгә ғүмер буйы ерҙә
Һулар һауа кеүек булһасы.
Мең йыл буйы халыҡ аҡылының
Мең тылсымын йыйған хазина,
Юҡ, һатылмай, сөнки мөмкин түгел
Баһа ҡуйыу уның хаҡына.
Күкрәк һөтө, бишек йыры менән
Кергән дә ул йәнде имләгән.
Юҡҡамы ни кеше туған телен
Тыуған иле менән тиңләгән.
Яратҡанға бал-май булып тамған,

Нәфрәттәрҙән — уҡтай ҡаҙалған.
Быуаттарҙың гөлө һәм көлөнән —
Халыҡ яҙмышынан яралған.
    Туған телдә күпме сәсән, шағир,
    Йырға һалған якты өмөтөн.
    Быуындарҙан-быуындарға биргән
    Байраҡ итеп моңон, саф һүҙен.
Халҡым барҙа туған телем булыр,
Тик һеҙ уға ғәмһеҙ булмағыҙ,
Яҙыҡ булыр әгәр үҙегеҙҙе
Аманаттан өҫтөн ҡуйһағыҙ.
    Бабайҙарҙан, әсәйемдән алған —
    Ғүмер буйы тапҡан милкемде,
    Улым, ҡыҙым, һеҙгә ҡалдырамын
    Бөйөк мираҫ — туған телемде.

Р. Мифтахов

***

Туған телем! Әсәм теле! Ниндәй ҙур көскә эйә ул туған тел! Үҙ телемде белмәһәм, тыуған еремдән ситтә йәшәһәм, үҙемде бәхетле һанай алмаҫ инем.

Башҡорт телен һанға һуҡмаған кеше туған халҡының үткәнен дә, бөгөнгөһөн дә, киләсәген дә белә алмай. Милли батырыбыҙ, шағир һәм йырсы Салауат Юлаевты онотҡан йәки уның “Һандуғас”, “Уҡ”, “Егеткә”, “Зөләйха” кеүек мәшһүр шиғырҙарын белмәгән кеше үҙ теле, үҙ милләте менән ғорурлана алмай.

Әсәм теле — сәсән теле. Моңло, матур, бай туған телем. Ә туған телем — минең йөрәк тибешем, йәшәү дәртем, бәхетем!

**Тел тураһында мәҡәлдәр**

Әсә теле бер булыр.
Иле барҙың теле бар.
Һүҙ бер көнлөк, тел ғүмерлек.
Тел — әсәнең балаһына иң ҡәҙерле бүләге.
Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр.
Әҙәп башы — тел.

Телдән дә көслө нәмә юҡ. Тел ул ҡылыстан үткер. Бер һүҙ кешене үлтерә икән, икенсеһе терелтә ала. Тел йыуата ла, илата ла, уттарға ла һала.

Ғ.Хөсәйенов

*******

Донъяла кешеләр төрлө телдә һөйләшә. Әммә лингвистика аныҡлыҡты өҫтөн күрә. Шуға күрә лингвистар ваҡыты-ваҡыты менән нисә тел барлығын һанай һәм мәғлүмәттәрҙе киң информация сараларында баҫып сығара. Әле Ер йөҙөндә 5621 диалект һәм тел иҫәпләнә. Шуларҙың 500-ө генә һәйбәтләп өйрәнелгән. Телдәрҙең өстән ике өлөшөнөң үҙ яҙмаһы юҡ.

Әле донъяла 200-ләп тел киң таралған. Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ яҙмаһы бар. Бөтәһе дүрт яҙма бар: латиница (70 илдә файҙаланыла), кириллица (60 илдә), ғәрәп графикаһы (10 илдә), иероглифика (3 илдә).

**Әсәкәйем — берҙән-берем**

**Мин әсәмде күккә тиңләр инем**

Әсә һүҙе шундай яғымлы ул,
Иң изге һүҙ барлыҡ донъяла.
Ошо һүҙҙән Тыуған ил башлана,
Телен аса тыуған һәр бала.

Мин әсәмде күккә тиңләр инем,
Йөҙкәйҙәре уның — аяҙ күк.
Сәскән изгелеге сәскә булһа,
Ерҙе ҡаплар ине хәҙер үк.

Күңелдәре йыһан киңлегендәй,
Тауыштары — тауҙар шишмәһе.
Әсә мөхәббәте — төпһөҙ диңгеҙ,
Тамсыһы ла уның кипмәһен.

Мин әсәмде айға тиңләр инем,
Ҡараштары уның — көмөш ай.
Ай яҡтыһы менән бәхет һорап,
Мине көткән әсәм йоҡламай.

Һағынып та ҡайтып был күреүем,
Бар күңелдән тәбрик итеүем,
Һинең өсөн бөгөн был алҡыштар,
Әсәм — минең уңыш бетеүем.

Р. Мансурова

**Әсәләр тураһында мәҡәлдәр**

Атаһын күр ҙә улын ҡос, әсәһен күр ҙә ҡыҙын ҡос.
Бала ҡәҙерен әсә белер.
Ишеге ямандың өйөнә барма, әсәһе ямандың ҡыҙын алма.
Телһеҙҙең телен әсәһе белер.
Үҙ әсәң бауырһаҡ, үгәй инәң — һарымһаҡ.
Әсә янында бала етем булмай.
Атаһыҙ бала етем түгел, әсәһеҙ бала етем.
Әсә ҡуйыны тундан йылыраҡ.
Әсә йылыһы — ҡояш йылыһы.
Ата-әсәһен тыңлаған әҙәм булған, тыңламаған әрәм булған.
Ағасына күрә алмаһы, әсәһенә күрә балаһы.
Бала шатлығы — әсә шатлығы.

Әсә күңеле балала, бала күңеле далала.
Әсә һөтө менән инмәгән — тана һөтө менән инмәй.
Ата-әсә алғышы утҡа-һыуға батырмаҫ.
Ата-әсәһенә ҡәҙер күрһәтмәгән — үҙе лә изгелек күрмәҫ.
Баланың ғәйебе — ата-әсәнеке.
Донъяла ата-әсәнән башҡа бар нәмә лә табыла.
Астан үлһәң дә, ата-әсәңде ташлама.
Ир бала — ата-әсәгә таяу, ҡыҙ бала — өйгә яҡҡан буяу.
Атаны күреп ул үҫер, әсәне күреп ҡыҙ үҫер.

**Аҡыллы фекерҙәр донъяһында**

Ваҡыт, хеҙмәт, намыҫ, белем, үҙ-үҙеңә хужа булыу, кешеләге физик, аҡыл һәм әхлаҡи көс — барлыҡ байлыҡтарҙың сығанағы.

К.Ушинский

Яҡшылыҡ эшләү тураһында һөйләнеү яҡшылыҡ ҡылдым тигәнде белдермәй.

Аристотель

Аҡыл кешегә хеҙмәт итмәһә, ул ҡурҡынысҡа әүерелә.

Софокл

Иң элек яҡшылыҡҡа өйрән, унан зирәклеккә, сөнки беренсеһенән башҡа икенсеһен үҙләштереү мөмкин түгел.

Сенека

Оло әхлаҡ юҡ икән, ундай ерҙә оло шәхестәрҙең булыуы ла шикле.

Р.Роллан

Бүтәндәрҙән башҡа ла йәшәй алам, тип уйлаған бер яңылышһа, минән башҡа йәшәй алмайҙар, тип маһайған икеләтә хаталана.

Ф.Ларошфуко

Ерҙәге бар матурлыҡ — Ҡояштан, тормоштағы бар яҡшылыҡ — кешенән.

М.Пришвин

Мөхәббәт бөтәһен дә талап итә һәм уның быға хаҡы бар.

Людвиг ван Бетховен

Ғашиҡтың ғына кеше тигән исемде йөрөтөргә хаҡы бар.

А.Блок

Ҡаршылыҡтарҙан ҡурҡҡан мөхәббәт — мөхәббәт түгел.

Дж.Голсуорси

Мөхәббәт яуаплылыҡты өҫтәй. Унһыҙ тормош юҡ.

И.Гончаров

Ысын мөхәббәт килмәһә, тормоштоң асылын аңлап булмай.

М.Горький

Мөхәббәт намыҫлы йөрәктәрҙе тиҙ солғап ала.

Д.Алигьери

Дуҫлыҡ менән мөхәббәт — ике бөйөк тойғо, улар кешене бөтөнләй үҙгәртә.

Жан Поль Марат

Мөхәббәт ут кеүек — утын өҫтәмәһәң, һүнә.

М.Лермонтов

Мөхәббәтте йәшереп булмай.

А.Пушкин

Ысынлап яратыу — үҙ-үҙеңде онотоу ул.

Жан-Жак Руссо

Ваҡыт төрлө кешелә төрлөсә үтә.

Шекспир

“Эш күп, ваҡыт етмәй” тип ығы-зығы килгән кешеләр, ғәҙәттә, бер эш тә ҡырмайҙар.

Г.Ликтенберг

Бөйөк кеше үҙ заманынан алда бара, аҡыллы кеше һәр юлда заманы менән йәнәш атлай, ахмаҡ заманына арҡыры тора.

Э.Бауэрнфельд

Үҙҙәре иҫән саҡта күккә күтәрелгән күп кешенең үлгәс һәйкәле булмаясаҡ.

П.Беранже

Ҡайһы бер бәндәләрҙең ҡоро исеме генә бар: уларға яҡындан текләп ҡараһаң, бер нәмәләре лә юҡ икәнде күрәһең.

Ж.Лабрюйер

Йә, хоҙа! Һин кешеләргә алтынды баҡырҙан айырырлыҡ аҡыл биргәнһең, әммә әҙәм аҡтығын тыштан таныrлыҡ тамға һуҡмағанһың.

Эврипид

Ҙур кешегә бәләкәй гонаһтар еңел ғәфү ителә.

М.Эшенбах

Үҙ кейемеңдә кей, үҙ һауытыңдан эс, үҙ икмәгеңде аша — ул саҡта бер кем менән дә бутамаҫтар!

Шамил Анаҡ

Кешеләрҙе мөхәббәт, намыҫ һәм тоғролоҡ матурлай.

Т.Килмөхәмәтов

Донъяла кешеләр ике төр: аҙғындар — тыйнаҡтар, ҡыйыуҙар — ҡурҡаҡтар, дуҫтар — дошмандар, күндәмдәр — киреләр, аҡыллылар — тилеләр, гонаһлылар — изгеләр...

Шамил Анаҡ

Һәр ғаилә - үҙенә күрә бер карап ул... Уның да һәйбәт капитаны булырға тейеш!..

Н.Асанбаев

Мөхәббәт бөтәһен дә аҡлата, ярлыҡата...

М.Кәрим

Еңел килгән бәхет – бәхет түгел,
Эҙләп тапҡан бәхет ҡәҙерле.

Ә.Атнабаев

Бәхетһеҙҙәр аңлай бәхетте.

М.Ғәли

Бәхет бит ул – алтын балыҡ,
Бик тиҙ генә бармай ҡабып.

Г.Юнысова

**Мәҡәлдәр**

Ата булмай атайың ҡәҙерен белмәҫһең, әсә булмай әсәйең ҡәҙерен белмәҫһең.

Бала — уңһа ғына бала, уңмаһа — бәлә.

Бала үҫтерһәң, буйын ғына үҫтермә, аҡылын да үҫтер.

Ҡарға ла балаһына “аппағым” тиер, терпе лә балаһына “йомшағым” тиер.

Ҡыҙ баланың сибәр булыуы яҡшы.

Егет булһа, батыр булһын, ҡыҙ булһа, матур булһын.

Һауаны йондоҙ, ҡатын-ҡыҙҙы сәс матурлай.

Дуҫым, тип серең һөйләмә, дуҫтың да дуҫы булыр, ул да һөйләр дуҫына.

Өйөңдө яҡшы һаҡла, ҡапыл ҡунағың килер; үҙеңде яҡшы һаҡла, ҡапыл әжәлең килер.

Тыныс йәшәргә теләһәң, телеңде тый.

Аҡылы ҡыҫҡаның теле оҙон.

Әсе тел — зәһәр, татлы тел — шәкәр.

Ҡул яраһы бөтөр, тел яраһы бөтмәҫ.

Оҙон тел ғүмерҙе ҡыҫҡартыр.

Һөйҙөргән дә тел, биҙҙергән дә тел.

Таҫма телгә ышанма.

Татлы тел айыу бейетә.

Теле боҙоҡтоң күңеле боҙоҡ.

Тик тормаған тел башҡа бәлә килтерә.

Асыу хәтәр, асыуҙан ғәйбәт хәтәр.

Уйнап һөйләмә, уйлап һөйлә.

Һүҙ эйәһенән алда барып етә.

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.

Ағас башын ел бутай, әҙәм башын һүҙ бутай.

Һүҙҙә тороу — ҙурлыҡ, һүҙҙә тормау — хурлыҡ.

**Хәҙистәр**

Ҡәнәғәт була белеү — ҙур байлыҡ.

Йомшаҡ күңел, асыҡ йөҙ — хазина.

Кешегә зарар итеү һәм үс алыу — енәйәт.

Эште еренә еткереп эшлә.

Баш — аяҡҡа ла баш, ҡулға ла баш, башҡа ла баш.

Башлыҡ булыр өсөн баш ҡына етмәй.

Башһыҙ ҙа баш йөрөтә.

**Миҙгелдәр**

**Тәүге ҡар**

Тәүге ҡарым, елбәҙәгем,
Һағышым, ҡыуанысым.
Һаумы, һаумы, аҡ хыялым,
Наҙ-йырым, йыуанысым.
Юлдарға яу, ҡайындарға,
Муйылдарға, сирендәргә.
Сәстәргә ҡун, керпектәргә,
Ире ал ирендәрҙә.
Күгем зәңгәр, һыуым тулҡын,
Ерем булһын иҫән-һау,
Аҡ юл һалып, аҡ бәхеткә
Аҡ шатлыҡтар булып яу,
Ерем булһын иҫән-һау.

Ф.Рәхимғолова

**Ҡар бөртөктәре**

Елбер-елбер елберләп
Бөркөлгәндәй елбәҙәк,
Сәбәләнеп, туҙынып,
Ҡар һибелә йылҡылдап.
Бер бөртөгө йондоҙҙай,
Бер бөртөгө түңәрәк.
Бер бөртөгө көмөштәй,
Бер бөртөгө күбәләк.
Бер бөртөгө алмастан,
Бер бөртөгө елбәҙәк.
Бер бөртөгө уҡанан,
Бер бөртөгө гел биҙәк.
Эй, ҡар яуа, ҡар яуа,
Ынйы яуа, нур яуа.
Мул тормошҡа ҙур уңыш
Үҫтерергә ул яуа.
Ҡар бөркәнә ҡалалар,
Ҡар ябына далалар.
Йымылдашып ағастар
Ҡарҙан суҡтар тағалар.

С.Ҡудаш

**Хикмәтле ҡар**

Ҡар яуа ла ҡар яуа
Яландарға, ҡырҙарға.
Йоҡлап ятҡан далалар
Күмелә аҡ юрғанға.
Беҙҙең өҫкә лә ҡарҙар
Яуалар ипләп кенә.
— Ҡар түгел, — ти олатай, —
Яуа аҡ икмәк кенә!

С.Муллабаев

**Матур көн**

Ынйы-ынйы ҡарҙар яуа,
Ғәжәп матур көн бөгөн!
Ҡулға тотоп алғы килә
Ҡарҙың һәр бер бөртөгөн.
Бәүелеп-бәүелеп төшә,
Ҡар яуа — матур ниндәй!
Әйтерһең дә, кемдер күктә
Ҙур иләктән он иләй.

С.Әлибаев

**Көҙ биҙәктәре**

Көҙ биҙәгән еркәйемде
Мең биҙәккә,
Әллә япраҡ оса, әллә
Елбәҙәктәр?!
Эй килешә һары күлдәк
Ҡайындарға:
Ә миләштәр ялҡын яулыҡ
Ябынғандар.
Баландарым таҡҡан ҡыҙыл
Муйынсаҡтар.
Ал яулығын болғап ҡала
Йәш уҫаҡтар.
Йондоҙ төҫлө балҡый ана
Көҙ гөлдәре...
Бигерәк аҫыл тыуған ерем
Миҙгелдәре!

Ф.Рәхимғолова

**Алтын көҙ килә еремә**

Тирә-яҡҡа көҙ апай
Һипте һары буяуын:
Һары урман, һары тау
Алып тора күҙ яуын.
Ошо буяу көҙ еткәс,
Ҡаплап ала ер өҫтөн.
Йәп-йәшел ужым ғына
Һаҡлай нисек йәй төҫөн?

М.Дилмөхәмәтов

**Миҙгелдәр**

Һәр миҙгелдең үҙ йәме бар,
Үҙ төҫө бар һәр айҙың.
Зәңгәр сирень, йәшел үлән
Бигерәк йәмләй яҙҙы!
Йәй айҙарын аллы-гөллө

Хуш еҫле сәскә биҙәй.
Ҡыуанып һайраған ҡош та
Шул гүзәллекте һиҙә.
Уңған көҙ урманды буяй
Ҡыҙыл, һары төҫтәргә.
Шунан ҡышҡа ҡала инде
Ергә аҡ төҫ өҫтәргә.
Сиратлап миҙгелдәр ергә
Сағыу биҙәктәр һала.
Шуға йылдың һәр бер айын
Һағынып көтөп алам.

Т.Дәүләтбирҙина

**Ғинуар**

Ғинуар — сатлама һыуыҡтар айы. Иң көслө һыуыҡтар беҙҙең республикала 1959, 1963, 1979 йылдарҙың ғинуарында күҙәтелде. Иғтибарлап ҡараһаң, ҡаты һыуыҡтар һәр 10 йыл һайын ҡабатланып тора. Әммә иң һыуыҡ ғинуар 1969 йылда булды, 30 градуслы һалҡындар теүәл 20 көн буйы торҙо.

Халыҡ ғинуарға ҡарап йәйҙең нисек килеүе тураһында күп һынамыштар әйтеп ҡалдырған. Мәҫәлән, 25 ғинуар ҡояшлы икән — күсмә ҡоштарҙың көньяҡтан иртәрәк ҡайтыуҙарын көт. Ылыҫлы урмандарҙа шыршы турғайы оя ҡора. Улар үҙҙәренең балаларына шыршы, ҡарағай, аҡ шыршының орлоҡтарын ашаталар.

Мышылар ғинуарҙа мөгөҙҙәрен ташлап китә. Тейендәр ҡарағай, шыршыларҙың өлгөргән орлоҡтары менән туҡланалар. Ғинуарҙа көн сәғәт ярымға оҙоная.

Е.Кучеров

**Февраль**

Иң күп ҡар февралдә яуа. Был айҙа ҡаты һыуыҡтар һаҡлана, әммә улар араһында епшек көндәр ҙә күҙәтелә. Температура плюс 9,2 градустан (1970) минус 38,5 (1951) градусҡа тиклем тирбәлергә мөмкин. Аҙыҡ эҙләп мышылар, ҡоралайҙар ҙур аралыҡтарҙы үтәләр. Ҡорҙар ҡайын бөрөһө, алҡаһы, ә һуйырҙар ҡарағай ылыҫы менән туҡлана.

Ҡуяндарҙың, төлкөләрҙең, тейендәрҙең, аҫтарҙың, һуҫарҙарҙың, көҙәндәрҙең “туй уйындары” башлана. Һоро айыуҙарҙың өңдәрендә балалары тыуа. Һыу йылына төшә, балыҡ һәйбәт ҡаба башлай. 1981 йылдың феврале бик йылы булды, беренсе яртыһында ҡар ирей башланы, гөрләүектәр аҡты. Тик был күренеш бик һирәк күҙәтелә, 50-60 йылға бер тапҡыр булыуы мөмкин. 15 февралдә ҡар яуһа, яҙ һуңлап килә, һыуыҡ була. Февраль аҙағында ҡар ирей төшә. Календарь буйынса — ҡыш аҙағы, әммә беҙҙең яҡтарҙа мартты ла ҡыш тип иҫәпләргә мөмкин.

Е.Кучеров

**Март**

Март — яҙҙың тәүге айы. Шулай ҙа был айҙа бурандар ҡотора, ҡарҙар яуа. Ысын фенологик яҙ тик ай аҙағында ғына килә. Ҡар ирей башлау менән йылы яҡтан ҡарғалар ҡайта. Март аҙағында ҡайһы бер үләндәр ҙә "уяна" башлай. Ҡуяндың балалары тыуа. Селдәр парлаша. Күп кенә хайуандар мартта тундарын алмаштыра.

Яҙҙы оҙаҡ ятып селтәрләнеп бөткән епшек ҡарҙан да, ҡыйыҡтарҙа эленеп торған боҙбармаҡтарҙан да, ҡоштарҙың сырҡылдашыуынан да, тәүге йырғанаҡтарҙың сылтырауынан да тойорға була.

Е.Кучеров

## Майҙа тәбиғәт

Майҙы йәшеллек һәм ҡоштар йыры айы тип йөрөтәләр. Ысынлап та, майҙың тәүге көндәрендә үк урман-ҡырҙар йәшел "көлдәгән" кейә. Майҙа һуңғы күсмә ҡоштар — һандуғас, кәкүк, ҡарлуғас ҡайта. Улар оя ҡороп бала сығара. Яҙғы ташҡын кәмей, йылғалар ҙа ярҙарына ҡайта. Тәлмәрйендәр, күп кенә балыҡтар (йәйен, сабаҡ, ажау) был ваҡытта ыуылдырыҡ сәсә. Шуға күрә 10 майҙан 20-һенә тиклем балыҡ тотоу тыйыла.

Майҙа ялан, баҡса эштәренең иң ҡыҙыу мәле. Йәшелсә ултыртыу, бөртөклө культураларҙы сәсеү, уларҙы төрлө ҡоротҡостарҙан, ҡый үләндәренән, ҡырауҙан һаҡлау кеүек хәстәрлектәр етерлек.

Е.Кучеров

## Июль

Июль — йылдың иң эҫе айы. Был айҙа көн оҙонлоғо ҡыҫҡара бара, ә һауа температураһы көндән-көн күтәрелә. Әленән-әле йәшенле ҡойма ямғырҙар яуып үтә. Шуға ла халыҡта июлде "йәшенле ай" тип тә йөрөтәләр.

Был айҙа төрлө емеш-еләк: ҡарағат, ҡурай еләге, сейә өлгөрә. Аҡ бәшмәк, уҫаҡ һәм ҡайын бәшмәге тап ошо айҙа үҫә.

Июлдә ҡорттар иң күп балды йыя. Сөнки был айҙа иң баллы ағас — йүкә — сәскәгә төрөнә. Башҡа баллы ҡырағай үҫемлектәр: айыу ҡурайы, ҡандала үләне, көнбағыш сәскә ата.

Е.Кучеров

## Һүҙлек

**Айыу ҡурайы** — жимолость.

**Ҡандала үләне** — клоповник.

## Август

Август — йәйҙең һуңғы айы. Көндәр аяҙ тора, ҡайһы берҙә бик ҡыҙыу була, шулай ҙа көҙ һулышы һиҙелә. Төндәр еләҫәйә, иртәләрҙә һалҡын ысыҡ төшә. Ай аҙаҡтарында ҡырауҙар төшкөләй.

Баҡсаларҙа ҡыяр, помидор өлгөрә, сейә, крыжовник, алмалар бешә. Витаминдар хазинаһы һаналған гөлйемеш етешә. Ҡыуаҡтарҙа балан, миләш ҡыҙара, муйыл шәрбәтләнә. Сәтләүектәр өлгөрә. Бәшмәктәрҙең күп мәле.

Август айында йыландар үрсей. Ҡайһы бер ҡоштар көньяҡҡа юллана. Кейектәр ҡышҡа әҙерләнә. Бурһыҡтар, тейендәр, йомрандар, алйырҙандар һыуыҡ осорға аҙыҡ запасы әҙерләй.

Е.Кучеров

**Сентябрь**

Сентябрь ике миҙгелдең — көләс йәй менән ҡырыҫ көҙҙөң ҡауышҡан айы. Ай башында һауа бейек, үтә күренмәле була, офоҡтар асыҡ, таҙа тора. Йылыһы көндән-көн һүрелә барһа ла, ҡояш та яҡты йылмая. Артабан күк йөҙө боҙола башлай, тирә-яҡ тәбиғәт көндән-көн үҙгәрә. Ҡырауҙар төшә, ҡайһы берҙә бөтөнләй һыуытып ебәрә. Шулай ҙа сентябрь ҡыҫҡа ғына сыуаҡ мәле — әбейҙәр сыуағы менән ҡыуандыра.

Сентябрҙе халыҡта “алтын ай” тиҙәр. Ағас япраҡтары һарғая, ай урталарынан япраҡ ҡойондары башлана. Урмандарҙа күпләп бәшмәктәр үҫә.

Күсер ҡоштар көньяҡҡа юллана. Торна туптары, кейек ҡаҙҙар, өсмөйөшлө сылбырға теҙелеп, йылы яҡҡа оса. Бөжәктәр ҙә аулаҡ урындарға: ағас ҡабығы аҫтына, тупраҡ араһына ҡаса. Ярғанаттар өңдәренә йәшеренә. Ҡырағай януарҙар ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ запасы хәстәрләй. Балыҡтар, күмәк йыйылып, йылға-күлдәрҙең тәрәнерәк урындарына йөҙә. Бағры ыуылдырыҡ сәсә.

22 сентябрҙә көн менән төн тигеҙләнә. Шунан көндәр ҡыҫҡара, төндәр оҙоная башлай.

Е.Кучеров

**Һау бул, әбейҙәр сыуағы!**

Үҙенең ҡояшлы, йылы көндәре менән ҡыуандырған оҙайлы әбейҙәр сыуағы бөттө. Алда көн оҙоно быҫҡаҡлап яуған ямғырҙары менән көҙгө бысраҡ көндәр көтә беҙҙе. Башҡортостан гидрометеорология үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, 16 октябрҙән көн һыуына: көнбайыштан килгән һалҡын һауа фронты кинәт кенә һауа торошоноң үҙгәреүенә килтерәсәк. Һауа температураһы +8, +9 градусҡа тиклем түбән төшәсәк. Синоптиктар беҙгә был аҙнала ҡар ҡатыш ямғыр вәғәҙә итә. 18 октябрҙән һуң кискеһен 5 градусҡа тиклем туңдырасаҡ. Әммә ҡар ҡатламы ер өҫтөнә ятмай әле.

Е.Кучеров

**Һүҙлек**

**Әбейҙәр сыуағы** — бабье лето
**Быҫҡаҡлау** — моросить

**Октябрь**

Көҙҙөң беренсе һыуыҡ айы. Әсе елдәр иҫә. Күләүектәр боҙ менән ҡаплана. Йыш ҡына ямғырҙар яуа, шуға күрә октябрҙе халыҡта “батҡаҡ айы” тип тә йөрөтәләр. Тәүге ҡар ҙа яуа, ләкин ул шунда уҡ ирей.

Күлдәр, быуалар туңа башлай. Иң аҙаҡҡы күсмә ҡоштар китеп бөтә. Уларға алмашҡа ҡыҙылтүштәр, башҡа ҡышлаусы ҡоштар килә. Айыу, бурһыҡ, алйырҙан йоҡоға тала.

Баҡсаларҙа ағас ултыртыу дауам итә. Япраҡтар тулыһынса тиерлек ҡойолоп бөтә.

Е.Кучеров

**Ҡарасай**

Тәбиғәт татлы йоҡоһона сумырға әҙерләнә. Ҡоро әсе елдәрҙән урмандағы ағастар яланғасланып ҡалған, әйтерһең дә ел япраҡтарҙы өҙгөсләп ергә ташлап, уларҙан алтын балаҫ туҡып йәйгән. Күҙгә тәбиғәттә ни бары бер сағыу төҫтө күрергә була: әллә ҡайҙан алыҫтан утлы күмерҙәй баҙлап ултырған миләштәр иғтибарҙы йәлеп итә. Һалҡын ҡырауҙарҙан шиңеп, һарғайып ҡыуарған үләндәр, ҡоштар тубы — бөтөнөһө лә тереклектең ял итергә әҙерләнеүен белдерә төҫлө.

Октябрь — көҙ уртаһы. Оҙайлы ямғырҙар, һалҡындар төшөү хас был айға. Башҡорт календары буйынса октябрь ҡарасай тип йөрөтөлә. Һауа торошоноң нисек булыуына, көйһөҙлөгөнә ҡарап был айҙы халыҡ: “Октябрь — ни арба, ни сана”, “Октябрь — ҡара бейә, ноябрь — ала бейә” тип әйткән.

2003 йылғы көҙ ғәҙәти булмағанса йылы килде. Әммә быға һөйөнөргә түгел: ҡоро көҙ йәйҙең ҡоро килеүе, уңыштың насар булыуы билдәһе. “Көҙ йылы килһә, ҡыш оҙон була” тигән халыҡ һынамышы ла бар. Фенологтарҙың яҙмаларынан ҡарағанда, 1974, 1999 йылдарҙа ла октябрь ҡоро булған, ә бына 1991, 1997 йылдарҙа көслө ҡойма ямғырҙар күҙәтелгән. 1971, 1978 йылдарҙа ярты метр самаһы ҡар яткан булһа, 1920, 1976 йылдарҙа ай уртаһында ҡышҡы һыуыҡтар төшкән. 1974 йылдың октябре башҡа йылдарҙағыға оҡшамаған иң йылы ай булараҡ тарихта ҡалған. Һауа температурһы +8, +9 градус булған.

Е.Кучеров

**Ноябрь**

Көҙҙөң һуңғы айы, әммә уның урталарында ысын ҡыш башлана. Ноябргә йылдың иң ҡараңғы төндәре тура килә. Көндәр ҡыҫҡа була.

Был айҙа урманда күңелһеҙ һәм тыныс. Аҫ, йәтсә, ҡуяндар тулыһынса “ҡышҡы тун” кейәләр. Күп кенә балыҡтар ҡышҡы йоҡоға талалар.

Ноябрҙе “ҡыш башы” йәки “боҙ айы” тип тә атайҙар.

Е.Кучеров

**Ҡоштар**

Ҡоштар — тәбиғәттең ғәжәйеп бер бүләге ул. Уларҙың файҙаһы баһалап бөткөһөҙ: баҫыуҙарҙы ҡороткос-бөжәктәрҙән, ваҡ кимереүселәрҙән һаҡлайҙар, уңышты арттыралар.

Башҡортостанда 300-ләп ҡош төрө иҫәпләнеп, улар 4 төркөмгә бүленеп йөрөтөләләр: күсмә (беҙҙә оялап, ҡышын көньяҡҡа китәләр), ултыраҡ (йыл буйы Башҡортостанда йәшәйҙәр), күсеп йөрөүсе (беҙҙә лә, башҡа ерҙә лә

йәшәйҙәр), ҡышҡа килеүсе (төньяҡта оя ҡоралар, көҙгә йәки ҡышҡа беҙҙең яҡҡа киләләр) ҡоштар.

“Башҡортостандың ҡыҙыл китабы”на һирәк осрай торған йәки һаҡлауға мохтаж булған 52 ҡоштоң исеме индерелгән. Мәҫәлән, таҙғара, берғаҙан, туғаҙаҡ, ҡауҙы һ.б. “Башҡортостандың ҡоштары” тигән (авторы Э.Ф.Ишбирҙин, 1986 йылда сыҡҡан) китапта был хаҡта тулы мәғлүмәттәр бирелгән.

Ғ.Булатова

**Һүҙлек**

Таҙғара — черный гриф
берғаҙан — пеликан
туғаҙаҡ —дрофа'
ҡауҙы — аист

**Юрауҙар, һынамыштар**

Ағас һуң япраҡ ярһа, йыл ауыр килер.
Ағаста бәҫ күп булһа, бал күп була.
Көҙ оҙон килһә, яҙ һуң килер.
Эт йылы буран була.
Әгәр яңы ай бик асыҡ ялтырап күренһә, һалҡын булыр.
Бесәй мейескә керһә, буран булыр.
Төнө буйы һандуғас һайраһа, ҡояшлы көнгә.
Өйрәктәр туҡтауһыҙ һыуға сумһалар, ямғыр яуыр.
Иртән һыу өҫтөнә томан таралһа — көн ҡояшлы буласаҡ.
Имән сәтләүеге күп булған йылда ҡыш йылы килә.
Миләш уңһа, икенсе йыл арыш уңасаҡ.
Томан күп төшһә, емеш уңыр.
Иртә менән ысыҡ төшһә, көн эҫе буласаҡ.
Мартта йылы булһа, яҙ һалҡын була.
Йәй томан күп булһа, бәшмәк үҫер.
Себештәр бергә йыйылһа, ямғыр була.
Муйыл ныҡ уңһа, иген аҙ булыр.

**Әкиәттәр**

**Өс алтын ҡурсаҡ**

(һинд халыҡ әкиәте)

Бер батша, күрше ил халҡын һынап ҡарарға уйлап, шул илдең солтанына өс алтын ҡурсаҡ ебәрә. Был ҡурсаҡтар бер төҫлө булалар. Ауырлыҡтары, буй-һындары ла бер үк. Ә хаҡына килгәндә, береһе — мең һум, икенсеһе — йөҙ, өсөнсөһө ун һум ғына икән. Ниңә улай булыуы һис кенә лә билдәле түгел, ти.

Солтан бүләкте ала ла үҙенең ярандарына ҡурсаҡтарҙы ҡарарға, уларҙың ниндәй ғилләһе барлығын белергә ҡуша. Бөтә вәзирҙәр, ғалимдар һәм

бүтән белгестәр ҡурсаҡтарҙы әйләндереп-әйләндереп ҡарайҙар. Ләкин бер кем бер нәмә аңламай.

Ярандары белмәгәс, солтан ябай халыҡҡа һарайға инергә рөхсәт бирә.

Бер көндө һарай ҡапҡаһы төбөнә бер егет килә. Уны индерәләр ҙә ҡурсаҡтарҙы күрһәтәләр. Егет уларҙы бик ентекләп ҡарай. Ҡарай торғас, ул ҡурсаҡтарҙың ҡолаҡ тишектәренә туҡтала. Ҡыл ала ла береһенең ҡолағына тыға. Ҡылдың осо ҡурсаҡтың ауыҙынан барып сыға. Икенсе ҡурсаҡты ла ала, ҡыл уның бер ҡолағынан икенсеһенә килеп сыға. Шунан өсөнсө ҡурсаҡты ала. Ҡолағынан индерелгән ҡыл уның йөрәгенә барып етә һәм шунда туҡтай.

Шунан егет солтанға былай ти:

— Был ҡурсаҡтар өс төрлө кешегә оҡшаш. Тәүге ҡурсаҡ — ни ишетһә, шуны лығырлап йөрөй торған кеше. Бындай бәндәгә бер ҙә ышанып булмай. Бының хаҡы арзан. Икенсе ҡурсаҡ бер ҡолағынан кергән һүҙ икенсеһенән сығып китә торған кешегә тартым. Бындай бәндә һүҙҙе аңламай, кәңәште тотмай, еңел аҡыллы була. Унан әллә ниндәй файҙа ла, ул тиклем зыян да юҡ. Бының хаҡы уртаса йөрөй. Ә өсөнсө ҡурсаҡ — ни ишетһә лә, йөрәгенә һалып ҡуя торған, сер һаҡлар кеше. Бының хаҡы бик ҡиммәт.

Солтан был егеттең зирәклегенә аптырай.

— Кем өйрәтте быға һине? — тип һорай.

— Олатайым, — ти егет.

— Кем ул олатайың? Ни эшләй? Нисек донъя көтә? — тип һорай солтан.

— Ул ҡырҡ йыл иген иккән, ҡырҡ йыл көтөү көткән, һикһән йыл халыҡ һүҙен тыңлаған, — тип яуап бирә егет.

— Һуң ул йөҙ алтмыш йыл йәшәгәнме ни?

— Юҡ, һикһәнде генә. Ул иген иккәндә лә, көтөү көткәндә лә ил халҡынан фәһем алып йөрөгән.

— Һуң, минең вәзирҙәрем халыҡтан фәһем алмаймы икән ни?

— Улар халыҡты йә ат, йә фил өҫтөнән генә күрәләр бит, — тигән тапҡыр егет.

**Ғәмһеҙ ҡарт менән йылан**

(ғәрәп халыҡ әкиәте)

Юлдан “өс аяҡлы” ҡарт бара. Тирә-яҡҡа ҡарана. Йырлап та ала. Таяғын ергә тып-тып төртөп, атлай ҙа атлай. Ҡапыл ҡаршыһына йылан килеп сыҡҡан.

— Ҡотҡар мине, шәфҡәтле ҡарт. Иҫән ҡалһам, мөгөҙөмдө һиңә бирәм.

— Нимәнән ҡурҡаһың, мәхлүк?

— Мине үлтерергә киләләр.

Аңра ҡарт оҙон еңен ергә һуҙған. Йылан,ең эсенә кереп, беләгенә уралған. Шунда уҡ суҡмар, күҫәк тотҡан кешеләр килеп еткәндәр.

— Ошолай табан бер йылан тәңгәлләне. Күрмәнеңме, юлсы? — тип һораған береһе.

— Ул мәхлүктә ни үсегеҙ бар?

— Улымды сағып үлтерҙе. Ҡайҙа китте шул яуыз?

— Бынау ҡыуаҡлыҡҡа кереп китте, шикелле.

Суҡмарлы кешеләр киткәс, ғәмһеҙ ҡарт еңен йәнә аҫҡа һуҙған.

— Сыҡ, мәхлүк. Ҡотолдоң. Юлыңда бул.

Йылан төшә башлаған. Кинәт йылан икәне уның иҫенә төшкән дә ҡарттың беләген саҡҡан. Ҡарт ергә ауған.

— Ни эшләнең һин? Мин һине әжәлдән ҡотҡарҙым, ә һин...

— Ә ниңә еңеңә кереттең?

— Ялбарҙың бит.

— Минең йылан икәнде ниңә оноттоң?

— Бик йыуаш күрендең бит.

— Булһа, булғандыр. Ул саҡ йылан икәнемде мин үҙем дә онотҡанмын.

Йылан бер яҡҡа шыуышҡан. Ҡарт юлсы туҙанда ятып үлгән.

## Ишәк менән ат

Бер кешенең ишәге менән аты булған. Бер ваҡыт улар юл буйлап баралар. Ишәк атҡа әйтә икән:

— Миңә ауыр, бының барыһын да илтеп еткерә алмам, бик аҙын ғына булһа ла һин ал минән.

Ат тыңламаған. Ишәк, көсәнеп күтәреүҙән, йығылған да үлгән. Хужа, бөтә йөктө ишәктән алып, ат өҫтөнә тейәгән, өҫтәүенә, ишәктең тиреһен дә һалған.

Ат, үрһәләнеп, кешнәп ебәргән:

— Ах, мин ниндәй бәхетһеҙмен, башыма ниндәй ҙур хәсрәт, ҡайғы төштө. Ишәккә аҙ ғына ла ярҙам итергә теләмәнем, ә хәҙер бына барыһын да, етмәһә, уның тиреһен дә бер үҙем күтәреп барам.

Л.Толстой

## Төлкө менән ҡыҫала

Бер заман төлкө менән ҡыҫала һөйләшеп тора икән. Төлкө үҙенең хәйләкәрлегенә маһайып: “Әйҙә, йүгерешәбеҙ, кемебеҙ уҙыр икән?” — тигән. “Әйҙә һуң, төлкө дуҫ, мин риза”, — тигән ҡыҫала, иҫе китмәйенсә генә. Былар ярыш асҡан. Төлкө йән-фарман сабып киттем, тигәндә генә, ҡыҫала уның ҡойроғона йәбешеп алған, ти. Билдәләнгән урынға әлһерәп килеп еткәс, артына ҡарамаҡсы булып, төлкө ҡойроғон болғаған. Шул саҡ ҡыҫала ысҡынып төшкән дә: “Мин бында һине әллә ҡасандан бирле көтөп торам инде!” — тип әйткән, ти. Ғәжәпләнгән төлкө телдән яҙған хатта.

## Ике иптәш

Урман буйлап ике иптәш китеп бара икән. Уларҙың алдына ҡапыл айыу килеп сыҡҡан. Иптәштәрҙең береһе ағас башына менеп киткән. Икенсеһе юл уртаһында ҡалған. Ул ергә ятып, үлгәнгә һалышҡан.

Айыу уның янына килгән. Битен, сәсен еҫкәп ҡараған, был үлгән икән тип, кире киткән.

Айыу киткәс, теге ағас башындағы кеше төшкән дә көлөп һорай икән:

— Йә, айыу һинең ҡолағыңа ни тине?

— Ҡурҡыныс килгәндә үҙенең иптәшен ташлап киткән кеше — насар кеше, тип әйтте миңә айыу, — тигән икенсе иптәш.

Л.Толстойҙан

**Иң көслөһө — кеше**

Борон-борон заманда бер эт йәшәгән, ти. Көнкүреше ауыр булған. Эт үҙенә хужа эҙләп киткән. Йылға буйында уға бүре осраған. Эт:

— Бүре ағай, һин көслөһөң. Мине үҙеңә алсы! — тип үтенгән.

Бара торғас, бүре шып туҡтаған:

— Әйҙә ҡасайыҡ, ана айыу килә, ул минән көслөрәк, — тип сигенгән.

Уның ҡурҡаҡ икәнен күреп, эт тәүҙә айыуға, унан арыҫланға китеп ҡараған. Иң аҙаҡтан кеше эргәһенә килгән.

— Кешенән дә көслөһө юҡ! Мине үҙеңә алһаңсы! — тип ялынған ул.

Иң көслөһө кеше тип, эт уға һаман да хеҙмәт итә икән.

Халыҡ әкиәтенән

Бик борон заманда булған, ти, был хәл. Бер ярлы ғына кеше, утын ҡырҡып йөрөгәндә балтаһын һыуға төшөрөп ебәргән.

— Берҙән-бер балтам ине! — тип илаған.

Шул саҡ һыу инәһе алтын балта алып сыҡҡан.

— Ошомо һинең балтаң? — тип һораған.

— Юҡ, был түгел, — тигән ярлы.

Һыу инәһе көмөш балта сығарған.

— Юҡ, был да минеке түгел, — тигән ярлы.

Һыу хужаһы уның үҙ балтаһын күрһәткән.

— Ошо, ошо минең балтам! — тип үрелгән теге кеше.

Һыу инәһе:

— Алдашмағаның өсөн һиңә балтаның өсөһөн дә бирәм, — тигән (Ғ.Ғүмәрҙән).

**Шалҡан**

Бабай шалҡан сәскәйне. Шалҡан бик ҙур булып үҫте. Бабай шалҡанды йолҡоп алмаҡсы булды: тарта-тарта, тарта-тарта, тартып сығара алманы, ти.

Бабай ярҙамға әбейҙе саҡырған. Әбей бабайға, бабай шалҡанға тотонған. Эй тарталар-тарталар, эй тарталар-тарталар, тартып сығара алмайҙар, ти, былар.

Әбей ярҙамға ейәнсәрен саҡырған. Ейәнсәр әбейгә, әбей бабайға, бабай шалҡанға тотонған. Тарталар-тарталар, тарталар-тарталар, тартып сығара алмайҙар.

Ейәнсәр ярҙамға Муйнаҡты саҡырған. Муйнаҡ ейәнсәргә, ейәнсәр әбейгә, әбей бабайға, бабай шалҡанға тотонған. Тарталар-тарталар, тарталар-тарталар, тартып сығара алмайҙар икән.

Муйнаҡ Мыяубикәне саҡырған. Мыяубикә Муйнаҡҡа, Муйнаҡ ейәнсәргә, ейәнсәр әбейгә, әбей бабайға, бабай шалҡанға тотонғандар ҙа, эй тарталар, эй тарталар, тартып сығара алмайҙар, ти.

Мыяубикә сысҡанды саҡырған. Сысҡан Мыяубикәгә, Мыяубикә Муйнаҡҡа, Муйнаҡ ейәнсәргә, ейәнсәр әбейгә, әбей бабайға, бабай шалҡанға тотонған. Тарталар-тарталар, тарталар-тарталар, тарта торғас, көскә тартып сығарғандар, ти.

**Һуған ни өсөн әсе булған?**

Борон-борон заманда булған, ти, бер матур ил. Ниндәй генә үҫемлектәр үҫмәгән унда!

Бик матур бер аҡланда ике дуҫ йәшәгән, ти. Һуған малай менән Аҡсәскә ҡыҙ булған улар. Бик татыу булғандар улар. Йәйге йылы ямғыр ҙа шатлыҡ килтергән, ҡояш нурҙары ла шатлыҡ килтергән дуҫтарға.

Көн артынан көн үткән, һалҡын көҙ ҙә еткән. Бер көндө Һуған күҙҙәрен асһа, янында Аҡсәскә юҡ икән. Баҡһаң, төндә һалҡын ҡырау төшкән дә Аҡсәскәнең таждарын һулытып ҡуйған. Иң яҡын дуҫын юғалтҡан Һуған ҡайғыһынан илаған да илаған. Күҙҙәренән әсе күҙ йәштәре аҡҡан.

Бына шуға күрә һуған әсе икән ул.

“Йәншишмә” газетаһынан

**Өйрәк ватылды**

Булатты ауылға алып ҡайттылар. Иртә менән өләсәһе уға йылы, тәмле һөт эсерҙе. Ҡабарып бешкән күмәс телеме тотторҙо. Шуны ҡаймаҡ менән ашарға ҡушты. Сәй яһаны.

Тамағын туйҙырып алғас, Булат ихатаға сыҡты. Унда тауыҡтар ем сүпләй ине. Ә ҡойроҡ-ҡаурыйҙары төрлө төҫкә мансылған әтәс, тирә-йүнде яңғыратып, кикрекләй.

Шул саҡ кескәй малай ҡойма буйлап килгән өйрәк балаларын шәйләп ҡалды. Йүгереп барҙы ла береһен эләктерҙе. Теге үҙе йомшаҡ, үҙе пипелдәй. Ә ҡайҙа һуң бора торған асҡысы? Ергә ҡуйһаң, тегеләренә ҡарай ынтыла. Булат уны ҡабаттан тота. Муйынын икенсе яҡҡа бороп ҡарай. Юҡ, бәпкә буйһонорға теләмәй.

Оҙаҡ булашты Булат. Ниһәйәт, өйрәк балаһы өнһөҙ ҡалды. Ул башҡаса йүгереп тә китмәне, пипелдәмәне лә.

Кескәй малай, өйрәк балаһын ҡулына алып, өйгә инде:

— Өләсәй, өйрәк ватылды, — тип илап ебәрҙе.

— Йә хоҙай, бәпкәмде харап иткәнһең бит, балаҡайым. Эй шул ҡала, балаларҙың башын тимер уйынсыҡтар менән әйләндереп бөтәләр бит, — тип әрнене өләсәһе.

М.Ғиләж

**Ашығыҙ тәмле булһын!**

**Кәбеҫтә билмәне**

Кәбеҫтәне ваҡ ҡына итеп турап, һуған ҡушып, майҙа ҡыҙҙырып алығыҙ. Сей йомортҡа ҡушылған тоҙло һыуҙа ҡамыр баҫығыҙ ҙа, йәйеп, шаҡмаҡлап

киҫегеҙ. Һәр шаҡмаҡҡа ҡыҙҙырылған кәбеҫтә һалып, билмән яһағыҙ. Кәбеҫтә билмәнен ит һурпаһына һалып бешерәләр. Аҡ май, ҡаймаҡ, соус һалып, өҫтәлгә бирәләр.

Ярты кило кәбеҫтәгә ярты кило он, 1-2 баш һуған, үҫемлек майы, сама менән тоҙ, борос, бер йомортҡа алына.

“Йәншишмә” газетаһынан

**Ваҡ бәлеш**

(башҡорт милли ашы)

Онға һөт, йомортҡа, май һәм тоҙ һалып, сөсө ҡамыр баҫырға ла уны 80-85 грамлыҡ өлөштәргә бүлеп йәйергә. Әҙер һимеҙ итте, картуфты һәм һуғанды ваҡ шаҡмаҡтарға турарға, тоҙ, борос һибергә, лавр япрағы һалырға мөмкин. Ҡамырҙың уртаһына 100-120 грамм эслекте өйөп һалырға. Ситтәрен йыйып, түңәрәкләп, уртаһында бәләкәй генә тишек ҡалдырып, бөрөп йәбештерергә. Ҡамырҙан бөкө яһап, тишекте ҡаплап ҡуйырға. Бәлештәрҙе майлы табаға һалырға һәм эленән-әле өҫтәрендәге тишектән һурпа ҡойоп, мейестә 40-45 минут бешерергә. Ваҡ бәлештәрҙе һурпа менән бирәләр.

“Йәшлек”тән

**Лағман**

(үзбәк милли ашы)

Итте шаҡмаҡлап турап ҡыҙарғансы ҡыҙҙыралар. Шунан тәменә ҡарап тоҙ, туҡмаслап туралған кишер, татлы борос, торма өҫтәп, йәнә 8-10 минут тирәһе бешерәләр. Аҙаҡ туралған картуф, һарымһаҡ, помидор һәм томат-пюре өҫтәлә. Ҡыҙыл һәм ҡара борос ҡушып, һурпа ҡойоп, 30-40 минут талғын утта быҡтыралар.

Сөсө ҡамыр баҫып, туҡмас киҫергә лә уны һыуҙа бешереп алырға. Өҫтәлгә тәрән һауыттарҙа өҫтөнә әҙерләнгән итле масса һалып бирелә.

“Йәшлек”тән

## Башҡортса-русса һүҙлек

A

аға́й — брат
ағас — дерево
ағаслыҡ — лесок, роща
ағыу — яд
аҙ — мало
аҙаҡ — потом, после
аҙна — неделя
аҙыҡ-түлек — продукты
ай — луна
айыу — медведь
аҡ — белый
аҡҡош — лебедь
аҡлан — поляна
аҡса — деньги
аҡһаҡ — хромой
аҡһаҡал — старец
аҡыҡ — сердолик
аҡыллы — умный
ары-рға — уставать
аръяҡ — та сторона
ас — голодный
асы — горький
асҡыс — ключ
асыҡ — открытый
ас-ырға — открывать
асыу — гнев
асыш — открытие
аҫ I — низ
аҫ II — горностай
аҫыл — благородный
ат — лошадь
атай — отец
атла-рға — шагать, идти
ат-ырға — стрелять
ау — охота
ауаз — звук
ауыҙ — рот

аҡылһыҙ — глупый
ал — розовый, алый
ала — пестрый
алабуға — окунь
алама — плохой
алйот — глупый
алйырҙан — хомяк
алҡа — серьги
алла — бог, господь
алма — яблоко
алмағас — яблоня
алтын — золото
алыҫ — далеко
ал-ырға — взять, брать
ант — клятва
анһат — легко
аңла-рға —понимать
аңра — тупой
апай — сестра
арзан — дешевый
бал — мед
бала — ребенок
балан — калина
балаҫ — палас
балҡы-рға — сверкать
балта — топор
балыҡ — рыба
бар I — есть
бар II — весь, вся, все
бармаҡ — палец

бар-ырға — идти
баҫҡыс — лестница
баҫым — ударение
баҫыу — поле
батҡаҡ — грязь
батша — царь
батыр — смелый, храбрый
батырлыҡ — подвиг
бат-ырға — тонуть
бауыр — печень
баһа — цена
баш — голова
башҡа — другой
башҡортса — по-башкирски

ауыл — деревня
ауыр — тяжелый
ауыры-рға — болеть
ауырыу — болезнь; больной
ахмаҡ — глупый
аш — суп; пища
аша-рға — кушать, есть
ашҡаҙан — желудок
ашлыҡ — зерно
ашхана — столовая
ашъяулыҡ — скатерть
аяҙ — ясный, безоблачный

## Б

бабай — старик, дед
баҙ — погреб
бай — богач; богатый
байрам — праздник
баҡса — сад
баҡыр — медь; медный
беренсе — первый
бесәй — кошка, кот
бесән — сено
бешер-ергә — варить
биҙрә — ведро
биҙәк — узор, украшение
бик — очень
бил — поясница, талия
билдә — знак
билдәле — известный, известно
бир-ергә — дать, подать
бит I — лицо
бит II — страница, лист
бит III — ведь, же
бишле — пятерка
боҙ — лед
боҙлауыҡ — гололед
боҙоҡ — испорченный
боҙол-орға — портиться
бойҙай — пшеница
бойоҡ — грустный
болан — олень
болон — луг
болот — облако, туча

башла-рға — начинать
башта — вначале, сперва
бая — недавно
беҙ I — мы
беҙ II — шило
бейек — высокий, высоко
бейе-ргә — танцевать
бейеүсе — танцор, танцовщица
бейә — кобыла
белгес — специалист
белдереү — объявление
белем — образование
бел-ергә — знать
беләҙек — браслет
бергә — вместе
бул-ырға — находиться
бумала — кисть, помело
буран — метель
бурһыҡ — барсук
бутҡа — каша
буш — пустой
бушлай — бесплатно
бүлмә — комната
бүләк — подарок
бүре — волк
бүрек — шапка
бүтән — другой
быҙау — теленок
быйыл — в этом году
был — это, эта, этот
былтыр — в прошлом году

бында — здесь
бындай — такой
бысаҡ — нож
бысҡы — пила
бысраҡ — грязь
быу — пар
быуа — пруд
быуат — век, столетие
быяла — стекло
бәбәк — росток
бәйләүес — послелог
бәлеш — пирог

боронғо — древний
борос — перец
бор-орға — повернуть
ботаҡ — ветка
бөгөн — сегодня
бөҙрә — кудрявый
бөжәк — насекомое
бөйөк — великий

бөйөр — почка
бөркөт — орел
бөрө — почки
бөтөн — целый, весь
бөтөр-өргә — завершить
бөртөк — штука
буй — длина; рост

В

ваҡ — мелкий
ваҡиға — событие
ваҡыт — время, срок
ватан — родина, отечество
ватыҡ — осколок; разбитый
вариҫ — наследник
выждан — совесть
вәғәҙә — обещание
вәкил — представитель

**Г**

гөл — цветок
гөлйемеш — шиповник
гөлләмә — букет
гүзәл — красивый, прекрасный
гүйә — будто, словно
гәлсәр — хрусталь
гәрәбә — янтарь
гәүһәр — бриллиант

**‰**

ғаилә — семья
ғалим — ученый
ғашиҡ — влюбленный
ғилем — наука, знание
ғилми — научный
ғорур — гордый

бәлки — может быть
бәлә — беда
бәләкәй — маленький
бәрәс — ягненок, козленок
бәрхәт — бархат
бәҫ — иней
бәхет — счастье
бәхетле — счастливый
бәхетһеҙ — несчастный
бәхәс — спор
бәшмәк — гриб
дарыу — лекарство
дауала-рға — лечить
дауахана — больница
дегәнәк — лопух, репейник
дин — религия, вера
диңгеҙ — море
доға — молитва
донъя — мир, вселенная
дошман — враг
дөгө — рис
дөйөм — общий
дөйә — верблюд
дөрөҫ — верный, правильный
дуҫ — друг
дуҫлаш-ырға — подружиться
дуҫлыҡ — дружба
дүшәмбе — понедельник
дымлы — влажный
дәрес — урок
дәреслек — учебник
дәфтәр — тетрадь

### ҙ

ҙур — большой
ҙурай-ырға — расти, взрослеть

### Е

ебәк — шелк
егет — парень, юноша
егәрле — трудолюбивый
еҙнә — зять

ғүмер — жизнь
ғәҙел — справедливый
ғәҙәт — привычка
ғәжәп — удивительный
ғәйеп — вина
ғәскәр — войско

### Д

дала — степь
дан — слава
данлыҡлы — знаменитый
ентекле — подробный
еңгә — невестка
еңел — легкий
тең-ергә — побеждать
еңеү — победа
еп — нитка
ер — земля; почва
ерек — ольха
ерән — рыжий
еҫ — запах
етди — серьезный
етеҙ — быстрый
етем — сирота

еүеш — мокрый, сырой

### З

заман — время, эпоха
замандаш — современник
зарар — вред
зарарлы — вредный
зая — напрасно
зинһар — пожалуйста
зирәк — сообразительный
зиһен — ум, разум
зөбәржәт — изумруд

зыян — вред
зәңгәр — голубой

### И

игеҙ, игеҙәк — двойняшки
иген — хлеб, зерно

ейән — внук
ейәнсәр — внучка
ел — ветер
елһеҙ — безветренный
еләк — ягода
емеш — плод, фрукт
емеш-еләк — фрукты
ен — бес, черт
илт-ергә — нести, вести
илһам — вдохновение
иләк — сито
имза — подпись
имеш — якобы, как будто
имтихан — экзамен
имән — дуб
ин-ергә — входить
инеш I — родник, ручей
инеш II — введение
инәй — тетя
иңкеш — шмель
иптәш — товарищ
ир — муж; мужчина
ирек — свобода
ирен — губа
иркен — свободный
иркә — избалованный
иркәлә-ргә — ласкать
иртүк — ранним утром
иртә — утро; рано
иртәгә — завтра
исем I — имя
исем II — имя существительное
исмаһам — хотя бы
иҫерек — пьяный, пьяница
иҫке — старый
иҫкәрмә — примечание
иҫтәлек — память
иҫән — живой
иҫәнләш-ергә — здороваться
иҫәплә-ргә — считать
иҫәр — глупый
ит — мясо
итек — сапог
иғлан — объявление, афиша
иғтибар — внимание
иҙән — пол
ижад — творчество
ижади — творческий
ижек — слог
ижтимағи — социальный
изге — святой; священный
иш — пара
ишек — дверь
ишет-ергә — слышать
ишкәк — весло
ишәк — осел

## Й

йоғошло — заразный
йоҙаҡ — замок
йоҙаҡла-рға — запирать
йоҙроҡ — кулак
йоҡа — тонкий
йоҡла-рға — спать
йоҡо — сон
йола — обряд, обычай
йома — пятница
йомаҡ — загадка
йомарт — щедрый
йомғаҡ — клубок
йомортҡа — яйцо
йомран — суслик
йомро — круглый
йомшаҡ — мягкий
йондоҙ — звезда

йонсоу — утомленный
йотом — глоток
йөҙ I — лицо
йөҙ II — сто
йөҙөк — перстень
йөҙ-өргә — плавать
йөк — груз

йөн — шерсть
йөрө-ргә — ходить, идти
йөрәк — сердце
йүгер-ергә — бегать

ифрат — очень
ихата — двор
ихлас — чистосердечно
ихтимал — вероятно
йығыл-ырға — падать
йыйнаҡ — аккуратный
йыйылыш — собрание
йыйынтыҡ — сборник
йый-ырға — собирать
йыл — год
йылан — змея
йылға — река
йылғыр — шустрый, ловкий
йыллыҡ — годовой
йылмай-ырға — улыбаться
йылмайыу — улыбка
йылтыр — блестящий
йылы — теплый
йылын-ырға — согреться
йыр — песня
йырла-рға — петь
йырсы — певец, певица
йыртҡыс — хищник; зверь

йыуан — толстый
йыуаш — кроткий, смирный
йыуын-ырға — умываться
йыу-ырға — мыть
йыһан — Вселенная
йыш — частый; часто
йәғни — то есть
йәй — лето
йәйге — летний
йәйғор — радуга
йәйәү — пешком
йәйәүле — пешеход
йәки — либо, или
йәкшәмбе — воскресенье
йәл — жалко
йәллә-ргә — жалеть
йәм — красота; прелесть
йәмғиәт — общество
йәмле — красивый
йәмлә-ргә — украшать
килешеү — договор

йүгән — узда, уздечка
йүкә — липа
йүләр — глупый
йүткер-ергә — кашлять
йәмһеҙ — некрасивый
йән — душа
йәнле — живой
йәнлек — зверь
йәннәт — рай
йәнһеҙ — мертвый, неживой
йәнә — опять, снова, еще, и
йәнәш — рядом, около
йәрминкә — ярмарка
йәрәхәт — рана, травма
йәтим — сирота
йәһәт — быстро
йәш I — молодой
йәш II — возраст; год
йәш III — слеза
йәшелсә — овощ, овощи
йәшен — молния, гроза
йәшен-ергә — прятаться
йәшерен — тайный, секретный
йәшмә — яшма
йәштәр — молодежь
йәштәш — ровесник
йәшә-ргә — жить

## К

кейеҙ — войлок, кошма
кейем — одежда
кей-ергә — надевать
кейәү — жених; зять
кем — кто
кер-ергә — входить
кесе — младший
кесерткән — крапива
кеүек — как будто, вроде
кеш — соболь
кеше — человек
килен — сноха
кил-ергә — приходить
килеш — падеж
көньяҡ — юг; южный

килтер-ергә — приносить
киләсәк — будущее; будущий
киндер — конопля
кинйә — младший (из детей)
киң — широкий
кипкән — засохший, сухой
кире — обратный; упрямый
кireһенсә — наоборот
кис — вечер
кисен — вечером
кисеү — брод, переправа
кисә — вчера
кисәге — вчерашний
киҫ-ергә — резать
киҫәк — кусок
кит-ергә — уходить
кишер — морковь
көҙ — осень
көҙгө I — зеркало
көҙгө II — осенний
көҙөн — осенью
көй — мелодия
көйөн-өргә — горевать
көйә — моль
көйәнтә — коромысло
көл — пепел
көлкө — смех
көлкөлө — смешной, забавный
көл-өргә — смеяться
көләмәс — анекдот
көмөш — серебро
көн — день
көнбағыш — подсолнух
көнбайыш — запад; западный
көндөҙ — днем
көндөҙгө — дневной
көнкүреш — быт
көнсығыш — восток; восточный
күренекле — видный
көпә-көндөҙ — средь бела дня
көрт — сугроб
көрәк — лопата
көрән — коричневый
көрәш — борьба
көрәш-ергә — бороться
көс — сила, мощь
көскә — с трудом
көслө — сильный
көтмәгәндә — неожиданно
көт-өргә — ждать
көтөү — стадо
көтөүсе — пастух
күберәк — часто
күбәләк — бабочка
күгәрсен — голубь
күҙ — глаз
күҙгә-күҙ — с глазу на глаз
күҙлек — очки
күҙәт-ергә — следить
күк I — синий
күк II — небо
күл — озеро
күлдәк — рубашка
күләгә — тень
күмер — уголь
күмәк — много
күнәк — ведро
күңел — душа
күңелле — веселый
күңелһеҙ — невеселый
күп — много
күпер — мост
күплек — множественное число
күпме — сколько
күпселек — большинство
күптән — давно
күптәнге — давнишний
ҡайнат-ырға — кипятить

күр-ергә — видеть
күркә — индейка
күрше — сосед
күрәһең — видимо
күстәнәс — гостинец
күтәр-ергә — поднимать
кәбеҫтә — капуста
кәбән — стог
кәзә — коза
кәйеф — настроение
кәкре — кривой
кәкүк — кукушка
кәләш — невеста
кәм — меньше
кәңәш — совет
кәрәҙ — соты
кәрәк — надо, нужно
кәрәкле — нужный
кәсер — дробь

## Ҡ

ҡабалан — спешно, торопливо
ҡабат — раз; снова; повторно
ҡабатла-рға — повторять
ҡабыҡ — кора; кожура
ҡабым — кусок
ҡабырсаҡ — ракушка
ҡағиҙә — правило
ҡағыҙ — бумага
ҡаҙ — гусь
ҡаҙаҡ — гвоздь
ҡаҙ-ырға — копать, рыть
ҡайғы — горе, печаль
ҡайҙа — где
ҡайҙалыр — где-то
ҡайҙан — откуда
ҡайнар — горячий
ҡартлыҡ — старость
ҡарун — скупой
ҡаршы — против
ҡаршыла-рға — встречать
ҡасаба — городок, поселение
ҡайны — тесть; свекор
ҡайсы — ножницы
ҡайт-ырға — возвращаться
ҡайһы — какой
ҡайын — береза
ҡала — город
ҡалаҡ — ложка
ҡалдыр-ырға — оставлять
ҡалтыра-рға — дрожать
ҡалын — толстый; густой
ҡал-ырға — оставаться
ҡама — выдра
ҡамасаула-рға — мешать
ҡамыр — тесто
ҡан — кровь
ҡанат — крыло
ҡапҡа — ворота
ҡапҡас — крышка
ҡапыл — внезапно
ҡар — снег
ҡара — черный
ҡарабойҙай — гречиха, гречка
ҡарағай — сосна

ҡарағат — смородина
ҡараҡ — вор
ҡарама — вяз
ҡараңғы — темный
ҡарар — решение
ҡара-рға — смотреть
ҡараш — взгляд
ҡарға — ворона
ҡарлуғас — ласточка
ҡармаҡ — удочка
ҡарсыға — ястреб
ҡарт I — старик
ҡарт II — старый
ҡартай-ырға — стареть
ҡорал — оружие
ҡоралһыҙ — безоружный
ҡорбан — жертва
ҡорған — шторы, занавески
ҡоро — сухой

ҡасан — когда
ҡасандыр — когда-то
ҡас-ырға — убегать
ҡат — слой; этаж; раз
ҡатмарлы — сложный
ҡаты — твердый
ҡатын — жена
ҡатыш — смешанный
ҡауша-рға — теряться
ҡауын — дыня
ҡаһарман — герой
ҡаһарманлыҡ — героизм
ҡаш — бровь
ҡашығаяҡ — посуда
ҡая — скала
ҡеүәт — сила, мощь
ҡиммәт — дорогой
ҡиәфәт — внешность
ҡоҙа — сват
ҡоҙағый — сваха
ҡоҙала-рға — сватать
ҡоҙоҡ — колодец
ҡойма — забор, ограда
ҡоймаҡ — блины, оладьи
ҡойон — смерч
ҡойроҡ — хвост
ҡол — раб
ҡолаҡ — ухо
ҡолон — жеребенок
ҡом — песок
ҡомалаҡ — хмель
ҡомһоҙ — жадный
ҡондоҙ — бобр
ҡор — тетерев

ҡоролоҡ — засуха
ҡорос — сталь
ҡотҡар-ырға — спасать
ҡош — птица
ҡояш — солнце
ҡуҙғалаҡ — щавель
ҡуйы — густой
ҡул — рука
ҡултамға — подпись
ҡулъяҙма — рукопись
ҡулъяулыҡ — платочек
ҡунаҡ — гость
ҡупшы — нарядный
ҡурғаш — свинец
ҡурҡаҡ — трус
ҡурҡыныс — страшный
ҡурҡ-ырға — бояться
ҡурсаҡ — кукла
ҡур-ырға — жарить
ҡусты — братишка
ҡушамат — прозвище
ҡуян — заяц; кролик
ҡыҙ — девочка, девушка
ҡыҙҙыр-ырға — жарить
ҡыҙыҡ — интересный
ҡыҙыл — красный
ҡыҙыу — горячий, жаркий
ҡыйбат — дорого
ҡыйыу — смелый
ҡыйыш — кривой
ҡылыҡ — нрав, характер
ҡылым — глагол
ҡылыс — сабля, меч
ҡырағай — дикий

ҡырҡа — наотрез
ҡырмыҫҡа — муравей
ҡырыҫ — суровый, строгий
ҡысҡыр-ырға — кричать

ҡыҫала — рак
ҡыҫҡа — короткий
ҡыҫҡаса — вкратце
ҡыҫҡаһы — одним словом
ҡытыҡла-рға — щекотать

матди — материальный
матдә — вещество
матур — красивый
мауыҡтырғыс — увлекательный
махсус — специальный
мейе — мозг
мейес — печь
мендәр — подушка
менән — с, со, вместе с

ҡытыршы — шершавый
ҡыуаҡ — куст
ҡыуаныс — радость
ҡыш — зима
ҡышын — зимой
ҡыяр — огурец
ҡәбер — могила
ҡәбилә — племя
ҡәҙерле — дорогой; уважаемый
ҡәйнә — свекровь; теща
ҡәләм — карандаш
ҡәнәғәт — довольный
ҡәрҙәш — родственник
ҡәтғи — категорически

## Л

лайыҡ — достойный
ләм — ил
ләззәт — удовольствие
ләкин — но

## М

мажара — приключение
май — масло
майҙан — площадь
маймыл — обезьяна
маҡсат — цель
маҡтансыҡ — хвастун
мамыҡ — хлопок
маңлай — лоб
мут — озорной
мылтыҡ — ружье
мышы — лось
мәғариф — образование
мәғлүмәт — сведение
мәғәнә — смысл, значение
мәҙәни — культурный
мәҙәниәт — культура
мәжлес — пир
мәй — *разг.* выпивка
мәкерле — коварный
мәктәп — школа
мәҡәл — пословица
мәҡәлә — статья
меҫкен — жалкий; бедняга
миҙгел — время; сезон
милек — имущество
милли — национальный
милләт — нация
миләш — рябина
мин — я
миндә — у меня
мине — меня

минеке — мой, моя, мое
минеңсә — по-моему
миң — родинка
мираҫ — наследство
михнәт — страдание
моң — мелодия
мотлаҡ — обязательно
мөдир — заведующий
мөйөш — угол
мөмкин — можно
мөнәсәбәт — отношение
мөрәжәғәт — обращение
мөхит — среда
мөхәббәт — любовь
мөһабәт — величавый
мөһим — важный
мөһөр — печать
муйыл — черемуха
муйын — шея
мунса — баня
муйынса — ожерелье
нисәнсе — который
нөктә — точка
нур — луч
ныҡ — крепкий
ныҡыш — упорный
нәҙек — тонкий
нәмә — вещь
нәҫел — род
нәфис — изящный
нәфрәт — ненависть
нәшриәт — издательство

## О

оҙаҡ — долго

мәл — время, пора
мәмерйә — пещера
мәңге — вечно
мәрхәмәтле — милосердный
мәсет — мечеть
мәсьәлә — задача; проблема
мәҫәл — басня
мәҫәлән — например
мәтрүшкә — душица
мәхлүк — тварь; создание
мәшһүр — прославленный
мәшәҡәт — забота

### Н

наҙ — ласка, нежность
наҙан — неграмотный
намыҫ — честь
насар — плохой
ни — что
никах — брак
нимә — что
ниндәй — какой
нисбәт — соотношение
нисек — как
нисә — сколько
отҡор — шустрый
отош — выигрыш
ошо — этот, это, эта
ошоғаса — до сих пор
ошолай — так, вот так
ошонда — здесь, тут
оя — гнездо
оялсан — робкий
оял-ырға — стыдиться
оят — стыд
оятһыҙ — бессовестный

### Ө

өҙләкһеҙ — беспрерывно
өҙ-өргә — рвать
өй — дом
өйлән-ергә — жениться
өйөм — куча, груда
өйөр — табун
өйрәк — утка
оҙаҡламай — скоро
оҙат-ырға — провожать
оҙон — длинный
оҙонлоҡ — длина
оҙонса — продолговатый
ожмах — рай
ойошма — организация
оҡшаш — похожий
оҡшашлыҡ — сходство
олатай — дедушка
оло — старший; старый
олпат — солидный
он — мука
онот-орға — забывать
орлоҡ — семя; зерно
ос — конец; вершина
осҡон — искра
осло — острый
осор — период, время
ос-орға — летать
осраҡ — случай
осраҡлы — случайный
осһоҙ — дешевый
оҫта — мастер, умелец
оҫталыҡ — мастерство
өсәүләп — втроем
өҫ — верх
өҫкө — верхний
өҫтә — наверху
өҫтәге — верхний
өҫтәл — стол
өтөр — запятая
өшө-ргә — мерзнуть

### П

пак — чистый
пәйғәмдәр — пророк
пәрҙә — занавес

### Р

риза — согласен
ризалыҡ — согласие
ризыҡ — пища, еда
рөхсәт — разрешение
русса — по-русски

өйрән-ергә — учиться, изучать
өлгө — образец; пример
өлгөр — быстрый, проворный
өлгөр-өргә — успевать
өлгәш — успеваемость
өлкә — область
өлөш — часть, доля
өмөт — надежда
өн I — голос; крик; звук
өн II — явь
өндәш-ергә — сказать
өн — нора, берлога
өрк-өргә — пугаться
өр-өргә I— дуть, веять

өр-өргә II — лаять
өрәк — привидение
өс — три
өсмөйөш — треугольник
өсөн — чтобы, ради, для, за
саған —клен
сағыу — яркий (о цвете)
сағыштырма — сравнительный
саҙаҡа — милостыня
сайыр — смола
саҡрым — верста
саҡыр-ырға — звать
сал — седой
салбар — брюки
салғы — коса
салҡан — навзничь
салыш — косой
сама — мера
самала-рға — рассчитывать
самалы — умеренный
самаһыҙ — чрезмерно
саң — пыль
саңғы — лыжи
сара — мера, средство
сараһыҙ — безвыходный
сарлаҡ — чайка
сатан — хромой

рух — дух, душа

рәйес — председатель
рәнйеү — сильно обижаться

рәсем — рисунок
рәсми — официально
рәссам — художник
рәт I — ряд
рәт II — раз
рәүеш I — вид
рәүеш II — наречие
рәхимһеҙ — безжалостный
рәхмәт — спасибо
рәхәт — удовольствие
рәхәтлән-ергә — наслаждаться
рәшәткә — решетка

## С

сабый — младенец
сабыр — терпеливый
селәүсен — червь
семтем — щепотка
сепрәк — тряпка

сер — тайна
серек — гнилой
серле — таинственный
серәкәй — комар
сибек — слабый
сибәр — красивый
сиг-ергә — вышивать
сик — граница
сикһеҙ — безграничный
синфи — классовый
синыф — класс
сиңерткә — кузнечик
сир — болезнь
сират — очередь
сиркәү — церковь
сисен-ергә — раздеваться
ситлек — клетка
ситса — ситец
сифат I — качество

сатлама — трескучий

сауҙа — торговля
сауҙагәр — торговец

сауҡалыҡ — березняк
саф I — чистый
саф II — ряд, строй
сая — бойкий
саян — скорпион
себен — муха
себеш — цыпленок
сей — сырой; неспелый
сейә — вишня
сел — рябчик
селпәрәмә — вдребезги
селтәр I — кружево, тюль
селтәр II — нагрудник
селән — цапля
сүп — мусор
сүпрә — дрожжи, закваска
сүс — волокно
сыбар — пестрый
сыбыҡ — прут
сыбыртҡы — кнут
сығанаҡ — источник
сыҒ-ырға — выходить
сығыш — выступление
сыҙамлы — терпеливый
сыҙа-рға — терпеть
сыйырсыҡ — скворец
сынаяҡ — чашка
сынйыр — цепь
сысҡан — мышь
сыуаҡ — ясный, солнечный
сәбәп — причина
сәғәт — час
сәй — чай
сәйгүн — чайник
сәйер — странный
сәйнә-ргә — жевать
сәйәси — политический
сәйәхәт — путешествие
сәләм — привет
сәләмәт — здоровый

сифат II — имя прилагательное
сихри — таинственный
сихырсы — колдун, волшебник
соҡор — яма
сос — ловкий
сослоҡ — ловкость
сөгөлдөр — свекла
сөйәл — бородавка
сөсө — пресный
суйын — чугун
суҡ — гроздь, кисть
суҡыш — клюв
суртан — щука
сусҡа — свинья
сүкеш — молоток
сүл, сүллек — пустыня
сүмес — ковш

**Т**

таба — сковорода
табиб — врач
табын — накрытый стол
таб-ырға — найти
табыш — прибыль; находка
тағы — еще, опять, снова
таҙа — чистый
таҙалыҡ — чистота
таҙарт-ырға — чистить
таж — корона
тай — жеребенок
тайғаҡ — скользкий
таҡмаҡ — частушка
таҡта — доска
тал — ива; верба
талап — требование
талапсан — требовательный
талаш — ссора
талаш-ырға — ссориться
талғын — плавный
тамаҡ — горло
тамам — окончательно
тамаша — зрелище
тамашасы — зритель
тамға — знак

сәләмәтлек — здоровье
сәм — честолюбие
сәнғәт — искусство
сәнске — вилка
сәнскеле — колючий
сәңгелдәк — колыбель
сәс — волос
сәс-ергә — сеять
сәскә — цветок
сәсән — импровизатор
сәтләүек — орех
сәүкә — галка
сәхнә — сцена
тапшыр-ырға — передавать
тапшырыу — передача
тар — узкий
тараҡ — расческа
тара-рға — расчесывать
тарих — история
тармаҡ — отрасль
тартма — ящик
тары — просо
тасуири — выразительно
таҫма — лента
таҫтамал — полотенце
татлы — сладкий
татыу — дружный
тау — гора
тауар — товар
таулы — горный
тауыҡ — курица
тауыш — голос
тауышлан-ырға — шуметь
тауышһыҙ — бесшумный
таш — камень
ташбаҡа — черепаха
ташҡын — наводнение
ташлама — уступка, скидка
ташландыҡ — заброшенный
ташла-рға — бросать, кидать
ташы-рға — таскать, носить
таяҡ — палка
таян-ырға — опираться
таяныс — опора

тамсы — капля
тамуҡ — ад
тамыр — корень
тана — телка
танау — нос
танылған — известный
танытма — удостоверение
таны-рға — узнавать
таныш — знакомый
таныш-ырға — знакомиться
таң — рассвет
таңғы — утренний
тапҡыр — раз
тел — язык
телдән — устно
телем — ломоть
телмәр — речь
телсе — языковед, лингвист
телһеҙ — немой
теләк — желание
телә-ргә — желать, хотеть
тере — живой
терел-ергә — оживать
теркәүес — союз
терпе — еж
терһәк — локоть
теүәл — ровно, точно
теш — зуб
тешлә-ргә — кусать
тигеҙ — ровный, гладкий
тиҙ — быстро
тиҙҙән — скоро
тиҙлек — скорость
ти-ергә — говорить, сказать
тик — только, лишь
тиклем — до
тикшер-ергә — проверять
тиле — глупый
тимер — железо
тимәк — значит, итак
тиң — равный, подобный
тир — пот
тире — шкура; кожа
тирлә-ргә — потеть

теге — тот, та, то
тегеләй — туда
тегендә — там
тег-ергә — шить
тейен — белка
тейеш — должен
тейешле — должный
тейешһеҙ — неуместный
тоҙ — соль
тоҙла-рға — солить
тоҙло — соленый
тоҙһоҙ — несоленый
тойғо — чувство
той-орға — чувствовать
тоҡ — мешок
тоҡом — племя, род; порода
тол — вдова, вдовец
толом — коса
толоп — тулуп, шуба
томан — туман
торлаҡ — жилище
тормош — жизнь
торна — журавль
тор-орға — стоять
тотҡа — ручка, рукоятка
тотҡон — узник
тотон-орға — держаться
тот-орға — держать
тотош — целиком
тояҡ — копыто
төҙ — прямой; меткий
төҙөлөш — стройка
төҙ-өргә — строить
төҙәт-ергә — исправлять
төйлөгән — коршун
төймә — пуговица
төйөн — узел
төйәк — родная земля
төлкө — лиса
төн — ночь
төнгө — ночной
төнөн — ночью
төньяҡ — север, северный

тирмә — юрта
тирмән — мельница
тирәк — тополь
тирә-яҡ — окрестность
тиҫкәре — упрямый
тиҫтә — десяток
тишек — дыра
тоғро — верный
төрки — тюркский
төркөм — группа
төрлө — разный
төрмә — тюрьма
төҫ — цвет, окраска
төҫлө I — цветной
төҫлө II — как, словно
төтөн — дым
төш I — сон
төш II — полдень
төш-өргә — спускаться
туғай — луг
туған — родственник
туғыҙ — девять
туҙан — пыль
туй — свадьба
туҡ — сытый
туҡлан-ырға — питаться
туҡлыҡлы — сытный
туҡмас — лапша
туҡма-рға — бить
туҡталыш — остановка
туҡтат-ырға — останавливать
туҡта-рға — останавливаться
туҡтауһыҙ — беспрестанно
туҡһан — девяносто
туҡыма — ткань, материя
тула — сукно
тулҡын — волна
тултырыусы — дополнение
тулы — полный
тулыһынса — полностью
тумыртҡа — дятел
тун — шуба
туң — мерзлый

төп I — дно
төп II — основной
төпһөҙ — бездонный
төр — вид, разновидность
тура — прямой
турала — о, об, обо
тураһында — о, об, обо, про
турғай — воробей
түбә — крыша
түбән — низкий
түбәнге — нижний
түбәндәге — следующий
түгел — не
түҙем — терпение
түҙемле — терпеливый
түҙ-ергә — терпеть
түлә-ргә — платить
түләүле — платный
түләүһеҙ — бесплатный
түңәрәк — круглый
түтәл — грядка
түшәк — постель
түшәм — потолок
тығыҙ — тесный
тыйнаҡ — скромный

тылсымлы — волшебный
тымау — насморк
тымыҡ — тихий, спокойный
тын — тихий
тынлыҡ — тишина
тыныс — спокойный
тыныслыҡ — мир
тыңла-рға — слушать
тырма — грабли
тырнаҡ — ноготь
тырыш — усердный
тырышлыҡ — усердие
тырыш-ырға — стараться
тыуған — родной
тышҡы — внешний
тышҡа — на улицу; наружу
тышта — на улице; снаружи
тәбиғәт — природа
уҡа — позумент

туң-ырға — замерзнуть
туп — мяч
тупаҫ — грубый
тупраҡ — почва, земля
тәҙрә — окно
тәжрибә — опыт
тәлмәрйен — лягушка
тәм — вкус
тәмлә-ргә — пробовать
тәмһеҙ — невкусный
тәмәке — табак
тән — тело
тәнҡит — критика
тәнәфес — перерыв
тәңкә — монета
тәңре — бог, всевышний
тәпке — мотыга
тәпәш — низкий
тәрбиә — воспитание
тәрбиәле — культурный
тәрбиәсе — воспитатель
тәржемә — перевод
тәржемәсе — переводчик
тәртип — порядок
тәртипһеҙ — невоспитанный
тәрән — глубокий
тәтәй — игрушка
тәүге — первый
тәүҙә — сначала
тәүлек — сутки
тәүәккәл — решительный
тәьҫир — влияние

**У**

уғры — вор
ужым — рожь
уй — мысль
уйламағанда — нежданно
уйла-рға — думать
уйна-рға — играть
уйсан — задумчивый
уйын — игра
уҡ — стрела
ут — огонь

уҡлау — скалка
